*Беҙҙең тормошта "бурыс" һүҙе ниңәлер килерәк мәғәнә ала бара. Күптәр бурыс тойғоһо уларҙы сикләй һәм ниндәйҙер мәлдә йәшәргә ҡамасаулай, тип иҫәпләй. Ә минең өсөн бурыс азатлыкты һәм бәхетте аңлата. Лидерлыҡ та, ысын уңыш та нисек тура килә - шулай эшләгәндәргә түгел, тейешенсә эшләгәндәргә генә килә.*

**Робин ШАРМА.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №7 (373)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Заман талап итә:**

электрон хеҙмәтте камиллаштыр



4

**Беренсе мөхәббәт...**

Ул ысын яратыуымы, әллә үҙ-үҙеңде алдау ғынамы?



6

**Миндә боронғолоҡ йәшәй,**

йәғни Минең тормошом ата-бабам тарихынан айырылғыһыҙ



8-9

**Һауығыуға өмөт ошонда йәшәй...**

Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы тураһында бер кәлимә һүҙ



12

14 ТВ-программа


ҺӨЙӨНСӨ!



# ХАЛЫҠ ТАРИХЫН...

## унын үҙ улдары яҙырға тейеш

**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә билдәле тарихсы-ғалимдарыбыҙ - академик Нияз МӘЖИТОВ һәм Әлфиә СОЛТАНОВАның "История Башкортостана. Древность. Средневековье" исемле монографик хеҙмәте баҫылып сыкты. Был ғилми баҫма Башҡортостандың этносәйәси тарихының көнүҙәк проблемаларына арналған. Китапта төп иғтибар боронғо һәм урта быуаттарҙа ошо төбәктә йәшәгән халыҡтар һәм хәҙерге башҡорттар араһындағы этник күсәгилешлек мәсьәләләрен тикшереүгә йүнәлтелә. Ғалимдар төбәк тарихының әле лә асылып бөтмәгән биттәрен яҡтыртҡанда археология, тарихи этнография, башҡорт фольклоры һәм теле өлкәһендә тупланған материалдар һәм башҡа яҙма сығанаҡтар менән киң файҙалана. Хәҙерге Өфө ҡалаһы территорияһында күптән түгел асылған Башҡорт исемле урта быуат ҡалаһына ҡараған уникаль материалдар ҙа ошо ғилми баҫманың бәҫен бермә-бер күтәреп ебәрә. Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына авторҙарҙың ошо үтә ҡыҙыҡлы һәм төплө китапта баҫылған инеш һүҙенең бер аҙ ҡыҫҡартылған вариантын тәҡдим итәбеҙ.**

Халыҡ үҙ тарихын үҙе тыуҙыра, ә уны айырым шәхестәр яҙа. Ошо һүҙҙәрҙең ғәҙеллеген берәү ҙә кире ҡаҡмаҫ. Теге йәки был тарихи ваҡиғаларға ҡарата субъектив ҡараш булыуҙа гәйепләнмәгән тарихсы юҡтыр. Тарихи үҫеш барышы хаҡында ҡалыплашҡан фекер-ҡараштар емерелгән осорҙа тикшеренеү алып барған тарих белгесенә бигерәк тә ҡыйын. Факттар хис-кисерештәр өҫтәмәһе итеп кенә ҡабул ителгән майҙан һәм урам демократияһы болғанышына, гәзит биттәрендә алып барылған "ыҙғыш-талаш" донъяһына инеп китеү хәүефе янай ғалим-ғәләмгә.

Беҙҙеңсә, тарихсының объективлығы ниндәй ҙә булһа синыф, партия, милләт идеяларына йәиһә дини тәғлимәткә бирелгәнлектә түгел, ә факттарҙың, документтарҙың һәм сығанаҡтарҙың йөкмәткеһенә һәм рухына тоғролоҡта.

Алдыбыҙға ҡуйған бурысыбыҙ ауыр ине. Ватан ғилми әҙәбиәтендә Рәсәйҙең ҡайһы бер халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар тураһында ла, дөйөмләштерелгән тарихи тикшеренеүҙәр булманы. Өҫтәүенә, Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттар тарихы системалы рәүештә һуңғы 60-70 йылда ғына өйрәнелә башлағанлыҡтан, унда "аҡ таптар" һәм бер төрлө генә яуап табып булмаған бәхәсле урындар күп. Беҙ уҡыусыларыбыҙҙы төбәктең иң боронғо осорҙарының төп этаптары менән генә түгел, уны өйрәнеү тороошо менән дә таныштырырға тырыштыҡ. Был осраҡта улар тарихсыларҙың ҡараштар мозаикаһын белеп, артабанғы тикшеренеүҙәр йүнәлешен күҙаллау мөмкинлегенә эйә була.

Шулай итеп, беҙ Көньяҡ Уралда иң боронғо дәүерҙәрҙән XVI быуатҡа тиклем бер-береһен алмаштыра килеп йәшәүсе халыҡтар тураһында мөмкин булғанса тулыраҡ ҡараш булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Һуңғы 2-2,5 мең йылдарҙағы халыҡтар тарихын яҙғанда, беҙҙең инаныуыбыҙса, хәҙерге башҡорт халҡының алыҫ һәм яҡын ата-бабалары булған боронғо һәм урта быуат ҡәбиләләре иғтибарыбыҙ үҙәгендә булды.

**Башҡорт халҡының формалашыуы оҙайлы ваҡыт арауығында барып, VI-X быуаттарҙың һәм унан алдағы йөҙ йыллыҡтарҙың да ошо процестың айырылғыһыҙ өлөшөн тәшкил итеүе хаҡындағы һығымтабыҙ үҙебеҙ өсөн дә көтөлмәгәнерәк булды.**

Ошо китап Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттар тарихына арналғанлыҡтан, уҡыусыларыбыҙға уның исеменә ҡағылышлы бер иҫкәрмәбеҙҙе лә еткерәйек. Башҡортостан тураһында һүҙ барғанда ғилми әҙәбиәттә лә, кешеләр фекерендә лә хәҙерге Башҡортостан Республикаһы территорияһы күҙ алдына килтерелә. Башҡортостан тарихсыларына ошо төшөнсәне етди аныҡлау фарыз.

Халҡыбыҙ тураһында тәүге аныҡ яҙма сығанаҡтар барлыҡҡа килгән осорҙан (IX-XII бб.) Башҡортостандың Рәсәй дәүләте составына инеүенә тиклем (XVI б. уртаһы) башҡорттар бик ҙур территорияның - һамар һәм һарытау өлкәләренең көнсығыш сиктәренән (тимәк, Волга йылғаһының һул ярынан) Иртышҡа тиклем һәм киңлек йүнәлешендә Урта Уралдан (Пермь, Свердловск өлкәләренең көньяғынан) Төньяҡ Ҡаҙағстан далаларына тиклем ерҙәрҙең төп халҡы булып иҫәпләнгән. Урта быуат башҡорттарының вариҫтары бөгөн дә ошо ерҙәрҙең төп халҡы булып йәшәй. Китабыбыҙҙа күрһәтелгән тарихи документтар ошо сиктәрҙең дөрөҫлөгөн раҫлаусы дәлил булып тора. Бына ошо ерҙәр тарихи Ватаныбыҙ, йәғни башҡорт халҡы формалашҡан һәм үҫешкән территория булып, Башҡортостан Республикаһынан айырмалы рәүештә, Тарихи (Оло) Башҡортостан, тип аталып йөрөтөлөргә тейеш. Беҙ Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттарҙағы тарихын уның ошо киң мәғәнәһендә ярашлы бәйән итәбеҙ.

Уҡыусыбыҙ китапҡа ҡушымта итеп индерелгән, башҡорт шәжәрәләре тексттарынан, ҡәбер таштарынан һәм башҡа баҫылып сыҡҡан ғилми сығанаҡтарҙан алынған башҡорт хандары һәм бейҙәре исемлеген үҙ иғтибарынан ситтә ҡалдырмаҫ, тип уйлайбыҙ. Беҙгә билдәле арҙаҡлы башҡорт етәкселәренең эшмәкәрлеге IX быуаттан алып XVI быуат урталарына тиклемге ваҡытҡа ҡарай. Был исемлекте әҙерләүебеҙгә ғилми әҙәбиәттә башҡорттарҙың XVI быуатҡа тиклем ырыу-ҡәбилә ҡоролошо шарттарында йәшәп, үҙ дәүләтселеге ойошмаларын булдырыу кимәленә етмәгәнлеге тураһындағы кәмһетеүле ҡараштарҙың киң таралыуы сәбәп булды. Китапта һәм ҡушымтала килтерелгән исемдәр үҙҙәре үк күп нәмә тураһында һөйләй. Был башҡорт халҡының XVI быуатҡа тиклемге идара итеүсе элитаһы исемлеген системалаштырыуҙың тәүге тәжрибәһе булып, Башҡортостан тарихсыларының киләсәк быуындары ошо эште дауам итер, тип ышанабыҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләнә.**

ИҒТИБАР!

# БЕҘ БАРБЫҘ, ТИГӘН...

## күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйексе

**Белеүегеҙсә, гәзит- журналдарға яҙылыу хәҙер, элекке кеүек, тотош йылға түгел, ә ярты йыллап ҡына башҡарыла. Ләкин икенсе ярты йыллыҡ тураһында ла алдан хәстәрләү ғәҙәткә инеп бара. Бына әле лә Федераль почта хеҙмәте 2010 йылдың икенсе ярты йыллығына ваҡытынан алда, тәүге ярты йыллыҡ хаҡтары менән гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итте. "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына һеҙ март аҙағына тиклем 306 һум 84 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары 282 һум 78 тингә яҙыла алаһығыҙ, апрелдән хаҡтар бер аҙ күтәреләсәк.**

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһын да дауам итмәксебеҙ.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар...**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

● Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.

● Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзаныраҡ: ярты йылға - 225 һум.



Борай районы башҡорт теле уҡытыусылары.

● Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баҫмабыҙ ярты йылға 186 һум 60 тингә генә төшәсәк.

**Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ...**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыҡты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, ғәзиз милләттәштәр!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

**ҺОРАУ: "Ни өсөн аҡыллы ҡыҙ-ҡатындар аҡыллы ирҙәрҙең - етешһеҙ, башҡаларының өҫтөнлөктәрен күрергә тырыша?"**

Ҡыҙ-ҡатын нисек кенә аҡыллы булмаһын, уның тәбиғәттән һалынған әсәлек инстинкты көтөлмәгәндә тойғоға бирелергә, нескәлеккә күмелергә мәжбүр итә һәм был хәлде ир-ат ҡыҙ-ҡатындың үҙ йоғонтоһона бирелеүе тип ҡарай. Шуға күрә лә интеллектуаль яҡтан юғарылыҡҡа эйә ҡыҙ-ҡатын шундай уҡ халәттәге ир-аттан өҫтөн була алмай. Ә инде өҫтөнлөккә ынтылыу комплексы һәр енес вәкиленә хас. Шуға күрә лә, интеллектуал ҡыҙ-ҡатын икәү-ара мөнәсәбәттә "икенсел" позицияла ҡалмаҫ өсөн, баш мейеһенә ҡаты ҡалҡан - баш мейеһе һөйәге кәрәк булған кеүек, интеллекты түбән булған, күберәк физик көскә эйә "ҡаты массаны" тәшкил иткән ир-атҡа һыйына. Күберәк физик көскә эйә, интеллектуаль юғарылыҡҡа ынтылмаған ир-атты "ҡатыбаш" тип атау ҙа юҡтан ғына түгел. Был - диалектика законы ла. Сөнки интеллектуал ир-аттарға ла һәр саҡ "өй тауығы" кәрәк булып сыға. Халыҡта тағы ла мәргәнерәк әйтем бар: "Бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай". Бында "ҡаҙан" тигәндә - ғаиләне, "тәкә башы" тигәндә икеһе бер кимәлдәге ир менән ҡатын тигәнде аңларға ла булалыр.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ӘБЕЙ ҠЫУАНЫСЫ

"Бөгөн көнө буйы кәйефем күтәренке, әйтерһең дә, күңел йырлай, ә сәбәбе ябай ғына, - тип һөйләп алып китте 75 йәшлек күршем Тәнзилә апай. - Балаларым янынан ҡайтып киләм. Бына автобустан төшөр ваҡыт етте. Туҡталышҡа етмәҫ элек ишек янына барып тороу ғәҙәтем бар. Барып баҫтым. Минең яныма оҙон буйлы, мыҡты ғына кәүҙәле урта йәштәрҙәге бер ир ҙә килеп баҫты. Мин: "Үтте инде транспортҡа йүгереп инеп, бер ҡайҙа ла тотонмай, һикереп төшөп ҡалып, вайымһыҙ ғына йөрөгән йәш саҡтар. Ә әле сат йәбешәм, һелкетһә, башым әйләнә, иң ҡурҡынысы - автобустан төшөү. Төшөп өлгөрмәм, төшһәм дә тайып йығылырмын кеүек тойола. Хәҙер ҡышын туҡталыштарҙы йыйыштырыу, ҡарын көрәү, боҙҙан таҙартыу, ҡом һибеү юҡ. Капитализмда йәшәйбеҙ бит. Етмәһә, көрсөк. Үҙәк урамдарҙа һәйбәттер ҙә, ә Черниковкаға иң иҫке транспорттарҙы бирәләр. Иң ҡыҙығы - был транспорттар үҙебеҙҙә етештерелә бит. Итекһеҙ итексе тигәндәре шулдыр", тигән уйҙарға бирелеп алдым. Бына автобустың ишектәре асылды. Мин нисегерәк төшһәм, уңайлы булыр икән, тип, бисмилламды бер-ике тапҡыр ҡабатлап, урынымда тапанып алдым. Шул саҡ минең янымда баҫып торған теге ир йәһәт кенә төштө лә, миңә ҡул биреп, күтәреп тигәндәй төшөрҙө. Көтөлмәгән мәрхәмәтлектән күҙҙәргә йәш тулды".

Эйе, Тәнзилә апайҙың көноҙон йылы хистәргә күмелеп йөрөүенә ябай ғына күренештең сәбәпсе булыуына ғәжәпләнмәнем мин. Ни тиһәң дә, ихласлыҡ, йомартлыҡ, ололарға иғтибар, ихтирам күрһәтеү кеүек төшөнсәләр үткән заманда ҡалды бит...

**Айгөл АХУНОВА.**

ҺУҒЫШТЫ КҮРАЛМАЙЫМ...

# ҒАЗАП ӨЙКӘЙ КҮҢЕЛДЕ

Гәзиттә ошондай яңы рубрика булдырылыуын күргәс, ғүмер буйы йөрәгемде өйкәгән нәфрәтем тағы ла ҡуҙғалды. Мин атайҙан өс айлыҡ, әсәйҙән 6 йәштә ҡалғанмын. Атайым һуғыштың иң ҡатыһында һәләк булған. Берәүҙәрҙең ҡәҙерле генә бер бөртөк балаһы булғанмын да бит, бала сағым ас-яланғас теләһә ҡайҙа интегеп йөрөп үтте. Исмаһам, балалар йортона береүсе лә булмаған, уҡып белем алған булыр инем. Аталы-инәле кешеләргә ҡарап һыҡтаған көндәрем аҙ булманы. Әле булһа, һуғыштың ғазабы күпме генә ҡалған ғүмеремдә йөрәктең елеген кимерә...



**Сәүиә ИМАНҒОЛОВА.**
**Әлшәй районы Иҙрис ауылы.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте яңы тәбиғәт паркы булдырыу тураһында бойороҡ ҡабул итте. Ул Белорет һәм Учалы районлары биләмәһендә урынлаша һәм "Ирәмәл" тип атала. Был паркты ойоштороу уникаль тәбиғәт ландшафтын һаҡлауға, Оло һәм Кесе Ирәмәл түбәләре, Һәүәләк һәм Еләкле һырттары ингән тау массивының рекреацион ресурстарын һөҙөмтәле файҙаланыуға булышлыҡ итәсәк.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев "Башҡортостан Республикаһының автомобиль юлдарын үҫтереү (2010-2015)" айырым маҡсатлы республика программаһын раҫланы. Әле республика территорияһы буйлап үтеүсе дөйөм файҙаланыуҙағы автомобиль юлдарының оҙонлоғо 24,8 мең км, шул иҫәптән федераль әһәмиәттәге юлдар 486 км тәшкил итә. Норматив талаптарға яуап биргән төбәк һәм муниципаль-ара әһәмиәттәге дөйөм файҙаланыуҙағы автомобиль юлдары оҙонлоғо 27 процентҡа етәсәк, төбәк муниципаль-ара һәм урындағы әһәмиәттәге 400 км-ҙан ашыу юл һалынасаҡ һәм реконструкцияланасаҡ, 56 ауыл ҡаты япмалы юлдар менән дөйөм файҙаланыуҙағы автомобиль юлдары селтәренә тоташтырыласаҡ.

✓ Былтыр республикала 82 мең самаһы мигрант иҫәпкә ҡуйылған. Башҡортостан биләмәһендә 46 дәүләттән килгән сит ил гражданы эшләй. 2009 йылда 838 сит ил гражданына ҡарата республиканың ҡала һәм район судтары тарафынан илдән ҡыуыу тураһында ҡарар ҡабул ителгән, был 2008 йылдағыға ҡарағанда 44,5 процентҡа күберәк.

✓ Украинала үткән президент һайлауҙарында Виктор Янукович - 48,95, Юлия Тимошенко 45,47 процент тауыш йыйҙы. Украина президенты һайлауҙарының еңеүсеһе рәсми рәүештә 17 февралдә иғлан ителәсәк.

✓ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерләнеү һәм үткәреү темаһын яҡтыртыусы журналистар менән семинар-кәңәшмә үткәрелде. Йыйылыусы журналистарға Дәүләт статистика федераль хеҙмәтенең БР буйынса территориаль органы етәксеһе урынбаҫары Рөстәм Ғатауллин был кампанияны үткәреүҙе ойоштороуҙың төп йүнәлештәре хаҡында һөйләне.

✓ *Советтар Союзы үҙ тарихында бер тапҡыр ғына футбол буйынса Европа чемпионы титулына өлгәшә - 1960 йылда Францияла, өс тапҡыр икенсе урынды биләй - 1964, 1972 һәм 1988 йылдарҙа.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ГӘҮҺӘРҘӘР МЕНӘН БИҘӘЛГӘН АЛТЫН ТУП ҺӘМ ДӘ...

## Рәсәй футболының башҡа "проблема"лары тураһында

**Йәмәғәт, мин шатмын. Ифрат шатмын. Хатта ғәләмәт ифрат шатмын, тип әйтергә лә була. Ниһайәт, илебеҙҙә футболға иғтибар артты. Эйе, эйе, ишетмәнегеҙме ни әле? Футболыбыҙ бына-бына яңы үрҙәргә күтәреләсәк. Бразилия менән Аргентина хәҙер ял итә ала. Ә Германия менән Франция, Англия менән Испания уйын яланынан сығып, ситтә генә ҡарап торорға тейеш. Беҙ киләбеҙ! Ишетәһегеҙме? Рәсәй футболы донъяны яулай. Ышанмайһығыҙмы? Башымды тотоп ҡарарға теләйһегеҙме? Температурамды үлсәмәксеһегеҙме? Көлөргә ашыҡмағыҙ. Донъя чемпионатыың беренсе урыны мотлаҡ рәүештә беҙҙә буласаҡ. Мин әйтмәнем быны. Оло вазифалы түрә әйтте. Теләһә кем түгел, президент! Мин ни, тутыйғош кеүек, шуның һүҙҙәрен ҡабатлап ҡына ултырам.**

3 февраль көндө Рәсәй Футбол союзының яңы президенты һайланды. Тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса ул вазифаны Сергей Фурсенко биләне. Уның тормош һәм хеҙмәт юлы менән ҡыҫҡаса ғына таныштырып үтмәксемен. Сергей Александровичтың Санкт-Петербург ҡалаһында тыуып үҫеп белем алыуы тураһында ентекләп яҙыу артыҡ икәнлеген яҡшы аңлайһығыҙҙыр, тип уйлайым. Был ҡала бөгөн Рәсәйҙең "мәҙәни баш ҡалаһы" ғына түгел, ә "Мәскәү өсөн кадрҙар әҙерләүсе баш ҡала". Һәм был статусты Питер яҡындағы йылдарҙа бирәүгә лә бирмәйәсәге лә көн кеүек асыҡ. Сергей Фурсенко - затлы ғаиләнән. Уның атаһы - Александр Александрович Фурсенко - күренекле тарихсы, академик. Ағаһы - Андрей Александрович Фурсенко - 2004 йылдан Рәсәй Федерацияһының фән һәм мәғариф министры.

Рәсәй Футбол союзының яңы президенты белеме буйынса инженер, Ленинград политехник институтын тамамлаған. 2003 йылдан ул "Газпром" менән бәйле. Бер үк ваҡытта 2005 йылдан "Зенит" футбол клубының директорҙар советы рәйесе. Ә был клуб акцияларының контроль пакеты "Газпром" ҡеҫәһендә. 2006 йылдан Фурсенко "Зенит" клубының президенты. Йәғни, әкәм-төкәм түгел, теләһә нәмә һөйләп ултырған кеше тип әйтеп булмай. Шуға ла уның футбол буйынса 2018 йылғы донъя чемпионатын Рәсәйҙә үткәреүгә һәм унда футбол буйынса Рәсәй йыйылма командаһының еңеүенә өлгәшергә кәрәк, тигән һүҙҙәрен ишеткәс, мин ғәләмәт ныҡ шатландым да инде. Тимәк, бар әле беҙҙең көс-ҡеүәтебеҙ. Уйлап ҡараһаң, Рәсәй футболы бөгөн хас урыҫ баһадиры Илья Муромец кеүек - 30 һәм тағы ла 3 йыл буйына мейес башында аяҡ-ҡулын ҡыбырлата алмай ултырғандан һуң, ул үҙенең ысын ҡеүәтен тоя башлай. Хәтерләйһегеҙҙер, әкиәттә Илья "батыр"ға өс ҡарт килә һәм ҡоҙоҡ һыуы эсерә. Беренсе күнәктән һуң Илья аяҡҡа баҫа, икенсеһе уға ғәйәт ҙур көс өҫтәй. Ҡарттар Ильяға өсөнсө күнәкте эсерергә мәжбүр була - быныһ ҡеүәтен әҙерәк ҡайтарыр өсөн. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, ҡоҙоҡ, тигәне нефть йәки газ скважинаһы була түгелме? Йәғни, икенсе төрлөрәк әйткәндә, "Газпром" бит. "Илья Муромец"ыбыҙ (йәғни, Рәсәй йыйылма командаһы) ошо "ҡоҙоҡ"тан туйғансы һемерһә, уның көсө, йүгереү һәм туп тибеү һәләте бермә-бер артасаҡ һәм ул "Тугарин Змей", "Идолище поганое" ( Аргентина, Бразилия һәм башҡа футбол державалары, тип аңларға кәрәк) кеүек ғифриттәрҙе бер һелтәүҙән еңеп сығасаҡ. Ура, йәмәғәт, ура! Кәпәстәрҙе өҫкә сөйөргә ваҡыт. Алда беҙҙе бөйөк һәм ҡабатланмаҫ көндәр көтә.

Әйтергә кәрәк, "бөйөк" еңеүгә табан тәүге аҙымдар яһалды ла инде. Рәсәй Футбол союзы президентын һайлаған көндәрҙә Санкт-Петербургта ювелир индустрияһының халыҡ-ара форумы булып үтте. Был алтын, көмөш һәм гәүһәр байрамының иң күренекле һәм үҙенсәлекле экспонаты - туп ине. Тәү ҡарашҡа футболсылар ялан буйлап йәнтәслимгә тибеп йөрөгән япябай туп һымаҡ. Аҡ һәм ҡара бишмөйөштәре лә бар. Ә ентекләберәк ҡараһаң... Баҡтиһәң, был туп 585-се пробалы алтындан эшләнгән, ә ауырлығы ике кило ярым! Ул 33 мең 140 аҡ һәм 10 мең 728 ҡара гәүһәр менән биҙәлгән! Хаҡы - кәмендә миллион доллар! Был зиннәтле туп бирәү генә түгел икән. Уның бәләкәсерәк "ҡустыһы" бар - шулай уҡ 585-се пробалы алтындан, ауырлығы ни бары - 460 грамм ғына. Гәүһәрҙәре лә аҙыраҡ - аҡтары 3790, ә ҡаралары - 2340 дана. Тәүгеһе, ҙуры ике кило ярымлығы, футбол буйынса Рәсәй чемпионатында еңеүсе командаға тапшырыласаҡ, имеш. Ә бәләкәсерәге иһә - икенсе урын яулаусыға. Мөғжизә бит был!

Ышанам, хәҙер был трофейҙы ҡулға эләктерер өсөн футболсыларыбыҙ ялан буйлап йән-фарман йүгереп йөрөйәсәк бит. Ҡабатланмаҫ матур голдар, иҫ китмәле пастар, шаҡ ҡатырғыс дриблинг көтә беҙҙе, йәмәғәт. Һәр бер футболсының күҙ алдында әлеге лә баяғы гәүһәрле алтын туп торасаҡ бит. Хужа Насретдин атларға теләмәй тиҫкәреләнгән ишәген урындан ҡыбырлатыр өсөн оҙон ҡолғаға бер ҡосаҡ бесән бәйләп, ишәгенә күрһәтеп барған, имеш. Бахыр хайуан алданғанын аңламай, бесән ашайым, тип ынтыла ла, китә лә бара икән. Хужа ла ҡәнәғәт, ишәк тә өмөтһөҙ түгел.

Үткән аҙнала футбол менән бәйле булған тағы ла бер ваҡиға иғтибарға лайыҡ. Варшава ҡалаһында 2012 йылда Польшала һәм Украинала үтәсәк футбол буйынса Европа чемпионатының һайлап алыу турҙарына йәрәбә һалынды. Йәғни, Европа чемпионатына эләгеү буйынса үткәреләсәк уйындарҙа ҡатнашасаҡ командаларҙың төркөмдәре асыҡланды. Рәсәй йыйылма командаһы Словакия, Ирландия, Македония, Әрмәнстан һәм Андорра командалары менән бер төркөмгә эләкте. "Ура!" тиһегеҙме? Ишетмәйем. Беҙҙекеләр был илдәрҙең футболсыларын кәпәс ташлап булһа ла еңәсәк, тип һөрәнләйһегеҙме? Ай-һай, алдан ҡысҡырған әтәс серек йомортҡа һала, тиҙәрме әле беҙҙә? Әлегә әйтмәйҙәрме? Әйтеүҙәре бик ихтимал. Беҙҙекеләр бит бер уйында уңа, икенсеһендә туңа. Көньяҡ Африка Республикаһында быйыл буласаҡ донъя чемпионатына эләгеү өсөн көрәшкәндә Словения менән булған уйындың ҡабатланғанын бер ҙә күргe килмәй. Эйе, тәү ҡарашҡа беҙҙең төркөмдәге илдәрҙең командалары сүп кеүек кенә. Андорра, йәки, әйтәйек, Әрмәнстан нимә ул? Пүстәк. Тфү! Улар бит испандар, голландтар, итальяндар, инглиздәр, хорваттар, португалдар, французлар йәки немецтар түгел. Әммә беҙҙең төркөмдәге башҡа командалар үҙҙәрен күрһәтәсәк әле. Македония, мәҫәлән, 2008 йылғы Европа чемпионатына һайлап алыу турҙары барғанда Англия командаһын еңеп аптыраҡайны. Ә Словакия менән Ирландиянан теләһә ниндәй "бүләк" көтөргә була. Әйтәйек, словактар Рәсәйҙән айырмалы рәүештә быйылғы донъя чемпионатында сығыш яһаясаҡ. Ә Ирландия командаһы иһә Көньяҡ Африка республикаһына бармаһа ла көсләләрҙән һанала. Һайлап алыу турҙарында ирланд футболсылары үҙҙәрен бик лайыҡлы күрһәтте. Иң мөһиме шул, Рәсәй йыйылма командаһының баш тренеры Гус Хиддинк та, Рәсәй Футбол союзының яңы президенты Сергей Фурсенко ла илебеҙҙең футболсылары был төркөмдә мотлаҡ беренсе урын яуларға тейеш һәм шулай буласаҡ та, тип фаразлай. Уларға ышанмай мөмкин түгел.

Шул арала Рәсәй чемпионатының премьер-лигаһында ла үҙгәрештәр көтөлә. Ниндәй тип уйлайһығыҙмы? Бер түгел, ике команда премьер-лиганан китергә йыйына. Улар - баш ҡаланың "Мәскәү" һәм Һамарҙың "Крылья Советов" командалары. Ни булды, тиһегеҙме? Спонсорҙары уларға аҡса бүлеүҙән баш тартҡан, имеш. "Мәскәү"ҙең бағымсыһы - "Норильск никеле" тау-металлургия комбинаты 2009 йылда футбол клубына 12 миллион доллар ғына биргән булған икән. Ә лайыҡлы уйнар өсөн юғары кимәлдәге футбол командаһына кәм тигәндә 30 миллион доллар саҡ ҡына етеп ҡала, йәнәһе.

Шулай шул - футболсыларҙың тормошо еңелдән түгел. Ялан буйлап ямғыр тип тормай, ҡарҙы күрмәй, батҡаҡҡа батып йәки ҡыҙыу ҡояш нурҙары аҫтында туп ҡыуып ҡара тиргә батып, типкеләнеп йүгереп йөрөп тә өлөшөнә тейеш бер-ике миллион һумды алмай ултырып ҡара әле! Ә бит улар йондоҙ! Уларҙың уйнағанын ҡарарға тип меңәрләгән кеше бар эшен ташлап стадионға килә, йөҙ меңләгәне иһә бисәһенән һәм ҡәйнәһенән әрләнә-әрләнә телевизорға текәлеп ултыра. Еңһәләр, ҡаршы яҡ ҡапҡаға туп индерһәләр, күккә күтәреп маҡтай, исемдәрен ҡабат-ҡабат һөрәнләй, ҡыуана. Еңелһәләр иһә, һүҙ запасын йәлләмәй һүгә.

Советтар Союзы үҙ тарихында бер тапҡыр ғына футбол буйынса Европа чемпионы титулына өлгәшә - 1960 йылда Францияла, өс тапҡыр икенсе урынды биләй - 1964, 1972 һәм 1988 йылдарҙа. Донъя чемпионаттарында иһә СССР йыйылма командаһы бер тапҡыр ғына, 1966 йылда Англияла Португалия командаһынан 2:1 иҫәбе менән еңелеп, дүртенсе урынды яулай. Һәм вәссәләм! Ул саҡтарҙағы футболсылар бөгөнгөләр кеүек миллионерҙар булманы. Улар нисектер ил намыҫы, патриотик тойғолар менән уйнап ҡына ошондай һөҙөмтәләргә өлгәшә алды. Үҙгәрештәр осоронда футболсыларға аҡса күберәк түләнде. Әле лә фәҡир түгелдәрҙер, тигән уйҙамын. Бәлки, уларҙы СССР футболсыларының эш хаҡына күсереп ҡарарға кәрәктер. Шул саҡта улар панфиловсылар кеүек: "Артта Рәсәй! Сигенер урын юҡ!" - тип һөрән һалып беҙҙе ҡыуандырып уйнап алып китер, ә? Ялан буйлап шыуышып түгел, кешеләрсә йүгереп йөрөрҙәр, типкән туптары ла ҡапҡаның арҡырыһына, йәки буйына түгел, ә ҡап уртаһына эләгер. Бәлки, шул саҡта беҙ, ысынлап та, Бразилияны төп башына ултыртып, донъя чемпионы титулын яуларбыҙ, ә? Ой, тотоғоҙ мине, йәмәғәт. Башым ҡыҙышып, температурам күтәрелә башланы, шикелле.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Былтыр Башҡортостанда 55720 бала тыуған, был 2008 йыл менән сағыштырғанда 1227 балаға күберәк. 3,6 процентҡа дөйөм үлем кимәле кәмегән. Һуңғы йылдарҙа тәүге тапҡыр халыҡтың тәбиғи үҫеүе теркәлгән. Яҡынса күрһәткестәр буйынса 1 мең яңы тыуған сабыйға 7 үлем осрағы тура килә, был 2008 йыл күрһәткесенән - 25,5 процентҡа, Рәсәй кимәленән 14 процентҡа түбәнерәк. Һаулыҡ һаҡлау министры Андрей Евсюков хәбәр итеүенсә, республикала демографик күрһәткес һәйбәтләнеүенә "Сәләмәтлек" милли проекты ла роль уйнаған. Программа сиктәрендә өҫтәмә финанс бүленеү йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға һәм сабыйҙарға медицина ярҙамы күрһәтеү сифатын һәм һөҙөмтәлелеген күтәргән. Акция 15 -19 февралдә үтә.

✓Башҡортостанда күмәк халыҡ йыйыла торған 357 урында күҙәтеү камералары ҡуйылған. Өфөлә иһә бындай камералар һаны 268-гә барып етә. Уларҙы урынлаштырыуҙың төп маҡсаты, әлбиттә, енәйәттәрҙе иҫкәртеү. Шул уҡ ваҡытта был видеотехника ҡылынған енәйәттәрҙе лә асырға ярҙам итә. Былтыр камералар ярҙамында 42 енәйәт фашланған. Хәҙер бындай күҙәтеү камералары "Башкирнефтепродукт" заправкалары янына ла ҡуйыласаҡ. Был бик актуаль, сөнки автомобиль йөрөтөүселәргә һөжүмдәр булып тора. Камералар ҡуйыу "Хәүефһеҙ ҡала" программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырыла.

✓Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан "Башфармация" предприятиеһының аптекалар селтәрендә "Ирҙәр сәләмәтлеге" тигән акция старт ала. Был сара Башҡорт дәүләт медицина университеты, БР Урологтар йәмғиәте менән берлектә тормошҡа ашырыла. Акцияла Өфөнөң -11, республика ҡалалары һәм районДарының 25 аптекаһы ҡатнаша. Уларҙа врач-урологтар консультациялар алып барасаҡ. Ирҙәр һаулығын һаҡлауға тәғәйенләнгән дарыу препараттары акция ваҡытында арзаныраҡ буласаҡ.

✓Тольятти ҡалаһында бокс буйынса Рәсәй беренселегенә һайлап алыу турниры булып үтте. Ярыштарҙа ҡатнашҡан 152 спортсының 14-е Башҡортостандан ине. Руслан Ғилманов (60 кг ауырлыҡта) менән Рәхәт Арынов (46 кг) өсөнсө урын яуланы. Руслан Ҡадиров (54 кг) менән Әнис Миңнеяров (66 кг) Рәсәй беренселегендә ҡатнашыуға путевка алды.

✓ *Мәғлүмәттәргә ярашлы, хәҙер өфөлөләр Мәскәүгә 400-500 һумға билет һатып алып оса аласаҡ. "Өфө-Мәскәү" линияһында бигерәк тә тәүге осорҙа хаҡтарҙың түбән булыуы көтөлә.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## АРЗАНҒА ҒЫНА - МӘСКӘҮГӘ

**Тиҙҙән Мәскәүгә самолет менән 428 һумға барырға мөмкин буласаҡ. Ҡиммәт булмаған авиарейстарҙың 5 марттан асылыуы көтөлә.**

Өфө аэропорты "Авианова" компанияһы менән контракт төҙөнө. Мәғлүмәттәргә ярашлы, хәҙер өфөлөләр Мәскәүгә 400-500 һумға билет һатып алып оса аласаҡ. "Өфө-Мәскәү" линияһында бигерәк тә тәүге осорҙа хаҡтарҙың түбән булыуы көтөлә. Арзан билет хаҡы өҫтәмә хеҙмәттәр, мәҫәлән, самолетта туҡланыу, стюардесса хеҙмәтләндереүе булмау һөҙөмтәһендә килеп сыға. 10 килограмдан ашыу багаж түләүле буласаҡ.

Авиакомпания мөмкин тиклем һәр нәмәлә экономия яһарға, ә ҡағыҙға бөҙөуҙар һәм төрлө хеҙмәттәр өсөн аҡса алырға планлаштыра. Мәҫәлән, 10 дан алып 23 килограмға тиклемге багаж өсөн 300 һум түләргә кәрәк буласаҡ. Әгәр ҙа багаж нормативтан тыш икән - тағы ла 150 һум. Ике йәшкә тиклемге бала айырым урын алмаһа ла, 300 һум тирәһе түләргә кәрәк буласаҡ. Рейстар 28 мартҡа тиклем "Внуково" аэропортына, ә 28 марттан "Шереметьево-1" аэропортына шаршамбы, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә буласаҡ.

## ПАСПОРТ ҺӘМ ВИЗАЛАР ҠИММӘТЛӘНӘ

**29 ғинуарҙан сит ил паспорты өсөн дәүләт һалымы 1 мең һумдан 2,5 мең һумға тиклем күтәрелде. Ғөмүмән, миграция хеҙмәте линияһы буйынса бөтә төр дәүләт һалымдары хаҡы артҡан.**

Хәҙер Рәсәй гражданины паспорты 200 һум тора. Юғалған паспорт өсөн 150 һум урынына 500 һум түләргә кәрәк буласаҡ. Иҫке өлгөләге сит ил паспорты өсөн дәүләт һалымы ололар өсөн - 1000 һумға, 14 йәшкә тиклемге балалар өсөн 300 һумға күтәрелгән. Биометрик паспорт ололар өсөн - 2500, балалар өсөн 1200 һум. Сит ил гражданинына Рәсәйгә инеү йәки сығыу өсөн виза 300-ҙән 600 һумға күтәрелде. Сикте күп тапҡыр үткән өсөн 1000 һум (элек 400 һум ине).

2010 йылдан сит ил паспорттарының яраҡлылыҡ ваҡыты 10 йылға тиклем оҙайтыла, былдай паспорт юллау өсөн документтар мартта ғына ҡабул ителә башлаясаҡ. Оҙайтыу биометрик паспорттарға ғына ҡағыла. Бөгөн яңы өлгөләге паспортты Өфөлә, Бәләбәйҙә, Белоретта, Бөрөлә, Межгорьела, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Салауатта, Стәрлетамаҡта, Сибайҙа һәм Ҡыйғы районында алырға була. Был бүлексәләрҙең барыһында ла биопаспорт өсөн махсус ҡоролмалар бар. Яраҡлылыҡ ваҡыты 10 йылға иҫәпләнгән биометрик паспорт 46 биттән торасаҡ.

## ЯҢЫ ҠАБУЛ ИТЕҮ ҠАҒИҘӘЛӘРЕ

**Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары сайттарында һәм стендтарында 2010 йылда абитуриенттар ҡабул итеү ҡағиҙәләре барлыҡҡа килде. Унда бюджет һәм түләүле урындар һаны, ҡабул ителәсәк студенттар категориялары - бакалаврҙар, белгестәр һәм магистрҙар, шулай уҡ һәр йүнәлеш буйынса имтихандар исемлеге бар.**

Өҫтәмә имтихандарҙы иҫәпләмәгәндә, ҡағиҙәләр бар вуздар өсөн дә бер үк. 2009 йыл менән сағыштырғанда, үҙгәрештәр күп түгел: вузға ҡабул итеү ике этаптан торасаҡ, вуздар өҫтәмә имтиханды профилле фән буйынса ғына түгел, ә башҡа, профилле булмаған фәндәрҙән дә үткәрә ала. Маҡсатлы юллама буйынса уҡырға инеүселәр һаны 30-ҙан 20 процентҡа тиклем кәмегән. Абитуриент быйыл бер юлы биш вузды өс конкурсына ғариза бирергә хоҡуҡлы.

БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, БДИ тапшырыу өсөн уҡыусы 1 мартҡа тиклем мәктәптә ғариза яҙырға тейеш. Әйткәндәй, Мәғариф министрлығында БДИ тапшырыу буйынса ҡыҙыу линия эшләй. Унда 8(347) 273-20-87 телефоны аша иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем һорауҙарға яуап алырға мөмкин.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЗАМАН ТАЛАП ИТӘ:

## электрон хеҙмәтте камиллаштыр



**Ағымдағы аҙнала баш ҡалабыҙ Өфө В. В. Путин етәкселегендәге Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең ҙур делегацияһын ҡабул итте. Делегация составында Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫарҙары, Хөкүмәт ағзалары, министрлыҡ һәм ведомство башлыҡтары ингәйне. Ошо рәсми сәфәргә сәбәп - Төбәктәр үҫеше мәсьәләләре буйынса хөкүмәт комиссияһының Рәсәй Федерацияһы субъекттарында мәғлүмәт технологияларын үҫтереүгә арналған ултырышын уҙғарыу. Ултырышта РФ төбәктәре һәм муниципаль берәмектәре етәкселәре лә ҡатнашты.**

"Бөгөнгө ултырыштың темаһы - төбәктәр һәм муниципалитеттар эшенә заманса мәғлүмәт технологияларын индереү, ул "Электрон хөкүмәт" проектында ла ғәмәлгә ашырыла. Мәғлүмәт технологиялары күптән инде ниндәйҙер абстракт һәм аңлайышһыҙ күренеш булыуҙан туҡтаны. Кешеләр уларҙы әүҙем ҡуллана. Ошо технологиялар дәүләт хеҙмәтләндереүе менән файҙаланыуға киткән ваҡытты ҡыҫҡартыу һәм уның сифатын күтәреү мөмкинлеген бирә", - тип билдәләне В. В. Путин.

Хөкүмәт етәксеһе әйтеүенсә, граждандарҙың төрлө дәүләт структураларына мөрәжәғәттәренең дөйөм иҫәбе йылына 360 миллионға етә. Тимәк, һәр кемгә йыл һайын өс-дүрт тапҡыр ошондай урындарға йөрөү "яфаһын" үҙ башынан үткәрергә тура килә. Тимәк, кешеләрҙе конторалар буйлап йөрөүҙән ҡотҡарыу өсөн кисекмәҫтән дәүләт мәғлүмәт хеҙмәтләндереүенең электрон системаһын тулыһынса төҙөргә кәрәк.

Һәр граждандың төбәктә һәм муниципалитетта сервис порталдарына, башҡа интеграцияланған мәғлүмәти элемтә каналдарына инеү мөмкинлеге булырға тейеш, тип иҫәпләй Хөкүмәт башлығы. Ә Башҡортостанда булдырылған социаль карта быға асыҡ булып тора. В. В. Путин республиканың ошо өлкәләге тәжрибәһен юғары баһаланы. Ул был ыңғай башланғыс менән Өфөнөң 46-сы поликлиникаһы миҫалында танышты. "Халыҡ бының өсөн иң элек республика етәкселегенә рәхмәтле булыр, тип ышанам. Электрон карта универсаль булырға һәм дәүләт хеҙмәтләндереүенең бөтә өлкәләренә инеү мөмкинлеген бирергә тейеш", - тип белдерҙе ул.

В.В. Путин төбәк башлыҡтарын ошо проблеманы хәл итеү менән ентекле шөғөлләнергә саҡырҙы һәм был эштең төбәк власы эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеге күрһәткестәренең береһе булараҡ баһаланасағын билдәләне. Ошо өлкәлә уңыштарға өлгәшкән төбәктәргә киләсәктә өҫтәмә ярҙам итеү зарурлығы ла һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Электрон хеҙмәтләндереү өлкәһендә тупланған тәжрибә буйынса мәғлүмәт банкыһы ойоштороласаҡ. Ошондай эшмәкәрлекте контролдә тотоу маҡсатында Сергей Собянин етәкселегендә махсус комиссия төҙөлдө.

Абруйлы кәңәш ҡоронда Башҡортостан Республикаһы Президенты М. Ғ. Рәхимов сығыш яһаны. Ул идара итеү системаһында мәғлүмәт технологияларын ғәмәлгә индереү буйынса республика тәжрибәһе менән уртаҡлашты. "Республикала 2002 йылдан Мәғлүмәт сәйәсәте концепцияһы тормошҡа ашырыла. Уны Мәғлүмәт һәм телекоммуникация технологияларын үҫтереү буйынса ведомство-ара комиссия координациялай. Шул саҡтан бирле Башҡортостан Республикаһы дәүләт власы органдарының рәсми мәғлүмәт порталы эшләй башланы. Бөгөн республикала электрон хөкүмәт төҙөү һәм хеҙмәтләндереүҙе электрон рәүештә алып барыу өсөн кәрәкле төп элементтарҙың барыһы ла булдырылды", - тине республика башлығы.

В. В. Путин да, делегация составындағы Рәсәй Хөкүмәте ағзалары ла беҙҙәге уңышлы башланғыстар менән яҡындан танышып, электрон хеҙмәтләндереүҙең ғәмәли һөҙөмтәләрен ҡәнәғәтләнеү менән ҡабул итте. Ултырыш барышында Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе бындағы уңышлы тәжрибәне башҡа төбәктәргә таратыу бурысын ҡуйҙы.

Әйткәндәй, Рәсәй буйынса һалым түләүселәрҙе теркәү нигеҙҙә байтаҡ йылдар элек республикабыҙҙа индерелгән шәхси идентификация номерын ҡулланыу тәжрибәһенә таянып башҡарылғайны. Шулай булғас, был юлы ла башҡа төбәктәрҙән тәжрибә өйрәнеү маҡсатында килеүсе делегациялар күп буласаҡ. Әлбиттә, ошо мөһим сара барышында ҡуйылған баһа республикабыҙ абруйын күтәреп, бер үк ваҡытта төрлө кимәлдәге власть органдарына ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә.

**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәрҙәренән.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Мәжит Ғафури һәм Әхмәтзәки Вәлиди урамдары киҫелешендә төҙөкләндерелгәндән һуң боҙ майҙансығы асылды. Уның асыу тантанаһын Киров район хакимиәте һәм "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы бергәләп ойоштторҙо. Сарала "Толпар" хоккей командаһы уйынсылары ла ҡатнашты һәм уйын ойоштторҙо.

✓Ябай булмаған иҡтисади шарттар Өфөгә башҡа Рәсәй мегаполистары араһында алдынғы урындарҙы һаҡлап ҡалырға ҡамасауламаны. Былтыр сәнәғәт етештереүе индексы 97,6 процент тәшкил итте, 233 млрд һумлыҡ тауар һатылды һәм хеҙмәт күрһәтелде. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев әйтеүенсә, был күрһәткес миллионлы ҡалалар араһында иң яҡшыһы. Өфөлә тауар әйләнеше 280 млрд һумлыҡ булған, был республиканың дөйөм тауар әйләнеше күләмендә 60 процент тәшкил итә.

✓БР буйынса Эске эштәр министрлығы ЮХХДИ идаралығы "Салауат Юлаев" хоккей клубы менән берлектә юлдарҙың хәүефһеҙлеге буйынса акция иглан итте. Баш ҡаланың транспорт күп йөрөгән урындарында клубтың билдәле хоккейсылары һүрәттәре төшөрөлгән баннерҙар ҡуйылған. Александр Еременко, Александр Радулов, Олег Твердовский, Александр Пережогин һәм башҡа хоккейсылар водителдәрҙе һәм йәйәүлеләрҙе юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен теүәл үтәргә саҡыра.

✓Илдә уйын автоматтары, казино тотоу тыйылһа ла, ҡайһы бер эшҡыуарҙар закон боҙоуҙы дауам итә. Өфөлә, мәҫәлән, ошо арала ғына утыҙҙан ашыу уйын учреждениеһы асыҡланған. Уларға ҡарата ҡәтғи сара күреләсәк.

✓Ғинуарҙа баш ҡалала яңы төҙөлгән йорттарҙағы фатирҙарҙың бер кв метры хаҡы, 0,5 процентҡа күтәрелеп, уртаса 38,3 мең һум тәшкил иткән. Өс бүлмәле фатирҙарҙың бер кв метры - 38,6, ике бүлмәлеке - 38,7, бер бүлмәлеһе иһә 37,6 мең һум булған.

✓Былтыр республика юлдарында 5280 юл-транспорт фажиғәһе теркәлгән, уларҙа 612 кеше һәләк булған. Былтыр республикала 1085 транспорт сараһы урланған. Шуларҙың 991-е табылған.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Өфө ҡалаһында милли көрәш буйынса Башҡортостан Республикаһы Президенты кубогына I асыҡ турнир үтте. Республика йылына арналған бәйгегә Башҡортостандың төрлө район һәм ҡалаларынан, Ханты-Манси автономиялы округынан, Свердловск өлкәһенән, Татарстандан, Үзбәкстандан, Ҡырғыҙстандан, Ҡаҙағстандан 200-ҙән ашыу спортсы йыйылды.**

# БАТЫРҘАР ЕҢЕҮЕ...

## Президентҡа арналды

Милли көрәш менән әлеге ваҡытта Башҡортостанда 20 меңдән ашыу кеше шөғөлләнә. 2009 йылдың декабрендә милли көрәш яңынан реестрға индерелде, тимәк, хәҙер спорт мастеры исеме, разряд алыу мөмкинлеге йәштәрҙе был спорт төрөнә тағы ла күберәк ылыҡтырасаҡ. 2010 йылдың декабрендә Мәскәүҙә үтәсәк көрәш фестивале программаһына самбо, ирекле көрәш төрө менән бер рәттән, милли көрәштең дә индерелеүе, 2013 йылда Ҡаҙанда үҫмерҙәр араһында үтәсәк Бөтә донъя универсиадаһында билбаулы көрәштән тыш, милли көрәш индерелеүе бик яҡшы яңылыҡ.

Яңы йылдың беренсе бәйгеһе үҙ майҙанына байтаҡ көрәшселәрҙе йыя алыуы ла был спорт төрөнөң киң билдәлелек яулай барыуының аныҡ күрһәткесе булып тора. Икенсенән, барлыҡ ҡатнашыусылар һәм ойоштороусыларҙың берҙәм фекеренсә, турнирҙың Президент призына үтеүе уның баһаһын һәм бәҫен тағы ла күтәргән. Йылдан-йыл был турнирҙың мәртәбәһе артыр һәм батыр ир-уҙамандарҙы көрәш майҙанына йыйыр, тигән өмөттә ойоштороусылар.

Дөйөм командалар иҫәбендә баш ҡаланың Киров районы был турнирҙа иң күп мәрәй йыйып, иң яҡшыһы, тип табылды. Республикала ғына түгел, ә тотош Рәсәйгә дандары таралған Рәдиф Аҡсурин, Наил Мөхәмәтйәнов, Рушан Ильясов, Вадим Зөлҡәрнәев, Рөстәм Арыҫланов һ.б. ҡасандыр билдәле тренер Фәнис Ураҙбахтин тәрбиәләнеүселәре булған. Бөгөн улар менән эшләүсе тренерҙарҙың береһе Юнир Ильясов әйтеүенсә, егеттәр техник яктан бик оҫта көрәшә, уларға бары күнекмәләр өсөн зал һәм төрлө ярыштарға йөрөргә мөмкинлектәр генә булдырырға кәрәк. Һәр төрлө ярҙам күрһәткәне өсөн районға, Милли көрәш федерацияһына, Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығына рәхмәтле көрәшселәр.

Турнирға Ханты-Манси округы милли көрәш федерацияһының вице-президенты, Сургут ҡалаһының спорт мәктәбе тренеры, сығышы менән Учалы районы Сәфәр ауылы егете Айбулат Сафин етәкселегендә Себерҙән бер төркөм көрәшселәр ҙә килгәйне. Айбулат Йәүҙәт улы әйтеүенсә, был төбәк көрәшселәре 1998 йылға тиклем бары тик һабантуйҙарҙа ғына көрәшеп йөрөгән. Бөгөн Төмән командаһында ярайһы уҡ көслө көрәшселәр туплаған һәм улар Рәсәйҙең 27 командаһы араһында Татарстан һәм Башҡортостан спортсыларынан ғына ҡалышып, өсөнсө урында килә. Башҡорт халҡының мәҙәниәтен милли көрәш билдәләй, ти тренер һәм шуға ла бөтә округҡа бер генә тренер, бер генә милли көрәш секцияһы булыуға ҡарамаҫтан, яҡындағы биш йыл эсендә Себерҙә лә милли көрәште иң юғары кимәлгә еткерергә хыяллана. Төмән өлкәһе вуздарында көрәш буйынса махсус белгестәр әҙерләнмәү сәбәпле, киләсәктә Башҡортостан егеттәрен тренер итеп эшкә саҡырыу мөмкинлеге ынғай хәл ителеренә ышана ул.

Милли көрәштә 50 йәште үткән көрәшселәр ветерандар рәтенә баҫа. Турнирҙа ошондай ветеран спортсыларҙың да ҡатнашыуы тамашаға үҙенә күрә бер йәм, күркәмлек өҫтәне, бәйгене оло оҫталыҡ мәктәбенә әүерелдерҙе. Шаяртып ҡына бер-берененә: "Әйҙә, ҡартлас!" - тип өндәшкән төртмә телле, үҙ сираттарын сабыр ғына көтөп ултырыусы ағайҙарҙың көрәш келәмендә шартына килтереп көрәшеүҙәренә, бер-береһен имгәтеп ҡуйыуҙан һаҡланып, һаҡ ҡына тотоноуҙарына, йәтеш кенә итеп ҡолауҙарына ҡарап, һоҡланып ултырылды. Бушҡа ғына ҡырҡ йәш - йәшлектең ҡартлығы, илле йәш - ҡартлыҡтың йәшлеге, тимәйҙәр икән. Йәш сағында майҙанда ал бирмәҫ батыр булған ағайҙар икенсе йәшлеген кисерә һәм бөгөн дә һабантуйҙарҙа тәкә алырлыҡ ҡеүәт-дарманға эйә. Мәҫәлән, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан килгән Раян ағай Мырҙабаев шундайҙар рәтенән. Әле лә һабантуй етә башлаһа, сабыш аты һымаҡ, йөрәк елпелдәй башлай, тип шаярта үҙе тураһында. Үҙен формала тотоу өсөн Раян ағай һаман да спорт менән шөғөлләнә, Мораҙымда эшләгән милли көрәш секцияһына йөрөп, таһыллығын арттыра. "Көрәшеүҙең бер сере лә юҡ, бының өсөн бары көрәш алымдары белергә һәм көсөңдө дөрөҫ ҡулланырға кәрәк", - ти ул.

Көрәш - ул теннис та, шахмат та, домино ла, волейбол да түгел, уның ауыр спорт төрө булыуын көрәшеп ҡарамаған ғына белмәйҙер. Бер тауыштан: "Түшәктә сирҙән үлергә ҡушмаһын Хоҙай, яуҙа, көрәштә үлгәнең мең артыҡ", - тигән оло йәштә лә йәшлек дәрте менән йәшәүсе ағайҙарға: "Афарин", - тиергә генә ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республика йылына арналған милли көрәш буйынса Башҡортостан Республикаһы Президенты кубогына I асыҡ турнирҙа 65 кг-ға тиклемге ауырлыҡта 1-се урынды Вадим Зөлҡәрнәев (Өфө); 75 кг-ға тиклем - Альберт Рәхмәтуллин (Мәләүез); 90 кг-ға тиклем - Илдар Моратов (Өфө); 100 кг-ға тиклем - Рәдиф Аҡсурин (Өфө); 100 кг ашыу ауырлыҡта - Рөстәм Арыҫланов (Өфө) яуланы.**

**Командалар араһында 3-сө урынға Салауат районы, 2-се урынға Учалы районы көрәшселәре сыҡһа, Президент кубогын иң күп мәрәй йыйған Өфө ҡалаһының Киров районы спортсылары яуланы.**

Ләйсән НАФИҠОВА.



ҺОРАУ - ЯУАП

## БҮЛӘК ИТЕРГӘ ХОҠУҠЛЫ

**Ағайым менән икебеҙгә ауылдағы өй мираҫҡа ҡалды. Бер аҙ ваҡыттан һуң шуны белдем: ағайым миңә әйтмәйенсә йорт һәм ер өлөшөн улына бүләк иткән. Ул дөрөҫ эшләгәнме?**

Эйе, өлөш милекселәренең береһе үҙ өлөшөн ҡалған милекселәр ризалығын һорап тормайынса ла кемгә теләй, шуға бүләк итергә хоҡуҡлы. Ә инде ул үҙ өлөшөн һатырға ҡарар иткән хәлдә һеҙ иң тәүге һатып алыусы хоҡуғы менән файҙалана алыр инегеҙ. Был осраҡта РФ Граждандар кодексының 2-се пункты 246-сы статьяһы буйынса ағайығыҙ өлөшөн башҡа кешегә һатырҙан алда уны һеҙгә тәҡдим итергә тейеш булыр ине.

## ДӘРЕСКӘ ҠАМАСАУЛАМАҺЫН

**Уҡытыусы гел генә баланың кеҫә телефонын, башҡа әйберҙәрен тартып ала һәм уларҙы ата-әсә ҡулына ғына ҡайтарып бирә. Уның был ҡылығы хоҡуҡ нормаһына һыйышлымы?**

Уҡытыусы дөрөҫ эшләмәй, әлбиттә, сөнки кеҫә телефоны баланың ата-әсәһе милке иҫәпләнә, милек, мәғлүм булыуынса, тейелгеһеҙ: "Суд ҡарарынан тыш, бер кем дә үҙ милкенән мәхрүм ителә алмай".

Мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Әгәр уҡыусының телефоны уҡытыусыға дәрес алып барырға, класта тәртип һаҡлауға ҡамасаулай икән, ул дәрес ваҡытында телефондарҙы һүндереп тороуҙы талап итә ала. Был талап үтәлмәгән хәлдә, мәктәп директорынан яҙма рөхсәт алып, уҡытыусы баланы дәрестән сығарып ебәрә ала, ләкин телефонын тартып алырға хоҡуғы юҡ.

## ДИПЛОМ ИҪКЕРМӘЙ

**Былтыр инглиз һәм француз телдәренән уҡытыусы дипломы алдым, ләкин мәктәптә эшләргә теләгем юҡ. Күңелгә ятышлы башҡа берәй эш тә таба алмайым. Диплом алғас та эшкә урынлашмаһаң, ул үҙ көсөн юғалта, тип ишеткәйнем, был дөрөҫмө?**

Дөрөҫ түгел, дипломдың "яраҡлылыҡ срогы" юҡ, ул ниндәй осраҡта ла үҙ ҡиммәтен юғалтмай. Эш шунда: был йәһәттән медицина хеҙмәткәрҙәре өсөн генә ҡайһы бер талаптар бар. Врач йәки провизорҙар үҙ һөнәре буйынса биш йылдан ашыу эшләмәгән осраҡта был эшкә ҡайтанан әҙерлек үткәс кенә ҡабул ителә ала (РФ Хеҙмәт кодексы, 65-се статья).

## ЫШАНЫС МЕНӘН ТОТОН

**Улым былтыр 11 класты тамамланы, ләкин математиканан БДИ тапшыра алманы. Әгәр ул быйыл ҡабаттан тапшыра алмаһа, белешмә менән ҡайҙа уҡырға алырҙар?**

Имтиханды ҡабаттан тапшыра алырына ышаныс тыуҙырып, уны психологик йәһәттән әҙерләргә, материалды ныҡлап үҙләштерергә кәрәк, әле ваҡыт бар. Ә шулай ҙа күңелһеҙ хәл тағы ҡабатлана ҡалһа, ул белешмә менән вузға уҡырға инә алмаясаҡ, әлбиттә. Ә бына 9 класс нигеҙендә урта профессиональ белем биреү учреждениеларының береһенә, һис шикһеҙ, уҡырға инә ала.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Быйма



Боронғолар бөтә кейемде тиерлек һарыҡ йөнөнән әҙерләп кейгән: ойоҡ, бейәләй, шарф, тире тун, тире кәпәс, тула салбар, йөн билбау, сарыҡ,быйма, кейеҙ ойоҡ, хатта тире салбар. Һарыҡ йөнө ҡояштың иң файҙалы нур-энергияһын үҙенә һеңдерә. Был кейемдәрҙе тере һарыҡ йөнөнән әҙерләйҙәр. Әгәр кеше 12 йәшкә тиклем быйма кейһә, өлкәнәйгәс, һалҡын тейеүҙән һәм түлһеҙлек сирҙәренән ҡотола. Ололарҙы иһә быйма быуындар һыҙлауынан дауалай, йылыта, ҡан тамырын киңәйтә, ҡан йөрөшөн көйләй. Эсенә йөн ҡуйып эшләнгән ултырғыс түшәктәре ырыҫ-бәхет сигенеүҙән, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат ғәйрәте кәмеүҙән һаҡлай. Шуға ла ултырғыстарға йөн түшәк, аҫҡа кейеҙ түшәп ятыу киң таралған, аяҡ кейеменә лә кейеҙ олтораҡ һалып кейеү һаулыҡты нығыта.

## Йүкә япрағынан төнәтмә

❖ Йөрәк өсөн 70 грамм имән ҡайырыһы, 30 грамм йүкә япрағы ҡушып яһалған төнәтмә эсәһең.

❖ 10 грамм бөтнөк, 10 грамм ваҡ йүкә япрағы төнәтмәһен эсәһең.

❖ 30 грамм йүкә сәскәһе, 60 грамм ҡурай еләге төнәтмәһе тирләү өсөн эселә. 1 стакан ҡайнар һыуҙа эшләйһең.

❖ 60 грамм аҡ сәскә, 30 грамм йүкә япрағы алына. Йөрәк өсөн, ауыҙ-тамаҡты сайҡатыу өсөн ҡулланыла.

## Муйыл

Муйылды эс китеүҙән ҡулланалар. Йыуып киптерелгән 5-6 ҡалаҡ муйылды 0,5 литр һыуҙа 10-15 минут ҡайнатаһың һәм көнөнә 3-4 тапҡыр эсәһең. Ҡоролай ашарға ярамай, һөйәге зарарлы, дауалау көсө муйылдың тире-итендә.

## Сәсһеҙ ҡалмайым, тиһәң...

Урамға сыҡһаң да, телевизор ҡараһаң да күп кеше ҡышын-йәйен ялан баш йөрөй. Ошолай оҙаҡ йөрөү баш тиреһендәге ҡан тамырҙары ҡыҫылыуға килтерә, ҡан йөрөшө боҙола, сәс дөрөҫ туҡланыуҙан мәхрүм була. Һөҙөмтәлә, сәс ҡойола, ялтас (пеләш) ҡалаһың, баш та ауырый. Ҡояш нуры ла баш тиреһен киптерә, был сәбәптән дә сәс ҡойолоуы ихтимал. Шуға ла сәсһеҙ ҡалмайым, тиһәң, һәр саҡ башыңа кейеп йөрө.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Осрашыу

● Осрашырға барған кеше уҡыу йәки яҙыу менән мәшғүл булһа, нимә яҙып, нимә уҡығанын һорамағыҙ.

● Барыуҙың маҡсаты кешенең өй эсендәге хәлен белеү түгел, ә дуҫлыҡ күрһәтеү була. Шуның өсөн барған кешенең эшен тикшермәгеҙ, китаптарын, яҙыуҙарын аҡтармағыҙ, һеҙгә исемләнмәгән хаттарҙы ҡулығыҙға алмағыҙ (араларында камил дуҫлыҡ булған кешеләр өсөн бының ҡағылмауы мөмкин).

● Осрашыу матур ғәҙәт булһа ла, гөрөфғәҙәттән тыш күп осрашмағыҙ. Ҡала кешеләренә иртәнге сәғәт һигеҙҙән алда һәм киске сәғәт туғыҙҙан һуң, бигерәк тә аш һәм сәй ваҡыттарында, бармағыҙ.

● Уҡыу һәм уҡытыу менән мәшғүл булған шәкерт һәм мөғәллимдәргә, контора һәм судта эшләгән секретарь һәм хеҙмәткәрҙәргә, сауҙа итеүселәргә эш ваҡытында бармағыҙ. Эштән һуң да уларҙа оҙаҡ ултырмағыҙ.

● Вәғәҙә иткән кешеләргә ваҡытында һәм сәғәтендә барығыҙ, уларҙы көттөрмәгеҙ. Әгәр ҡапыл берәй ҡаршылыҡ килеп сыҡһа, уларға хәбәр итегеҙ.

● Сәфәрҙәге дуҫтарығыҙҙың хәлен хат яҙып белешегеҙ. Үҙегеҙгә яҙһалар, яуап бирегеҙ. Хатығыҙға яуап бирмәгән дуҫтарығыҙҙы шаяртыңҡырап шелтәләү мөмкин.

● Ҡарындаш һәм дуҫтарығыҙҙың ауырыуы тураһында хәбәр алғас, хәлдәрен һорашырға барығыҙ. Ҡапыл ауырып китһәләр, яндарына инергә табиб ҡушмаһа, күрешергә мөмкин булмаһа йәки тынысһыҙландырмау кәрәк булһа,уның хәлен өй эсендәгеләрҙән һорау менән ҡәнәғәтләнегеҙ.

● Ауырыу янына барғанда оҙаҡ ултырмағыҙ, күңеленә ауыр буласаҡ һәм ҡайғылы һүҙҙәр һөйләмәгеҙ.

● Ауырыуына сәбәп булған әйберҙәрҙән һаҡланмағаны өсөн шелтәләмәгеҙ. Мөмкин тиклем шикәйәттәрен тыңлағыҙ, күңелен рәнйетмәгеҙ, көс бирегеҙ. Сабырлыҡ теләгеҙ, ҡурҡытмағыҙ, тиҙҙән шифалана- сағына өмөт бирегеҙ һәм сәләмәтлек өсөн доға ҡылығыҙ.

### Ҡайғы уртаҡлашыу ҡағиҙәләре

● Ҡайғы килгән кешенең ҡайғыһын еңеләйтергә тырышығыҙ, быйдай ҡайғыларҙа сабыр итеүгә өндәгеҙ, сабыр иткәндәргә вәғәҙә ителгән сауаптарҙы хәтерләтегеҙ, "Иннә лилләһи үә иннә иләйһи ражиғүн" аят Кәримәне уҡығыҙ.

● Яҡындарығыҙҙың береһе вафат булһа, туғандарының ҡайғыһын һәм хәсрәттәрен уртаҡлашығыҙ, йыназаһына барығыҙ, эштәренә ярҙам итегеҙ.

● Ҡайғы уртаҡлашыу ваҡытында ҡайғылы булып күренегеҙ, ҡайғыны белдереү өсөн яраған кейемдәр кейегеҙ. Көлмәгеҙ, шаярмағыҙ, ҡайғынан башҡа һүҙ һөйләмәгеҙ. Ҡайғыны белдермәгән эштәрҙе һис эшләмәгеҙ.

ӘЙТӘГҮР!

**Беренсе мөхәббәт менән осрашыу нисек булды әле? Кисереүҙәрегеҙҙең сәбәпсеһе булған кешене күргәс тә аяҡтар ҡалтыранды, ҡайнар хистәр тулҡыны бәреүҙән танау остарына, маңлайға тир бөрсөктәре бәреп сыҡты, Уны һәр ваҡыт күрге, тауышын ишетке килеп тик торҙо, йоҡо ла, аппетит та ҡасты... Хәтерегеҙгә төштөмө? Беҙҙең арала беренсе мөхәббәт тойғоларын ошолайыраҡ кисереүселәр ҙә, бөтөнләй кисермәүселәр ҙә, шул уҡ ваҡытта алыҫ үткәндәге тәүге һөйгән йәрҙәрен ғүмер буйы онота алмаусылар ҙа бар. Ғашиҡтар көнө уңайы менән бер нисә уҡыусыбыҙ беренсе мөхәббәт тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша:**

# БЕРЕНСЕ МӨХӘББӘТ...



## Ул ысын яратыумы, әллә үҙ-үҙеңде алдау ғынамы?

**Зарифа КИНЙӘБАЕВА, 52 йәш:** Миңә, Аллаға шөкөр, беренсе мөхәббәт трагедияһын кисерергә тура килмәне (Аллаға шөкөр, тием, сөнки күптәрҙең беренсе мөхәббәте яуапһыҙ булып, уларҙың нисек ғазапланғанын күргәнем бар). Ял һайын тиерлек күрше ауылда йәшәүсе апайым менән еҙнәмдәргә бара торғайным. Уларҙың ҡыҙы менән тиндәшбеҙ. Еҙнәм беҙҙе киске уйынға бик сығара һалып бармай торғайны. Үҙебеҙ ҙә бала ғына инек шул, 15-16 йәшлек сағыбыҙ. Бер саҡ клубта гармунға дәртләнеп бейеп йөрөгән мәлдә кемдендер үҙемә төбәлгән үткер ҡарашын тойҙом. Йөрәгем "жыу" итеп ҡалды. Йәшел күҙле был егет шул көндө мине оҙата килеп, усал еҙнәмдән ҡыуылып ҡайтты. Оҙаҡламай әрмегә китте һәм ике араны хаттар бәйләне. Матур һүҙҙәре менән генә түгел, үткерлеге, ышаныслы булыуы менән дә был егет йөрәгемде яулап алғайны инде. Әрменән ҡайтҡас та өйләнештек. Ул беренсе һәм мәңгелек мөхәббәтем булып ҡалды. Матур ғаилә ҡорҙоҡ, һөкләнгыс итеп йәшәнек, аҡыллы балалар үҫтерҙек. Шундай матур мөхәббәт бүләк иткәне өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен.

**Вәкил МОСТАФИН, 30 йәш:** Һәр кемдең беренсе мөхәббәте булалыр, шул уҡ ваҡытта уны онотоп, яңынан шул уҡ хистәр менән яратырға мөмкиндер, тип уйлайым. Беренсе мөхәббәтемде ғүмер буйы онотмайым, тигән кешеләрҙең һүҙенә ышанмайым, был - үҙ-үҙеңде алдау ғына. Был нимәнән килә? Әгәр ҙә кешенең никахы уңышһыҙ булһа, ул ана шул "беренсе мөхәббәтен" иҫләп, һағынып, булған мөмкинлектәрҙе ҡулынан ысҡындырғаны өсөн үкенеп йәшәй, өҫтәүенә, әгәр мин беренсе мөхәббәтем менән бергә ҡалһам, бәхетле булыр инем, тип хыяллана. Хатта минең таныштарым араһында ла үҙенең тормош иптәшенә ризаһыҙлыҡ белдереп, әллә ҡайҙа үткәндәрҙә ҡалған "беренсе мөхәббәтен" иҫләп йәшәүселәр бар. Ана шул "беренсе мөхәббәте" менән яңынан осрашһа, ул хатта ҡорған ғаиләһен емерергә, балаларын етем итергә лә риза. Был хәлдең үкенеүҙәр менән тамамланыу ихтималы ла ҡыҙыҡһындырмай ундай кешеләрҙе. Шуға күрә, ғүмер буйы "беренсе мөхәббәтем", тип йәшәү бөтөнләй дөрөҫ түгел, беҙ хистәребеҙҙе ҡулға алырға, уны дөрөҫ йүнәлешкә бора белергә тейеш. Бәхетле һәм мөхәббәтле булыр өсөн.

**Сынбулат ЙӘРКӘЕВ, 32 йәш:** Тәүге тапҡыр бөҙрә ҡара сәсле күрше ҡыҙына ғашиҡ булғайным. Хәҙер көлөп кенә иҫләргә ҡалды инде. Ысынлап та, беренсе тапҡыр кисергән хис-тойғолар бер ваҡытта ла кире ҡабатланмай, улар шул тиклем саф. Һин үҙең дә эскерһеҙ мөхәббәтеңә илереп, күккә менгәндәй йөрөйһөң. Дин тота башлағас, мөхәббәткә икенсе күҙлектән ҡарай башланым. Йәғни, беҙ кемделер яратабыҙ икән, һуҡырҙарса табынып, уны илаһилаштырырға йәки артыҡ күтәрергә тейеш түгелбеҙ. Ә ошо тойғоно биргән өсөн Аллаһҡа рәхмәт әйтергә тейешбеҙ. Югиһә, бөтөнләй ғашиҡ булмай йәшәгәндәр ҙә була бит. Тормошта иң ҡыйыны - яратмай йәшәү. Бөтә кешегә лә бәхетле мөхәббәт теләйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Психология күҙлегенән ҡарағанда, беренсе мөхәббәт кеше өсөн тәүге шәхси һынау булып тора икән, йәғни, кешенең шәхес булараҡ формалашыуы ниндәйҙер кимәлдә тәүге һөйөү осорон нисек үткәреп ебәреүенә лә бәйләнгән. Ысынлап та, бер кем дә һине ғашиҡ булырға өйрәтмәй, бында бер ниндәй ҙә яҙылған ҡанундар юҡ, гөмүмән, ғашиҡтар өсөн ниндәйҙер ҡағиҙәләр яҙыу мөмкин дә түгел. Беренсе тапҡыр ғашиҡ булған кеше мөхәббәтте бөтә нәмәнән дә өҫтөн ҡуя һәм уны һаҡлап ҡалыр өсөн утҡа ла, боҙға ла инергә әҙер. Иң мөһиме, бына шул тәүге хис-тойғоларға алданмаҫҡа, кисереүҙәргә хужа була белергә кәрәк. Шул ваҡытта беренсе яратыу осоро беҙҙең өсөн ғазапҡа әйләнмәҫ, ә, уңһаҡ та, уңмаһаҡ та, матур хәтирә булып һаҡланыр.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

БӘХӘС ҠОРАМ

# НИНДӘЙ НАҘҘАН МӘХРҮМ...

## буйҙаҡтар

**Атай-әсәйҙәре мөхитендә ҡурсаланып, етеш тормошҡа өйрәнеп китеп, ҡырҡ йәшкә етеп, үҙ ғаиләһен ҡормай, бала үҫтереүҙе инҡар итеп йәшәүсе буйҙаҡтарҙың ишәйеп китеүе беҙҙең заманға хас бер күренеш бит. Әлбиттә, юғары белемле, йөҙ, буй-һыны матур ирҙәрҙең ғаилә ҡормауына төрлө сәбәптәр барҙыр. Тик ундай буйҙаҡтарҙы күрһәм, мәктәп йылдарында уҡыған бер хикәйә иҫкә төшә. Ул хикәйә "Мин бер саҡ әсәй булдым" тип атала ине.**

"Беҙҙең палатаға ауылдан йәш ярымлыҡ малайҙы килтереп һалдылар. Әсәһе күҙ йәштәрен күрһәтмәҫкә тырышып, балаһын һөйҙө лә: "Балалар, ҡараштырып тороғоҙ инде", - тигән үтенесен белдереп, ҡайтып китте. Тәүҙә Павлик балаларҙың бер-береһе менән аралашыуын, уйнауын ҡарап торҙо ла, ҡапыл үҙенең әсәйһеҙ, яңғыҙ ҡалауын шәйләп, илап ебәрә яҙҙы. Мин уға тиҙ генә кәнфит тотторҙом. Ул йылмайып, рәхмәт белдереп баш ҡаҡып, кәнфитте йәлап ҡына ашарға тотондо. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ул тағы ла балауыҙ һығырға уйланы, мин был юлы ла уны кәнфит менән алдаштырырға өлгәрҙөм. Ул миңә йылмайҙы, ошонан һуң мин гел уның янында булдым. Ашаттым, уйнаттым, йоҡларға һалып, әкиәттәр һөйләнем. Тик бер көн мине операцияға алып киттеләр. Балаларҙан Павликты ҡараштырып тороуҙарын һораным. Операциянан һуң уянып, маңлайымды, битемде кескәй генә йомшаҡ ҡулдарҙың һыйпауын тойоп, күҙҙәремде асып ҡараһам, Павлик баҫып тора. Ул илай яҙып, миңә эйелде лә: "Әсәй!"- тине. Был һүҙҙәрҙән әҫәрләнеп: "Эйе, үҫеп еткәс, ғаилә ҡормормон. Һис шикһеҙ, минең дә балаларым булыр. Тик ул саҡ мин инде әсәй булмам, атай булырмын", - тип үҙемә һүҙ бирҙем.

Буйҙаҡтар ошо хикәйәне уҡыһа, ниндәй нескә хистәрҙән мәхрүм булып йәшәүҙәрен тойорҙар ине һымаҡ. Ғөмүмән, нисек ҡотҡарырға икән егеттәребеҙҙе буйҙаҡлыҡтан? Ни өсөн афәткә әйләнеп барған был мәсьәлә урындарҙағы етәкселәрҙе борсомай? Әйҙәгеҙ, һөйләшәйек әле ошо хаҡта.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!

# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?




Анығ статистика мәғлүмәттәре булмауы сәбәпле, башҡорт типтәрҙәренең дөйөм һанын билдәләп булмай. Фәҡирлеккә төшкән элекке башҡорт аҫабалары үҙ общинаһынан һәм сословиеһынан сығып, типтәргә әйләнгән. Уларҙың ҡайһылары, яһаҡ күләме артыҡ ҙур булмағанлыҡтан, бобылдәр рәтенә күскән. Мәҫәлән, документтарҙан XVII быуат аҙағында Нуғай юлы Юрматы ауылы башҡорттары Митросов һәм Йылымовтың бобыль яһағы түләүе билдәле. 1686 йылда Нуғай юлы башҡорто Ҡасаҡов үҙенең ни сәбәптән припущенниктарҙың бобыль төркөмөндә булыуын былай тип аңлатҡан: "Быға тиклем ата-бабаларыбыҙ һәм үҙебеҙ Ҡыпсаҡ олоҫонда булдыҡ. Ә хәҙер фәҡирлек һәм ярлылыҡ арҡаһында бобыль яһағына яҙылғанбыҙ". Нуғай юлы Мең олоҫо башҡорто Атасыҡ Илекәйевтең ата-бабалары күп йылдар буйына бобыль яһағын һыуһар менән түләп килеп, 1688 йылда аҡсалата түләнә торған типтәр яһағына күсә. Был миҫалдар Башҡортостанға ситтән ингән бобыль сословиеһында ерһеҙ башҡорттарҙың да булыуын һәм уларҙың артабан типтәрлеккә күсеүен раҫлай. VIII ревизияға (1834 йыл) бобылдәр этник яҡтан ҡатнаш булған 21 ауылда ғына тороп ҡала: Стәрлетамаҡ өйәҙендә - 693 йән, Өфө өйәҙендә - 122 йән, Уса өйәҙендә 9 йән (ир-ат иҫәбе) теркәлгән.

Типтәрҙәр араһында башҡорттар байтаҡ була. Ҡаҙан юлы Елдәт (йәлдәк) олоҫо башҡорттары Алтыбаев һәм Иленбаев 1679 йылда типтәр яһағы түләгән. Йәлдәк аҫабаларының салйоготтарҙы килмешәк итеп алыуы билдәле. Шул уҡ олоҫтоң Бирүш ауылында XIX быуат башында 20-нән ашыу башҡорт сығышлы типтәр йәшәгән. Башҡорт типтәрҙәре Бөрө өйәҙенең Гәрәй олоҫонда ла, Троицк өйәҙенең Ҡарағужа ауылында ла теркәлгән. Бөгөлмә өйәҙенең Һары Биҡҡол ауылы тотошлайы менән типтәр-башҡорттарҙан торған. Башҡорттарҙы яһаҡ түләүсе татар припущенниктары араһында ла осратып булған. 1795 йылда Ҡотосәс (Имән), Һарысәс Тәҡирмән, Һаҡлы Сураш, Иҫке Дөрөш, Мерәҫ, Сәйет, Шырсылы (Шандытамаҡ) һәм Иҫке Һаҡлы ауылдары кешеләре "башҡорттар" иҫәбенән сыға һәм яһаҡты аҡсалата түләүгә яҙыла, йәғни яһаҡлы татарҙар сословиеһына күсә.

Әлбиттә, 1855 йылда Ырымбур, Һамар, Вятка һәм Пермь губерналарында иҫәпкә алынған 93 895 типтәр (ир-ат енесенән) араһында башҡорттарҙан башҡа татарҙар һәм сыуаштар ҙа була. Әммә колонизация дәүеренә тиклем башҡорт типтәрҙәре бер төрлө социаль-этник категорияға ҡараған. Башҡортостанға Волга буйы халыҡтары күпләп күсеә башлағас, типтәрҙәр төрлө этник сығышлы социаль төркөмгә әйләнә. 1855-1865 йылдарҙа кантон идаралығы ҡарамағына типтәрҙәр ҙә индерелә, әммә кантон системаһы бөтөрөлгәс, улар феодаль бәйлелеге һаҡланған крәҫтиәндәрҙең социаль-этник төркөмөн барлыҡҡа килтерә. Билдәле сәбәптәр арҡаһында татар типтәрҙәре татар милләтенә, фин телләләре - мари, мордва, удмурттарға ҡушылырға ынтыла. Башҡорт сығышлы типтәрҙәрҙең бер өлөшө башҡорттарға тартылһа, уларҙың күпселеге татарҙар составына инеп, һуңынан Минзәлә, Бөгөлмә, Алабуға һәм Сарапул өйәҙҙәре аҫаба башҡорттарының ассимиляцияға бирелеүенә юл аса.

Үткән замандарҙа башҡорт йәмғиәтенең иҡтимағи тормошо тураһында бер ни ҙә белмәгән тикшеренеүселәр башҡорт типтәрҙәрен ("тептяры из башкир") этник башҡорт сығышлы итеп ҡарамайынса, башҡорт сословиеһына күскән, йәғни хоҡуҡтары һәм бурыстары буйынса башҡорттарға тиңләнгән татар һәм башҡа халыҡ төркөмдәре, тип фаразлай. Шул уҡ ваҡытта 1855 йылда Башҡорт ғәскәренә йәлеп ителгән типтәр төркөмдәре документтарҙа айырым асыҡ итеп татар типтәрҙәре, сирмеш (черемис) типтәрҙәре, сыуаш типтәрҙәре, башҡорт типтәрҙәре, тип теркәлгән. Кантонлыҡ осороноң һуңғы ун йылында ғына типтәрҙәргә башҡорт сословиеһына хас булған бурыстар йөкмәтелә.

Көнбайыш Башҡортостанда этнос-ара процестарға көслө йоғонто яһаусы факторҙар булыуы Минзәлә, Бөгөлмә, Алабуға һәм Сарапул башҡорттарының татарҙар менән яҡынлашыуына һәм, һуңғы сиктә, улар тарафынан йотолоуына килтерә. Ошо факторҙарҙы ғилми күҙлектән ҡарап үтәйек.

**Беренсенән, көнбайыш башҡорттары һәм татарҙар араһында барған этник процестар үҫешенә уларҙың тел һәм мәҙәни-көнкүреш мөнәсәбәттәре яҡынлығы булышлыҡ итә.** Лингвистар башҡорт телен төрки телдәрҙең ҡыпсаҡ төркөмөнә индерә, татар теле уға иң яҡын телдәрҙән һанала. Башҡорт теле татар теленән өндәрҙең консонантлығы һәм лексикаһы яғынан айырыла. Көндәлек аралашыуҙа ошо халыҡ вәкилдәренә тәржемәсе кәрәкмәй. Элек-электән башҡорт мәктәптәрендә һәм мәҙрәсәләрендә уҡытыу Урта Азияла, Ҡаҙағстанда, Кавказда, Волга буйында һәм Уралда китап һәм эш алып барыу теле булараҡ киң таралған "төрки" телендә алып барылған. Һуңғы осорҙа "төрки" яҙма теле татар теле менән алмаштырыла. Ошо шарттарҙа Бөгөлмә, Минзәлә, Алабуға һәм Сарапул башҡорттарының теле татар теленә яраҡлаша башлай, ә XIX быуат аҙағынан тулыһынса тиерлек ассимиляцияланыуға дусар була. Шул заманда йәшәгән башҡорт шағирҙары һәм яҙыусыларының, мәҫәлән, Ҡол Ғәли, Тажетдин Ялсығол, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулланың әҫәрҙәре лә ошо телдәрҙә ижад ителә һәм халыҡ араһында тарала.

Татар телендә уҡытыу һәм татар телендә баҫылған әҙәбиәт, һан яғынан күбәйә барған татарҙарҙың ошо территорияла башҡорттар менән тығыҙ аралашып йәшәүе менән ҡуша килеп, Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙе башҡорттарына татар мәҙәни сифаттарын һеңдерә бара. Көнбайыш башҡорттарының этник үҙаңы ике төрлөгә әйләнеп, аҙаҡҡа табан уларҙың татарҙар тарафынан тулыһынса ассимиляцияланыуына килтерә.

**Икенсе фактор. Башҡорттарҙың татарҙар тарафынан ассимиляцияланыуы оҡшаш социаль-иҡтисади мөнәсәбәттәрҙең күп булыуы менән көсәйә бара.**

Алда күрһәтелгән дүрт өйәҙҙә йәшәүсе ерһеҙ көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙып, припущенник һәм типтәр тип атала башлап, татар припущенниктары кеүек, башҡорт ерҙәренә хужа булмайынса, улар менән файҙаланыу хоҡуғына ғына эйә була. Ерһеҙ ҡалған крәҫтиәндәрҙең ошо ике төркөмө башҡорт аҫабалары менән бәйле булып, община ерҙәре менән файҙаланған өсөн уларға оброк түләргә мәжбүр була. Уларға дәүләт һәм мир бер үк бурыстар йөкмәтә. Башҡорт һәм татар припущенниктарының социаль хәле бер типта булыуы уларҙың яҡынайыуына булышлыҡ итә. Ерһеҙ башҡорт припущенниктары, феодаль бәйлелеккә дусар булған крәҫтиән булараҡ, аҫаба башҡорттарға түгел, социаль яҡтан үҙҙәренә яҡыныраҡ булған татар припущенниктарына нығыраҡ тартыла.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ҺӨЙЛӘШЕБЕҘ - БАШҠА,

## милләтебеҙ - башҡорт

**Күренекле ғалимыбыҙ Әнүәр Закир улы Әсфәндийәровтың "Һеҙ кем, көнбайыш башҡорттары, йәки Тарихи документтар ни һөйләй?" тигән баш аҫтында сыҡҡан күләмле ғилми мәҡәләһен бик ҡыҙыҡһынып, ентекләп уҡып барам. Шундай һығымтаға килдем: башҡорт теленең көнбайыш диалектын, йәғни көнбайыш башҡорттарының һөйләш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмайынса, беҙ күпме милләттәштәребеҙҙең ата-бабалары рухына хилафлыҡ ҡылғанбыҙ икән. Ошо аяныслы хәлгә сик ҡуйыу бик ваҡытлылыр, тип уйлайым.**

Мин тыуған ауылым тураһында бер ни тиклем мәғлүмәтте Башҡортостандың Үҙәк дәүләт тарихи архивынан күсереп алынған тарихи сығанаҡтарҙан таптым. 1859 йылдың 27 майында төҙөлгән "Ревизская сказка"ла һәм Рәсәй империяһының баш ҡалаһы Санкт-Петербургта нәшер ителгән "Список населенных мест" китабының Ырымбур губернаһына ҡараған XXVIII пунктында теркәлгән ышаныслы мәғлүмәттәрҙе файҙаланып, хәҙерге Ейәнсура районында урынлашҡан тыуған ауылым Икенсе Назарҙа аҫаба башҡорттар нигеҙ һалғанлығын раҫлай алам.

Икенсе Назар хәҙер Яңы Себенле тип йөрөтөлә. Ревизия материалдарында ул Ырымбур губернаһының 2-се Башҡорт кантонының 11-се йортона ингән башҡорт ауылдарының береһе булараҡ теркәлгән. Санкт-Петербургта нәшер ителгән китаптағы мәғлүмәттәр ҙә был ауылда башҡорттар йәшәүен раҫлай. Бында Икенсе Назар ауылының Яманболаҡ йылғаһы буйында урынлашыуы, өйәҙ ҡалаһынан 160 саҡырымда, квартал становойынан 15 саҡырым алыҫлыҡта ятыуы, өйҙәр һаны 50 булып, унда 252 ир-ат, 222 ҡатын-ҡыҙ (барыһы ла башҡорттар) йәшәүе, ошо ауылдың олоҫ үҙәге икәнлеге һәм ҙур мәсет булыуы бәйән ителә.

Тарихи документтарға ярашлы, хәҙерге Яңы Себенле ауылының тәүге исеме Икенсе Назар булып, ошонда йәшәүсе халыҡтың башҡорт аҫабалары вариҫтары икәнлеге һис шик тыуҙырмай. Әммә бик күп йылдар дауамында ошо ауыл мәктәбендә балаларҙы "Баш ҡалабыҙ - Ҡаҙан, тыуған еребеҙ - Татарстан, милләтебеҙ - татар", тип, Татарстан дәреслектәренән уҡытыу һөҙөмтәһендә минең ҡәрҙәштәрем араһында ла үҙ милли асылынан ситләшкәндәр булды.

Ауылыбыҙға 1775 йылдар тирәһендә нигеҙ һалына. Тәүҙә бында Беренсе Назар ауылы башҡорттарының бер өлөшө күсеп килә. 1790 йылдарҙа Тимашев ҡыҫымынан ҡасып килгән Бәләкәй Абыҙ (хәҙерге Ерекле) башҡорттары ла Икенсе Назарҙа төйәк таба. 1815 йылға тиклем ҡышлаҡ булып һаналып, ҙурайыуы һөҙөмтәһендә айырым ауыл статусын ала. Элек-электән билдәле булыуынса, ҡайҙа ерҙәр иркенерәк, ҡайны төбәк байыраҡ, тормош көтөүе еңелерәк, сит яҡтарҙан шунда килеүсе халыҡ та күберәк була. Икенсе Назар ҙа шундай ауылдарҙан һанала.

1842 йылда Ырымбурҙан алыҫ булмаған Себенле ауылынан Икенсе Назарға тағы ла 6 ғаилә күсеп килә. Ә улар Себенлегә Минзәлә өйәҙенең Таһир һәм Туйғужа ауылдарынан Ырымбур губернаторы рөхсәте менән күсеп килгән Салағош бейҙәре аймағы башҡорттары була. Әлбиттә, улар көнбайыш башҡорттары диалектына хас булған һөйләштә аралаша. Улар үҙҙәренең башҡортлоғон раҫлаусы документтары нигеҙендә икенсе ергә күсеү хоҡуғына эйә була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңынан әҙәби телебеҙгә нигеҙ итеп алынған диалектта һөйләшеүселәр ситтән күсеп килгәндәрҙең башҡортлоғона шик белдерә. Революциянан һуң башҡорт әҙәби теле формалашҡас, көнбайыш диалекты бөтөнләйгә игтибарҙан ситтә ҡала. Шулай итеп, Икенсе Назар (һуңынан Яманболаҡ тип тә атала) ауылы халҡы ла Ҡаҙан дәреслектәре буйынса уҡырға дусар ителә. Өҫтәүенә, күрше башҡорт ауылдарынан уҡырға килеүсе балалар ҙа татарса уҡырға мәжбүр була. Башҡортостан гимны авторы Фәрит Иҙрисовтың Икенсе Назарға күсеп килгән ауылдаштарының балалары ла Ҡаҙан дәреслектәренән белем алды. Күпмелер ваҡыт үтеүгә, улар ҙа башҡортлоғон онотоп, ата-бабалары рухына хыянат итмәҫ, тимәгеҙ. Минеңсә, билдәле сәбәптәр арҡаһында сит-ят ерҙәргә күн итеп, ватандаштары менән ниндәй телдә аралашыуына ҡарамаҫтан, милләттәштәребеҙ үҙҙәренең башҡорт сығышлы икәнен онотмаҫҡа, ата-бабалары рухын рәнйетмәҫкә бурыслы.

Беҙ, башҡорт әҙәби теленә яҡын диалектта һөйләшеүселәр, башҡа милләттәштәребеҙҙең телен нисек бар, шулай ҡабул итеп, уларҙың үҙ асылына ҡайтыуына булышлыҡ итәйек. Башҡорт теленең көнбайыш диалектында аралашыусы ҡан-ҡәрҙәштәребеҙгә шик менән ҡарамайыҡ. Әйҙә, радио-телевидениенан үҙ һөйләштәрендә иркенле сығыш яһап: "Мин әҙәби башҡорт телендә һөйләшмәһәм дә, аҫаба башҡорт затынан буламын", - тип ғорурланып, ҡыйыу әйтә алһын туғандарыбыҙ. Тарихи башҡорт ырыуҙары вариҫтарының үҙ милли асылына ҡайтыуы үҙе үк хуплауға лайыҡ күренеш икәнен онотмайыҡ.

**Рәуф БИКТАШЕВ.**

**✓ *Оло быуын - беҙҙең хәтеребеҙ, ә хәтерен юғалтҡандар - маңҡорт. Зомби. Өлкәндәр - беҙҙең тормош терәүе. Улар менән аралашыу күңел йоҡламаһын өсөн дә кәрәк.***



**Ижад сығанағының төбө юҡ. Тик уның ҡасан урғылып-бәреп сығырын, йәки ҡасанға тиклем быуылып торорон әйтеүе ҡыйын. Тау-таш араһынан сылтырап аҡҡан шишмә үҙенең тәбиғилеге менән арбай. Ижади процесс миңә шуның һымағыраҡ тойола. Тейешле һүҙ, образ үҙенән-үҙе килеп тыуа, һин фәҡәт күңелеңде тыңларға, уға ҡолаҡ һалырға тейешһең. Һүҙ сәнғәте менән эш иткәндәр яҡшы белә: уйламай ғына әйтелгән һүҙҙең, фекерҙең дә ҡай саҡ кеше яҙмышы менән уйнап алыуы, йә иһә уны тәхеткә мендереүе ихтимал. Әҙип, ғәҙәттә, тормош, кешелек тураһындағы уйланыуҙарын персонаждары аша әйттерә ала. Шул рәүешле китап геойҙарын терелтә, уҡыусыларын улар өсөн янырға-көйөргә мәжбүр итә. Ләкин ҡай саҡ геройҙарыңа тапшырып булмаған фекерҙәр ҙә була. Минең бөгөнгө яҙмам үҙем тураһында. Күңелем төбөнәрәк төшөргә булдым. Уйланыуҙарым ҡайһы берәүҙәргә, бәлки, ижадымды тәрәнерәк аңларға ярҙам итер, бәлки, йәш быуындың тормош тураһындағы һорауҙарына өлөшләтә яуап бирер.**

# МИНДӘ БОРОНҒОЛОҠ

## йәғни Минең тормошом ата-бабам



***Әҙәбиәттә алдашмаҫҡа кәрәк, тигәйнем. Ниндәйҙер ваҡытлы ғәрәсәттәр, сәйәсәттәр үтеп китә тора, ә әҙәм балаһының күңеле һәр дәүерҙә лә матурлыҡҡа ынтыла, идеалдар эҙләй, борсоған һорауҙарына яуап табырға тырыша. Бына шуға ла әҙәбиәттең төп талаптарының береһе - ул тормоштан юғарыраҡ торорға тейеш. Халыҡ ижадында был уҡыусыға юғарылыҡ илтеүсе геройҙар, иң элек, алпамышалар, батырҙар, һомайҙар, һыуһылыуҙар булып көүҙәләнә. Эстетик-этик ҡанундарға яуап биргән, халыҡтың рухын, асылын асып күрһәткән героик әҫәрҙәр - инеш башы.***

### Ағиҙелебеҙҙе ҡыҫырыҡлайбыҙ

Йылға-күлдәрҙең ҡорой барыуы, борон "ат йөҙҙөргән" йылғаларҙың хәҙер тубыҡҡа ла етмәүе тураһында борсоулы хәбәрҙәр күптән ишетелә килә. Эсәр һыу алтын бәрәбәренә ҡала бара. Дөрөҫ, беҙҙә әле ҡытлыҡ тойолмай. Шулай ҙа күңелде хәүеф биләмәй ҙә ҡалмай. Мул һыулы йылғаларға яҡынайтып йорт күтәртеү күренеше беҙҙең халыҡта элек булмаған. Һәр саҡ ара һаҡланған. Был яҙғы ташҡын менән генә бәйләнмәгән. Ә, бөтәһенән элек, ер-һыуға ихтирамлы мөнәсәбәттең сағылышы. Ләкин һуңғы йылдарҙа Ағиҙел йылғаһын да ҙур-ҙур йорттар уратып алды. Йылға үҙен баҫып килеүселәрҙән, әлбиттә, ҡасасаҡ. Һәр нәмәнең дә йәне бар. Бушлыҡ ҡалдырабыҙ түгелме килер быуынға? "Хәҙер йәштәр шулай, йәштәр тегеләй" тигәнерәк һүҙҙәр ишеткән саҡта, быны башланғысы, нигеҙе ҡайҙа һуң, тип һорағы килә. Ысынлап та, уарҙың "шулай, тегеләй" булыуы өлкәндәрҙең ҡылған ҡылыҡтарына ҡайтауаз ғына түгелме? Тәбиғәткә йыртҡыстарса мөнәсәбәт үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килмәй. Быға илтеүсе сәбәптәр төптәрәк ята, кемдәрҙеңдер киләсәккә янаған эшмәкәрлеге шундай һөҙөмтә бирә. Йырын да бәләкәс кенә бер ектән киңәйә, ҙурая башлай. Киләһе быуын үҙенең мөнәсәбәтендә өлкәндәрҙән уҙҙырып ебәрә башлаһа, быға кемде ғәйепләргә ҡала? Кем уларға үрнәк күрһәткән? Әлбиттә, эҫе яҡтарҙа "вид на море", "вид на океан" тип виллалар һалалар. Беҙҙекеләр ошо күренеште шәп нәмә икән, тип, һуҡырҙарса ҡабатлай икән, тимәк, үҙҙәре ултырған ботаҡты ҡырҡалар. Беренсенән, океандың да, диңгеҙҙең дә иге-сиге юҡ, уларҙың шишмә-йылға һымаҡ ҡороуҙарын күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Икенсенән, улар бөтөнләй ҙә эсергә яраҡлы һыу түгел. Шулай булғас, ата-бабалар аҡылын тотмаған быуындар кемдәр һуң улар?

### Әҙәбиәттә алдашырға ярамай

Октябрь революцияһының социаль тигеҙлек, ғәҙеллек кеүек принциптары, ер йөҙөндә ожмах тыуҙырмаһа ла, йәмғиәт өсөн бына тигән емештәрен бирҙе. Шул уҡ ваҡытта был теорияның идеологтары ни өсөн халыҡтың бөтә үткәнен кире ҡағыу, ыңғай күренештәрҙе тулыһынса инҡар итеү көрәшенә күсте икән һуңынан? Мин бәләкәй саҡта татар телендә "Ҡорьән серләре" тигән бер китап донъя күргәйне. Тотошлайы менән динде һәм бәйғәмбәрҙәрҙе фашлауға ҡоролған бер баҫма булараҡ, моғайын, үҙенең ролен үтәмәй ҡалмағандыр. Ләкин рухиәткә һәм иманға ҡаршы көрәшкә сығыусылар үҙҙәренә генә зыян яһағандыр, тием. Әле иҫкә төшһә, үҙем күреп белмәгән ул "ижадсыларҙы" нисектер йәлләү тойғоһо хасил була. Быуындарҙың быуаттар һынауын үткән үҙ-ара бәйләнешен үҙгәртеп кенә тормош яһап булмауын аңлағандарҙыр бит? Ләкин ҡушҡанды үтә, арттырып үтә, ә ҡалғанында һинең эшең юҡ, тигән эске бойороҡ булдымы ижадсыларҙа ла?

Йәштәрҙең ҡарттарҙан мәсетте тартып алып, клуб яһарға тырышыуҙары тураһындағы бер әҫәр ҙә күңелдә шундай уҡ ауыр уйҙар ҡалдырғайны. Мәсетте баҫып алыуҙарынан бигерәк, оло быуынға мөнәсәбәттәре менән протест тыуҙырҙы. Дин әһелдәрен, ғөмүмән, дини инаныуы булған ҡарттарҙы йәлләүҙән тыш, хәтерҙә бер нәмә лә ҡалмаған да инде. Бына шул саҡтарҙа әҙәбиәттә алдашмаҫҡа кәрәк, тигән фекер нығынғайны күңелдә. Дин, рухиәт мәсьәләләре һәр дәүер өсөн дә мөһим булып ҡала. Рәсәйҙә хәҙер телеканалдар бик күп. Улар йылдың йылы ишәйә генә. Шуға иғтибар итмәү мөмкин түгел: уларҙың һәр береһендә тиерлек православие, насрани дине тураһында тапшырыуҙар арта бара. Руханиҙарҙың сығыштары йыш бирелә. Ул Рәсәй халҡын һиҙҙермәй генә, тотошлайы менән, йәғни бөтөн социаль ҡатламды ялмап аласаҡ пропаганда булып күҙаллана.

### Ололар һабағын бер ни алыштыра алмай

Миңә ике ҡартатайымды ла күрергә насип булманы. Атайымдың атаһы Далха Әхтәм улы - шәхес культы ҡорбаны. Әсәйемдең атаһы Мырҙахан Ҡазыхан улы Бөйөк Ватан һуғышынан әйләнеп ҡайта алмаған. Әйткәндәй, уның атаһын - Ишембай районы Аҙнай ауылының абруйлы ир-уҙаманы Ҡазыхан Халиковты Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә хөрмәт менән телгә ала. Быуындар бәйләнеше аша тормошто тәрән һәм киң аңларға була. Мин әле лә бала саҡта ҡартатайымдарҙы күргән булһам, улар бик күп нәмә тураһында һөйләгән булыр ине, мин уларҙан нимәләр тураһында һорашҡан булыр инем икән, тип уйлайым. Әлбиттә, рухи донъям күпкә байыраҡ булыр ине. Ҡартатай тәрбиәһен, ололар биргән һабаҡты бер ниндәй юғары уҡыу йорто ла алмаштыра алмай. Шуныһы, өләсәйемде бик хәтерләмәһәм дә, ҡәрсәйем беҙҙең менән бергә булды. Уның боронғоса кейенеүе, һөйләше бүтәнсәрәк ине. Үткәндәр тураһында һөйләгәнен гел ҡыҙыҡһынып тыңлай торғайным. Оло быуын - беҙҙең хәтеребеҙ, ә хәтерен юғалтҡандар - маңҡорт. Зомби. Өлкәндәр - беҙҙең тормош терәүе. Улар менән аралашыу күңел йоҡламаһын өсөн дә кәрәк. Мин үҙемдә боронғолоҡ йәшәгәнен тоям, улай ғына ла түгел, ҡай саҡ мин үҙемде бик боронғо итеп тоям. Мин үҙемдең тормошом ата-бабам тарихынан айырылғыһыҙ икәнен аңлайым һәм шулай уҡ үҙемде киләсәктең бер өлөшө итеп тоям. Фанилыҡтағы Ваҡыт - сағыштырмаса төшөнсә. Ул һәр осраҡ өсөн дә уникаль була алмай.

### Шәжәрәм

Алдымда - атайым төҙөп биргән шәжәрә. 1707 йылда донъяға килгән Күскилде ҡартатайымдан башлана был шәжәрә. Атайым шулай тип яҙып та ҡуйған: "Алтынсы быуынға хәтлем булған мәғлүмәтте госархивтан алдым, боронғо булған перепись материалынан". Күскилде-Арыҫланғол-Мөхәмәт-Аҡбулат... Аҡбулат ҡартатайым 1793 йылда тыуған. Бына ҡайҙан килә беҙҙең фамилия. Артабан: Аплатиф-Әхтәм-Далха-Фәтих, уның улдары һәм ейәндәре. Шәжәрәләргә, ғәҙәттә, ҡыҙ балаларҙы яҙмайҙар. Мин атайымдың фамилияһына тап төшөрмәнем шикелле, моғайын, был исемлеккә мине лә теркәп ҡуйыр. Быныһы инде шаяртыу ҡатыш әйтелде.

Үрнәк - минең тыуған ауылым. Миңә унда бер синыф та уҡырға яҙманы. Унда үткән алты йыллыҡ хәтер тотош бер дәүер һымаҡ. Бала саҡта донъяны, кешеләрҙе ҡабул итеү ниндәйҙер камилдә идеал донъя рәүешендәрәк. Үрнәк - минең өсөн шундай донъя, хатта ғаләм булды. Ауылдың һәр кешеһен беләһең, уларҙың береһенән дә һиңә яуызлыҡ, насарлыҡ ҡағылмай. Күршебеҙҙә генә Рамаҙан олатайым ғаиләһе менән йәшәне. Ул минең атайым менән ике туған, йәғни Әбүзәр менән Далханың улдары - ә бит бер туған һымаҡ инеләр. Рамаҙан олатайымдың асыҡ, киң күңеллелегенә мин әле лә һоҡланам. Бала менән бала була белде, улар өсөн һәр саҡ ваҡыт тапты. Беҙҙе бик яратып, ҡустым Фәтҡулланы "Әкүләс," мине "Бүҙәнәй" тип кенә йөрөтә торғайны. Ул иҫән сағында Үрнәккә һәр саҡ ҡанатланып барҙым. Олатайым был донъянан киткәс, ауылымдың яҡтылығы ла бүҫкәрҙе.

Иләс (Турат) һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә беренсе синыфҡа уҡырға барҙым. Яңы ғына педучилище тамамлап килгән йәш уҡытыусы Рәмзиә Әхмәт ҡыҙының тәүге уҡыусылары инек беҙ. Рәмзиә апай бөтә белемен-оҫталығын ҡулланып, беҙҙең менән арымай-талмай эшләгән мөғәллимәбеҙ ине. Беҙ уны бик яраттыҡ. Унан күп нәмәгә өйрәндек. Ихласлығын, яғымлылығын тағы ла кемдеке менәндер сағыштырып булмай. Кескәйҙәргә ышаныс белдерә, бурыстар ҡуя белә ине. Минең хатта дәрес биреп ҡарау тәжрибәм дә булды. Ике йыл ғына уҡытһа ла мин уны ғүмерлек уҡытыусым тип һанайым. Мәктәп йылдары, артабан урта махсус һәм юғары уҡыу йортонда уҡыу... Ҡыҫҡаһы, күп уҡытыусыларҙан белем алынды. Шулай ҙа Рәмзиә апайҙың рейтингы һәр саҡ юғары булып ҡалды. Турат ауылы халҡы үҙе лә киң, саф күңелле булып хәтерҙә һаҡлана. Ғәлиәхмәт ауылына күсенгәндә беҙҙең ғаиләне оҙатырға бөтөн ауыл халҡы килде. Ата-әсәйемде шулай хөрмәт иткәндәре өсөн мин уларҙы икеләтә хөрмәт итәм. Атайым да Иләс мәктәбен йәшелләндереү өсөн күп көс һалды. Аҙаҡҡы барғанымда мин шул мәктәп баҡсаһындағы ҙур ағастарға һоҡланып, оҙаҡ итеп ҡарап торҙом. Атайым менән әсәйемдең уҡыусылары тиҫтә йылдар буйы хаттар яҙҙы, открыткалар ебәреп торҙо. Улар шул тиклем күп ине, хатта беҙҙең комод тартмаларына һыймай башланы.

### Мөнәсәбәттәр өҙөлмәһен

Өсөнсөмө, дүртенсеме синыфта уҡыған саҡта өҫтәл ар-

тында дәрес әҙерләп ултырам, үҙем шунда янымә ҡуйған ризыҡтан да ауыҙ итәм. Ҡәрсәйем килеп инде залға: "Һабағынды ҡарайһыңмы? Элек бер малай шулай һабағын әҙерләгәндә икмәк ашап ултырған. Шунан яңылыш дәфтәренә "икмәк, икмәк" тип яҙған да бөткән", - тине. Бына шулай үҙенсәлекле һабаҡ та бирелде миңә. Ейәнейәнсәр һәм ҡәртәсәй-картатай мөнәсәбәте өҙөлмәскә тейеш. Кешенең стресҡа тиҙ бирешеүе, төрлө нервы ауырыуҙары артыуы тураһында ла яҙалар. Төптә буш һүҙ түгелдер. Ләкин бындай сирҙәрҙең дә башланғысы бала саҡта һалына. Сөнки тәбиғи аралашыу өҙөлә. Кескәйҙәрҙең донъяһы балалар баҡсаһы менән генә сикләнергә тейеш түгел. Әллә күпме өҫтөнлөктәре булған хәлдә лә, бер ниндәй баҡса ла ололар биргән күңел дауаһын

Замандар үҙгәрҙе. Былтыр хажда йөрөп ҡайтыу бәхете насип булды. Миңә: "Нисек дин юлына килдең, ни өсөн хажға барҙың?" - тигәнерәк һорау биргәндәре бар. Был юл оҙаҡ булды. Мин әлеге яҙмамда уның ҡайһы бер сәбәптәрен генә һөйләнем.

### Йән доғаһы тураһында

Әҙәбиәттә алдашмаҫҡа кәрәк, тигәйнем. Ниндәйҙер ваҡытлы гәрәсәттәр, сәйәсәттәр үтеп китә тора, ә әҙәм балаһының күңеле һәр дәүерҙә лә матурлыҡҡа ынтыла, идеалдар эҙләй, борсоған һорауҙарына яуап табырға тырыша. Бына шуға ла әҙәбиәттең төп талаптарының береһе - ул тормоштан юғарыраҡ торорға тейеш. Халыҡ ижадында был ukыусыға юғарылыҡ илтеүсе геройҙар, иң элек, алпамышалар, батырҙар, һомайҙар, һыуһылыуҙар булып кәүҙәләнә. Эсте-

раҡта күрә. Уның уҡыусыһы күпме, әҫәрҙәрен нисек ҡабул итәләр - быны ап-асыҡ, тептеүәл итеп әйтеүе ҡыйын. Шулай ҙа китапханала үҙенең тупып бөткән китаптарын күреүҙән дә ҙур бәхет юҡтыр ижадсы өсөн.

### Бәхет, тигәндән...

Шуға иғтибар иткәнем бар, ораштыу-кисәләрҙә мәҙәниәт, әҙәбиәт әһелдәренә иң йыш бирелгән һорауҙарҙың береһе: "Һеҙ бәхетлеме?" Был, минеңсә, бөтән һүҙ булмағанда бирелә торған реплика. Бындай дежур һорауҙы ишеткәс: "Бәхет, тигәндә, нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ, уны үҙегеҙ нисек аңлайһығыҙ?"- тип ҡыҙыҡһыныу урынлы булыр ине. Бер генә ижадсы ла уҡыусыһы алдында үҙен бәхетһеҙ тип танымаҫ, моғайын. Ижад - ул йәшәү, илһам, осош, үҙеңдең хыялыңды, уй-ниәтеңде ғәмәлгә ашырыу. Уҡыусыларын рухландырыусы, ғәмһеҙлектән уятыусы, алға ҡарап йәшәргә ярҙам итеүсе, күңел шәме менән бөтәндәрҙең юлын яҡтыртыусы күпме ҡәләм оҫталары булған һәм барҙар. Хатта маһирҙың фажиғәһендә лә тормошто раҫлаусы көс ята.

Ижадҡа килеү юлы төрлөсә. Берәүҙәр мәктәп йылдарында уҡ иғтибар итерлек шиғырҙар яҙа башлай, икенселәре эшләү дәүерендә үҙ ҡәләмен һынай, нығыта бара. Студент йылдарында яҙған "Атай икмәге" хикәйәһе минең яҙмышымда хәл иткес роль уйнаны. Уны нисек яҙғаныма ятаҡтағы бүлмәләш ҡыҙҙарым шаһит. Хикәйә күңелдә тулышҡандыр, бер кистә үҙенән-үҙе яҙылды ла ҡуйҙы. Ә бына машинкала баҫтырып алыуы мәшәҡәтлерәк булды. Сөнки ул йылдарҙа машинка табыуы бик ауыр ине. Бында ла иптәш ҡыҙҙарым ярҙам итте, баҫып бирҙеләр.

Ҡайһы бер әҫәр тиҙ яҙылһа, икенселәре өсөн ваҡыт талап итеүе. "Тыумаған улым" тип аталған повесть (уны оҙаҡламай "Киске Өфө"гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәсәкмен) бына шулай оҙаҡ ҡына яҙылған әҫәрҙәрҙең береһе. "Уның исеме - Мөхәббәт" йыйынтығына инергә тейеш ине, барыбер мин уйлағанса килеп сыҡманы. Бына шулай, һәр әҫәрҙең үҙ ижад ителеү мөҙҙәте була. Артыҡ ҡабаланып яҙғандың берәй ере тоҡос, зәғиф килеп сығыуы ихтимал. Ижад теләктән һәм тырышлыҡтан ғына ла тормай. Шуға күрә "Мин яҙҙым" тигәнгә ҡарағанда, "Яҙылды" тип әйтеүҙе ҡулай күрәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙемде эсәр һыуҙан башлағайным. Фекер ебемде лә уның менән төйнәргә итәм. Үрнәк ауылында бик матур гөрләүек бар. Беҙ, кескәйҙәр, шунда барып, онотолоп уйнай торғайныҡ. Был гөрләүек беҙҙең өсөн әкиәти, мөғжизәле донъя булды. Әкиәт геройҙары шунда йәшәй кеүек тойола ине миңә. Юл төшкәндә әле лә шул гөрләүекте күрергә тырышам. Ул элеккесә: шундай саф, шундай моңло, шундай ихлас, ябай һәм бөйөк. Хыял да, әкиәт тә уны ташлап китмәгән. Ана шул минең күңелемә сикһеҙ ҡыуаныс өҫтәй.**

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

# Йәшәй, тарихынан айырылғыһыҙ

биреп еткерә алмай. Дөрөҫ, замана өләсәйҙәре араһында, кескәйҙәргә мөхәббәтте тәмле ризыҡ, уның һәр талабын һүҙһеҙ үтәү, тип кенә аңлаусылар ҙа бар. Был рәүешле бала күңеленә юл ярыуы, иман юлына төшерөү өсөн һабаҡ биреүе ауыр. Балаға, минеңсә, аралашыу етмәй. Көнөнә мең һорау биргән балаға яуап эҙләшеүселәр күберәк булһа, бынан берәүгә лә зыян юҡтыр, моғайын.

### Хажда йөрөп ҡайттым...

Мәскәү ҡалаһына уҡырға барғас, мине иң аптыратҡаны нимә булды? Магазиндарҙағы муллыҡ хайран итһә лә, уға күҙ тиҙ өйрәнде. Һәр урамда тиерлек урынлашҡан таш сиркәүҙәр ғәжәп ине. Беҙ мәсетте күрмәй үҫкән быуын өсөн был күренеш аяҙ көндө йәшен атҡандай тәьҫир итте. Баҡтиһәң, Башҡортостандағы тормоштан айырмалы тормош та бар икән. Һәм ул СССР-ҙың йөрәгендә - баш ҡалала. Сиркәүҙәр һәр саҡ асыҡ, унда кешеләр йөрөй. Иңәләрсығалар, ҡурҡмайҙар. Беҙгә, совет балаларына, иң тәүҙә сиркәүҙе инеп ҡарарға тура килде. Шунан Өфөгә ҡайтҡас - Туҡай мәсетенә. Дингә, иманға ҡағылышлы психологиям әкренләп үҙгәрҙе. Бының өсөн насрани динендәге дуҫтарыма рәхмәтлемен. Уларҙың үҙ диндәренә булған хөрмәте мине лә уйланырға мәжбүр итте. Латыш ҡыҙы Гунтаны Башҡортостанға ҡунаҡҡа алып ҡайтҡас, ул иң башта мәсетте күргеһе килгәнен әйтте. Туҡай мәсетен ҡарағас, шул хәтлем ҡыуанды, шундай һоҡланыу һүҙҙәрен әйтте! Минең быны һис онотаһым юҡ. Нисек ауыҙ асылып китмәһен? Мин беренсе тапҡыр мәсет тураһында маҡтау һүҙе ишеттем, һәм уны мосолман түгел, ә бөтән диндәге кеше әйтте! Инде был ваҡиғаларға ла күп ваҡыт үтте.

тик-этик ҡанундарға яуап биргән, халыҡтың рухын, асылын асып күрһәткән героик әҫәрҙәр - инеш башы. "Урал батыр"ҙың йәш ғалимдар тарафынан сит телдәргә тәржемә ителеүе уның менән донъя кимәлендә ҡыҙыҡһыныу арта ғына барыуын күрһәтте. Тикшеренеүҙәр ҙә бер-береһен ҡабатламай, ә әҫәрҙе аңлауҙы тәрәнәйтә генә бара. Бына ниндәй ул ысын әҙәбиәт! Ваҡыт һынауын үткән ҡиммәтле ҡомартҡыларҙы төп нөсхәһендә уҡып нығыраҡ аңлар өсөн генә лә телде өйрәнеүселәр бар бит. Н. Рерихтың яҙмаларын уҡығанда, бер фекере күңелгә ятты: "Ижад - ул йәндең саф доғаһы". Оҙон ғүмерле ижади әҫәрҙәрҙең бер сере шундалыр. Әҙәби һүҙҙең ҡөҙрәте иҫ киткес. Ул яҙмышҡа йоғонто яһай ала.

### Һүҙ ҡөҙрәте

Дүртенсеме-бишенсеме синыфта уҡыған саҡта тупып бөткән, тәүге һәм аҙаҡҡы биттәре төшкән бер китап ҡулыма килеп эләкте. Ул Сыңғыҙ Айтматовтың повестары ине. Шунан алып минең өсөн быңаса уҡымаған, белмәгән бөтөнләй икенсе төрлө әҙәбиәт донъяһы асылды. Кешеләрҙең тетрәндергес үҙ-ара мөнәсәбәте, психологизм, яһалма ситуацияларҙан, схемаларҙан азат тормош, һине ышандыра алған йәшәү рәүеше. Китаптың эсенә инеп китәһең дә, ҡәҙемге әҫәр икәнен дә онотоп, персонаждар менән ҡуша ундағы ваҡиғалар эсендә ҡайнайһың... Был гениаль яҙыусыға ҡарата бала саҡтағы шул мөнәсәбәтем үҙгәрмәне.

Уҡыусы үҙенә тәҡдим ителгән һәр әҫәрҙе уҡып бармай. Ул күңел талабына ярашлыһын һайлай. Һәм был уның мөкәддәс бурысы. Яҙыусылар, сәхнә оҫталарынан айырмалы рәүештә, тамашасы менән эш итмәй. Ул публика менән туранан-тура аралашмай, уны бик һирәк ос-

*МАТУР ХӘТИРӘ*

**Үҙеңдең эргәңдәгеләрҙе әүлиә итеп бел, тигән һүҙҙәр яныңдағыларҙың оло-кесеһенә тәрән ихтирам менән ҡарарға, яманынан оло ғибрәт, яҡшыһынан өлгө алырға саҡыра. Шундай риүәйәт тә бар. Әҙәм ғәләйһиссәләм ҡайһы берәүҙәр зәғиф, һуҡыр, аяҡһыҙ, ә ҡайһылары сәләмәт икәнлеген күргәс, Хоҙайҙан: "Ниңә кешеләрҙе тиң яралтманың?" - тип һорай. Ул был һорауына: "Сәләмәт кешеләр ауырыуҙарға ҡарап шөкөр итһен, яҡшылыҡты арттырһын өсөн", - тигән яуап ала.**

# АБРУЙЛЫ АПАЙҘАР ӨЛГӨ БУЛДЫ,

## ҡайһы берҙәре... сәм уятты

Бәләкәй саҡта минең тыуған ауылым Истамғолда исемдәре маҡтап телгә алырлыҡ, күҙгә элерлек апайҙар беҙҙең кеүек ыбыр-сыбырға ҙур абруй булып тора ине. Фәрхинур Мөхәмәтйән ҡыҙы, Алмагөл Шәмсетдин ҡыҙы педагогия училищеһында уҡыны. Мәүә Ғамир ҡыҙы Ваһапова ла шундай өлгөлө апайҙарҙың береһе булды. Үҙе гел "5" билдәләренә генә уҡый. Ул хатта Науруҙ лагерында ял итеү бәхетенә ирешкән. Ял итеп ҡайтҡас, ундағы бушлай күрһәтелгән фильмдар, мауыҡтырғыс уйындар тураһында ҡайта-ҡайта һөйләп, баштүбән тәкмәс атып, әллә ниндәй беҙ күрмәгән күнекмәләр яһап күрһәтеп, беҙҙе ауыҙына ҡаратып ултыртып ҡуя торғайны. Уның ниндәй тәмлекәстәр менән һыйланғанын һөйләүе беҙҙең ауыҙ һыуын ҡорота. Ысын лагерь тормошон беҙ студент булғас ҡына күрҙек һәм ундағы күренеш, әлбиттә, бала саҡта төҫмөрләгәндән байтаҡҡа ҡалыша ине. Шулай ҙа бала саҡта, бары менән байрам тигәндәй, ҡәнәғәт ҡалғанбыҙ, уның һөйләгәндәренән әкиәт тормошон күҙ алдына килтергәнбеҙ.

Мәрфуғә Мәүә апайҙың бер туған һеңлеһе, беҙ уның менән йән дуҫтарбыҙ. Уларҙың өйөндә әҙәби китаптарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Ҡайһы арала уҡып сығып өлгөрәләр Мәүә апай, бешеренеп торған арала ла беҙгә әҫәрҙең йөкмәткеһенән өҙөктәр килтерә торғайны. Уның тасуири итеп, артистар кеүек киноһеп һөйләүен иҫебеҙ китеп тыңлайбыҙ. Ә иң ҡыҙыҡ ерендә ул кинәт туҡтап ҡала. Аңлап торабыҙ, артабан апай һөйләмәйәсәк. Йәнәһе, үҙегеҙ уҡығыҙ.

Анау тиклем рекламанан һуң, китап ене ҡағылмайынса ҡаламы һуң инде! Мәктәптәге, күрше Ишкен ауылы китапханаһындағы китаптар бер нисә ҡат уҡып сығылған, улар уҡыуға булған ихтыяжды ҡандырмай. Уҡытыусыбыҙ Рәхим Иҫтамғолов биргән "Ағиҙел" журналы йыйынтығын да үҙ-ара талашып йөрөп уҡыйбыҙ. Үҙебеҙҙең ауылдағы кибет кәштәләрен дә күҙ уңынан ысҡындырыш юҡ. Ара-тирә йомош-фәлән тапҡан булып ингәндә уларға ла байҡау яһап өлгөрәбеҙ. Шулай бер мәл кибет кәштәһендә Баязит Бикбайҙың китабы пәйҙә булды. Шуны ҡулға тотоп, ҡарап булһа ла сығырға тип индек тә, китапта яҙылғандарға мәкиббән киткәнбеҙ һәм онотолғанбыҙ ҙа ҡуйғанбыҙ...

-Һатып алып уҡығыҙ хәлегеҙҙән килһә, өйөрлө ярлыябаға! - шулай тип, һатыусы апай ҡулыбыҙҙан һыпыра тартып алды ҡыҙыл тышлы китапты. Шундай ҡыҙыҡ китаптан айырылыу үкенесе йөрәкте өтөп алды. Ә башта кинәт сәмле уй яралды: ҡайһылай итеп булһа ла ҡулға төшерәсәкбеҙ беҙ был китапты! Йәшереп, йомортҡалар йыйырға тотондоҡ. Ләкин өйҙәгеләр йәшерелгән йомортҡаларҙы табып ҡыуанышты. Ахыры, һыу буйында яңы төйәк табырға тура килде. Кесерткән араһын көн һайын тикшерергә ялҡауың ғына килмәнен. Шулай бер барғанда йәшерелгән йомортҡаларҙың ситкә тәгәрәшеп таралғанын күргәс, кәйеф боҙолдо. Тағы 35 тинде ҡайҙан ғына алырға икән? Һеҙҙән хәрәкәт, минән бәрәкәт, тигәндәй, Кендекәй ҡушаматлы Хөснә әбей иҙәнен йыуып биреүҙе һораны.

Бына беҙ яңынан кибеткә барып индек. Һатыусы апай беҙгә үтәнән- үтә тишерҙәй итеп ҡарай. Йомортҡаларҙы яҡтыға ҡуя, әйләндереп-тулғандырып ҡарай, йәнәһе, баҫып ултырған тауыҡтыҡы булып ҡуймаһын. Хәләл 30 тинебеҙҙе лә әллә нисә ҡат һананы. Ниһайәт, бер үҙе генә ҡалған, уҡыусыларын көтөп зарыҡҡан "Аҡ сәскә" китабын теләр-теләмәҫ кенә алды ла беҙ торған яҡҡа ырғытты...

Нисек кенә булмаһын, бала саҡтың матур хәтирәһе булып ҡалды был хәл.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы Сураман ауылы.**



Халил Һәйөндәков

# ШҮЛГӘН БАБАЙ

(Хикәйә)

**Булмағанды бар тип яҙған өсөн Аллаһы сөбхана үә Тәғәлә алдында тәүбә итәм. Шул уҡ ваҡытта хәҙистәрҙең береһендә "Яҡшылыҡ өсөн алдаған кеше алдаҡсы булмай", тип тә яҙылған.**

**Автор.**

**(Аҙағы. Башы 6-сы һанда).**

Ҡыҙ Шәһиттең башынан тағы бер мәртәбә һыйпап алды ла:

- Бына хәҙер инде һиндә ҡуянсыҡ сиренең эҙе лә ҡалманы, - тине. - Ер өҫтө донъяһына сығыуыңа үҙеңә йәнә бер бүләк - кешеләргә үҙеңдеке кеүек һәм башҡа сирҙәрҙән ҡотолорға ярҙам итә алыу һәләте. Аллаһы Тәғәлә әмере буйынса беҙ кешеләргә шундай һәләтте күсерә алабыҙ.

- Үҙегеҙ атап таныштырмаһығыҙ, ләкин ни өсөндөр мин һеҙҙең исемегеҙ Вазифа икәнен беләм... Ғәжәп!

- Ғәжәпләнерлек бер нәмәһе лә юҡ бында. Минең исемем һиңә әлеге телепатия ярҙамында барып еткән. Эйе, менәрләгән йыл инде минең исемем - шундай. Минең генә түгел, беҙҙең барыбыҙҙың да исеме - Вазифа, тимәк, бурыс. Кешеләр бер-береһенә һәр саҡ ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләргә бурыслы, тип яратҡан беҙҙе Аллаһы Тәғәлә. Исем-есемгә тап килергә тейеш. Тап ошо исемде йөрөтөргә хаҡлы кешеләр генә үткән замандан ошоғаса һаҡланып ҡалды. Беҙ бында күп түгелбеҙ.

- Ә кеше тыуа, ҡартая, үлә...

- Ошоғаса нисек үлмәгән был Вазифалар, тип әйтмәксеһең, - тине ҡыҙ егеткә йылмайып. - Быны ла һиңә төшөндөрөү бик ауыр. Шулай ҙа аңыңдың үсеш кимәленә яраҡлы итеп аңлатырға тырышып ҡарайым. Эйе, һеҙҙең заман әҙәм балалары ерҙән яратылды һәм күпмелер ваҡыттан һуң яңынан ергә әйләнергә тейеш. Әгәр шулай булмаһа, Ер йөҙөндә әҙәм балаһынан аяҡ баҫырлыҡ урын булмаҫ ине... Һеҙҙән айырмалы рәүештә, беҙҙең заман кешеләрен Аллаһы Тәғәлә һауанан ятарты. Беҙҙең арала һеҙҙәге һымаҡ "үрсеү", "үлеү" тигән төшөнсә лә юҡ ине. Әгәр ҙә беҙҙең заман кешеләре ошоғаса хаҡ юлдан яҙмай, Вазифа исеменә тап төшөрмәй тоғро ғына йәшәһә, бәлки, Туфан һыуы ла ҡалҡмаған булыр ине, һәм беҙҙең заман кешеләре ошоғаса Ер йөҙөндә хөкөм һөргән булыр ине... Хәйер, уны бер Алла үҙе генә белә...

- Ошо Урал ерендә тыуыуыбыҙға риза булып, ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙҙе шат, күңелле итеп йәшәп, ысын Вазифалар һымаҡ саф күңелле булыу мөмкинлеген беҙгә Аллаһы Тәғәлә биргән, һәм шул мөмкинлектән файҙаланып, Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп һәм уға ғибәҙәт ҡылып йәшәргә кәрәк, тигәнде аңланым мин һинең менән һөйләшеүҙән, - тине Шәһит бер аҙҙан.

- Эйе, егет, хәҙер һин бер аҙ төшөнә лә башланың. Һеҙҙең замандың тәүге әҙәм балалары - Йәнбирҙе менән Йәнбикә Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте менән тап ошо ергә урынлаштырылды. Уларҙың бөтә киләсәк быуын бала-сағалары - һеҙ, берберегеҙгә һөйөү һәм хөрмәт итеү, татыулыҡ һәм дуҫлыҡ рухында ғүмер итергә тейешһегеҙ. Йәнбирҙе үлер алдынан үҙенең өлкән улы Уралға тап шундай васыят әйтеп ҡалдырҙы...

- Вазифа һылыу, мине һәм мине генә түгел, барлыҡ кешелек донъяһын ҡыҙыҡһындырған бер һорау: Яҡты донъяға тыуыу - беҙҙең өсөн ҙур шатлыҡ. Йәшәү - әлегәсә, йәшәүгә ҡарап. Ә бына үлеү - ни өсөндөр шомло һымаҡ...

- Һай, егет, - тине Вазифа, - быны һиңә аңлатыу тағы ла ҡатмарлыраҡ. Ябайыраҡ итеп әйткәндә, тыуыу, йәшәү, ҡартайыу һәм үлеү - һеҙҙең замандә бер матди хәлдән икенсеһенә күсеү генә. Ә кешенең йәне, - беҙҙең заман кешеләренеке һымаҡ, бер ҡасан да үлмәй. Һеҙҙең дәүерҙең бер аҡыллы ғалимы былай тип әйтте. Донъяла бер нәмә лә юҡ булмай. Бар нәмә Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте менән бер хәлдән икенсе хәлгә генә күсерелә. Шуның өсөн Ер йөҙөнә тыуған кеше, икенсе матди хәлгә күсеүҙән, йәғни, һеҙҙеңсә әйткәндә, үлеүҙән ҡурҡырға тейеш түгел, ә насар эштән ҡурҡырға тейеш. Сөнки ошо һынау осоронда, йәғни тере сағында ҡылған яман эштәренән әҙәм балаһының йәне мәңгелек ғазап кисерәсәк. Иң һуңғы һәм иң хаҡ дан - Ислам дине тап ана шулай тип өйрәтә...

Бала саҡтан Ислам дине ҡанунында тәрбиәләнеп, уның һәр талабын ҡанына һеңдереп үҫкән Шәһит Вазифаның әйткән һүҙҙәренә хайран ҡалып, уларҙы күңеле аша үткәреп барҙы.

Кинәт ул ни өсөн мәмерйә тирәһенә килгәнен иҫенә төшөрөп, тертләгәндәй итте. Күпме ваҡыт ошо мәмерйә эсендә әле ул? Колхоз рәйесе хәҙер ни уйлайҙыр? Шәһиттең үҙен дә юғалтҡандарҙыр инде. Әгәр ҙә һыйыр табылмаһа... Бөттө баш...

Егет ошо уйҙарын уйлаған арала Вазифа ҡулындағы шырпы ҡабын хәтерләткән әйберенең кескенә төймәләренә баҫҡыланы. Шәһит стеналағы "тәҙрәгә" баҡты һәм, ни күҙҙәре менән күрһен, йыуан ҡайын тирәләй үҫкән бөҙрә йәшел ҡыуаҡтар төбөндә ул юғалтҡан Ала һыйыр яңы тыуған быҙауының арҡаһын ялап тора. Ә шундай уҡ ҡыҙыл-ала быҙауы мороно менән төртә-төртә әсәһен имә...

- Өнөң, - тине Вазифа, "өнөммө-төшөммө", тип тағы уйлай башлаған егеткә. - Һыйырыңды ауыл яғындағы ҡайынлыҡта ғына, быҙауын кешеләрҙән ҡыҙғанып, үҙе лә шунда йәшеренеп йөрөй. Уның өсөн борсолма. Бынан сыҡҡас та табып алырһың.

- Мине кешеләр юғалтҡандарҙыр бит?

- Ә бына быныһын, егет, һиңә аңлатыу бөтөнләйгә мөмкин түгелдер, тип уйлайым. Шулай ҙа төшөндөрөргә тырышырмын. Ҡыҫҡаса әйткәндә, һин күлгә йығылғандан алып һеҙҙә, йәғни Ер өҫтөндә, ваҡыт үтмәне тип әйтерлек.

- Йәғни, нисек? - егет ысынлап та бер ни ҙә аңламаны.

- Йәғни, һин ошо ер аҫты донъяһына ингәндән алып һинең өсөн ваҡыт туҡталды. Әгәр һинең күлгә йығылып төшкәнеңде берәү ҡарап торған булһа, хәҙер һин яңынан шул урынға барып күренеү менән ул "Шәһит күлгә тиҙ генә сумып сыҡты", тип аңлаясаҡ.

- Бында мин байтаҡ ҡына ваҡыт булған һымаҡмын бит?..

- Ә был донъяла ваҡыт күп мендәр мәртәбә әкренерәк уҙа. Ваҡыттың нисек әкренәйеү мөмкинлеген һеҙҙең заман кешеһе - Эйнштейн исемле бик аҡыллы бер ғалим хатта төшөнә лә башлағайны бер саҡ. Үкенескә ҡаршы, ул ғалимдың асыштарын насар бәндәләр үҙ файҙаһына бороп, Ер йөҙөндә быға булмаған ғәйәт көслө шартлатҡыс уйлап сығарыу өҫтөндә эшләне. Тап ана шул һеҙҙең дәүер кешеләре күпләп яһаясаҡ шул дәһшәтле ҡоралды. Һуңынан, үҙҙәренә ҡурҡыныс янай башлағас, шул уҡ ҡоралды нисек итеп ҡабаттан юҡ итеү тураһында хыяллана башлаясаҡтар...

Ҡыҙҙың һөйләгәндәренән тарҡалған уйҙарын бергә туплай алмайынса бер талай һүҙһеҙ ултырҙы Шәһит.

- Әгәр теләһәң, ошо Урал тауҙары эсендә бер аҙ сәйәхәткә лә йөрөтөп алып килә алам.

"Әлбиттә", - тип уйларға ла өлгөрмәгән Шәһит кинәт уң яҡ стена асылып китеүенә һиҫкәнеп китте: ниндәйҙер бик сәйер аҡ йылтыр төҫкә буялған, күҙҙең яуын алып торған кескәй генә машина уларҙың яныңа килеп туҡтаны. Ауылға тәүге килгән "кәтерпил" тракторына шулай һоҡланып ҡарап торғайны бала сағында Шәһит.

- Төшөң түгел, өнөң, - тип ҡабатланы тағы ла Вазифа егеткә йылмайып һәм ҡулы менән әйҙәп, уға машинаға инеп ултырырға тәҡдим итте. Бер аҙ ғына ҡурҡҡанын беләндермәсҡә тырышып, Шәһит машинаның йомшаҡ ултырғысында урын алды. Вазифа уның янына килеп ултырыу менән был тылсымлы атһыҙ арба һис тауышһыҙ ғына урынынан ҡуҙғалды. Ергә лә теймәй барған машинаға тәүҙә ныҡ ғәжәпләнгән егет иғтибарын тирә-яғына, күккә йүнәлтте. Күк йөҙө - Ерҙәге кеүек икһеҙ-сикһеҙ түгел, ә быға тиклем таныш булмаған ниндәйҙер төҫтәге төрлө бейеклектәрҙән торған ғәйәт ҙур бинаның түбәһен хәтерләтә...

- Был - Урал тауының икһеҙ-сикһеҙ тармаҡтары, - тип аңлатты Вазифа егеткә. - Ана, күрәһеңме, алда - түбәнең бер аҙ тәпәшәйгән урынын. Ул - ике тау араһы. Киләсәккә һеҙҙең быуын кешеләре уны башҡа телдә - "Межгорье" тип атап йөрөтәсәк...

"Ни өсөн ул тау араһына иғтибарымды йүнәлтә был ҡыҙ?" тип уйлап өлгөргән Шәһит Вазифаның серле яуабын күңеленә һеңдерә барҙы:

- Киләсәктә һеҙҙең быуын кешеләре тап ошо ерҙә "уран" тип аталған минерал табасаҡ һәм аяуһыҙ рәүештә тауҙың итәктәрен йырта-ҡаҙа башлаясаҡ. Ниндәйҙер дәһшәтле "атом бомбаһы" хаҡында алдараҡ әйткәйнем бит әле. Ана шул бик ҡурҡыныс ҡоралды яһау өсөн сеймал ул - "уран" тигән минерал. Ләкин уны дөрөҫ кенә итеп ҡулланғанда, кешелекте юҡҡа сығара торған ҡорал итеп түгел, ә утын урынына яғыулыҡ итеп файҙаланырға ла мөмкин. Барыһы ла кешеләрҙең үҙҙәренән тора. Ул саҡта әлегә икһеҙ-сикһеҙ күренгән Урал урмандарын аяуһыҙ ҡырҡыуҙы сикләргә лә була...

- Ташкүмер оҙаҡҡа етмәйәсәк, - тип дауам итте Вазифа Шәһиттең ҡайҙалыр табылған ташкүмер яғыулығы тураһында уйлай башлағанын һиҙгәс тә, - уның күләме лә сикле генә. Күпләп шыйыҡ һәм газ хәлендәге яғыулыҡты ла һеҙҙең заман кешеләре Ерҙән һурып ала башлаясаҡ. Әммә шыйыҡ һәм газ хәлендәге "утын" да Ер ҡуйынында сикле...

Әбына ҡырҡылған урман урынына яңынан-яңы ағастар ултыртып, тәбиғәтте һәр саҡ бер кимәлдә тотҡан хәлдә, һеҙҙең заман кешеләренең дәүере оҙағыраҡҡа һуҙылыр. Ә шулай ҙа ҡасандыр ахырызаман барыбер киләсәк. Уны Хаҡ-Тәғәлә үҙе ҡушҡан...

Шундай бай күңелле, белемле Ер аҫты ҡыҙына Шәһит хайран ҡалды. Үҙе ултырып барған, тәүҙәрәк һушын китәргән машина тураһында ла әллә ҡасан уҡ онотто егет.

- Ә быныһы - Ирәмәл! - тине Шәһит ғәйәт бейек түбә тәңгәленә килеп еткәс тә. - Мин уны таныным! Беҙҙән алыҫ түгел ерҙә әллә ҡайҙан күренеп ята ул...

- Эйе, - тине Вазифа, - Урал тауының иң бейек түбәһе...

- Ерҙе тишкеләй торғас, кешеләр бында ла килеп етә алмаҫмы? - тине Шәһит бер аҙҙан.

- Юҡ, - тине ҡыҙ, - был ҡыуышлыҡҡа яҡыная башлағас та һеҙҙең заман кешеләренең тишкестәре йә һына, йә ирей башлаясаҡ. Ул турала беҙ алдан хәстәрләп ҡүргәнбеҙ инде...

- Башҡаса һорауҙарың булмаһа, күҙеңде йом, - тине Вазифа бер аҙҙан.

- Миңә Ер өҫтөнә сығырға ине хәҙер, - тине егет, - быҙаулы һыйырҙы ла алып ҡайтаһы бар...

- Йом күҙеңде...

* * *

-Ҡабаттан аңыма килгәндә, мин мәмерйә ҡаршыһында, шул уҡ таянып барған таяғымды тотоп тора инем, - тип дауам итте үҙенең хикәйәтен Шәһит бабай. Ғәҙәте буйынса ул берҙе һаҡалын һыйпап алды. - Хәҙер юғалған һыйырҙың ҡайҙа икәнлеген белгәс, күңелгә рәхәт, кәйеф тә күтәренке, тәндә лә ниндәйҙер еңеллек тойола. Электән таныш ҡайынлыҡҡа барып, быҙауын эйәрттереп, һыйырҙы ҡыуып алып ҡайттым.

Шул көндән алып миндә бер ҡасан да ҡуянсыҡ өйәнәге булманы. Военкоматҡа барып: "Мин хәҙер ауырымайым, мине әрмегә алығыҙ", - тип ғариза яҙып та ҡараным (үҙен ишетә беләһеңдер, ул саҡта үҙ теләге менән Гитлер илбаҫарҙарына ҡаршы барырға теләүселәр икһеҙ-сикһеҙ ине). "Юҡ, - тине военкоматтағы табип, - һин - не годен! Эпилепсия - бер ҡасан да бөтмәй торған сир!.."

Ә минең ошо хикәйәтемде етди тыңлаусы ла булманы тиерлек, тыңлағандары ла "әкиәт" тип көлдө генә. Әйткәндәй, һуғыш тамамланғас, Манһар исемле ауылда йәшәүсе, тирә-яҡҡа даны таралған дин әһеле - табип Мөжәүир хәҙрәт тураһында ла ишеттем, үҙен дә барып күрҙем. Ысынлап та, ул теге Вазифа әйткәненсә, тап "телепатия" тигән һәләткә эйә ине... Бына шул инде, улым, минең "Шүлгән бабай" булып китеүемдең истурияһы, - тип кеткелдәп көлөп алды Шәһит олатай хикәйәтен һөйләп бөткәс.

Бабайға ҙур рәхмәттәр әйтеп, үҙемдең сей яранан ҡотолоуыма шатланып ҡайтып киттем. Ҡайтҡас та коллегам - эндоскопист Зөфәр Әнүәр улына күрендем. Аппараты менән ашҡаҙанды бик ентекләп тикшергәндән һуң ул үҙе лә хайран ҡалды.

- Яҙвандың эҙе лә юҡ! - тине ул...

ЗАУЫҠ

# БЕҘ ҘӘ ДОНЪЯНАН КИТКӘНДӘ,

## әтәс ҡысҡырыр микән?

### Ҡатын-ҡыҙ

Һеҙҙән генә алынғандыр барлыҡ төҫтәр,
Йөнегеҙҙән тирелгәндер бөтә көстәр.
Тәнегеҙҙән нур алғандыр зат, кешелек.
Күнелегеҙҙән таралғандыр хаҡ, изгелек,
Моң дарьяһы, һағыш уты, ҙур түҙемлек.

Мәрхәмәтлек шишмәһе һеҙ, эй, ҡатын-ҡыҙ!
Һеҙҙән башҡа йәшәү йәмһеҙ һәм күңелһеҙ.
Был тормоштоң тотҡаһы һеҙ, көсәре һеҙ,
Һеҙ булғанда донъя хайран һәм үлемһеҙ.

### Йәм табырһың

**Азамат улыма**

Йәшәй-йәшәй күпте кисерерһең,
Күп нужалар үтер башыңдан.
Һин аңларһың шул саҡ тормош йәмен,
Тәм табырһың ашар ашыңдан.

Һин аңларһың һөйөү, нәфрәт көсөн,
Мөхәббәтһеҙ йәшәү юҡлығын.
Яратырһың тормош, тәбиғәтте,
Был донъяның саф һәм паклығын.

Төшөнөрһөң ирек-азатлыҡтың
Тик буш хыял ғына түгелен.
Ирмен тигән исемең илгә яңғырар,
Йөрөмәҫ булһаң яттан иҙелеп.

Ҡараңғылыҡ һәм яҡтылыҡ серен
Өйрәтерһең иҫкән елдәргә.
Аңлатырһың илгә бөйөклөгөн
Һөйләшеүҙең туған телдәрҙә.

### Юҡлыҡта

Күпме башҡорт йөрөй йортон ташлап,
Сит илдәрҙә, алыҫ яҡтарҙа.
Ситтә оя ҡора ҡәрҙәштәрем
Үҙ урынын ҡалдырып яттарға.

Башҡортостан, тәтәй ҡатын кеүек,
Ятҡа тиҙ асыла теҙҙәрен.
Ситте иркәләйһең, үҙеңдекенә
Асылып бармай матур йөҙҙәрең.

Йөмһүриәтем, йылы ҡосағыңа
Кемдәр генә кереп тулмаған.
Кемдәр һине ашап һимермәгән,
Ашаһа ла барыбер туймаған.

Сабый саҡтан беҙгә һеңдерҙеләр:
"Бөтә байлығыбыҙ - дуҫлыҡта".
Әммә "дуҫтар" сумған рәхәтлеккә,
Башҡорт йәшәй һаман юҡлыҡта.

### Таң атҡанда

Таң атҡанда атайымды
Әтәс уятыр ине,
Эшкә торорға ваҡыт, тип
Көн дә иҫкәртер ине.

Әтәс ҡысҡырған ваҡытта
Атам китте донъянан.
Өй хужаһын уятам тип
Әтәс ҡысҡыра һаман.

Атаҡайым, һине бөгөн
Уятһын ине әтәс.
Уянырлыҡ түгелһең шул
Тәрән йоҡоға киткәс.

Сабып барған был ғүмерҙәр
Ҡулдан ысҡыныр микән?
Беҙ ҙә донъянан киткәндә
Әтәс ҡысҡырыр микән?

* * *

Ҡояш кеүек балҡырһың һин,
Балҡыуҙан да ялҡырһың һин.
Мөхәббәтте мылтыҡ итеп,
Йөрәгемә атырһың һин.

Ҡара төндә ялҡынһың һин,
Көнгә сыҡҡас, һалҡынһың һин,
Иҫерәмен еҫтәреңдән -
Ҡәнәферҙәй аңҡырһың һин.

Икеләтә матурһың һин,
Һөйөүемде һатырһың һин.
Аҙаҡ көлөп ятырһың һин,
Шунан ләззәт татырһың һин.

### Тапап үтте

Янып тор һин, фекерем, гөл сәскәләй,
Ҡунһын уға мең-мең күбәләк.
Бал ҡорттары унын балын һурһын,
Бейеп йөрөһөн шунда сүгәләп.

Шулай уйланым да баҙнат иттем
Фекерҙәрҙән таждар үрергә.
Шул таждарға матур биҙәк өсөн
Күктән алып йәйғор элергә.

Хыялдарым китте бушлыҡ иңләп,
Бушлыҡтарҙа туңып бәлйерәп,
Буш баштарға фекер кәрәк түгел,
Фекер тажым һулый инерәп.

Онотолған, ергә түңкәрелгән
Мин үҫермен тигән бер өмөт.
Ҡорт күстәре унда ҡунмаҫ инде,
Хужа булғас беҙҙә тар хөсөт.

Талантһыҙҙар гөрләп сәскә ата,
Ялағайҙар тулған был илдә.
Әҙәбиәттең бейек күктәрендә
Төрә шағир балҡый емелдәп.

Гөл-сәскәләр шинде ҡырауҙарҙан,
Төҫ юғалтты йәйғор нағышы.
Фекер таждарымды боҙға бәреп,
Тапап үтте заман ағышы.

### Һүндерә алмаҫ

Ул урамдан килә йомшаҡ баҫып -
Гармония ошо микән ни?
Сылтыр шишмә кеүек тауыштарын
Йоҡомһорап тыңлай Илкәнәй.

Иренендә айҙың нуры уйнай,
Һәр бер өнө - серле музыка.
Башҡайымды минең әйләндерҙе
Һыу һөлөгө - ошо ҡыҙыҡай.

Ҡараштарым менән һөйҙөм уны,
Үптем танһыҡтарым ҡанғансы.
Хоҙай минә насип итһен, тинем,
Ят ҡулдарға тороп ҡалғансы.

Ғишыҡ уты көйрәп янған саҡта
Хис урғылып күңел талпынды.
Бер ни һүндерә алмаҫ йөрәгемдә
Ул ҡабыҙған көслө ялҡынды.

### Башҡорт йыры

Күкрәктәрҙе ярып моңдар сыҡмай,
Йөрәктәрҙә һағыш тыумаһа.
Донъя үҙе туң таш булыр ине,
Башҡорт йыры ерҙә булмаһа.

Халҡым йыры: ундай моңло йырҙы
Ишетмәнем башҡа яҡтарҙа.
Мин белмәйем көслө ташҡындарҙың
Башҡорт йыры кеүек аҡҡанын.

Башҡорт йыры мең йыл аша ҡарап,
Күптән шәйләй азат тормошто.
Әсә булып беҙҙе саҡыра ул:
Буйһонмағыҙ хәтәр яҙмышҡа!

Килегеҙ һеҙ бында яҡтылыҡҡа,
Ҡараңғылыҡ китһен, дөмөкһөн.
Тартылығыҙ ирек таңдарына,
Бөтә халыҡ иркен көн итһен!

**Марс НУРИЕВ.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




* * *

Темәс ауылында бер әбей: "Элек беҙ йәш саҡта һарыҡтар "Бә-ә-ә" тип ҡысҡыра торғайны, хәҙер ауыҙын аса ла ҡуя", - тип һуҡрана икән. Ҡартайһа ла, ҡолағы һаман да йәш саҡтағыса ишетә, тип уйлағандыр инде.

* * *

Әсәйемдәрҙең күршеһендә аҡылға зәғиферәк ҡыҙ йәшәгән. Урамдарында бер кәкере ҡайын үҫкән. Бер көндө шул ҡыҙ ҡайынға ҡарап туҡтауһыҙ сеңләп илай икән. Ни өсөн илағанын һорағандар бынан. Ул:

- Мин ҙурайһам, кейәүгә сыҡһам, минең балам булһа, ошо ҡайынға менеп уйнайым, тип, ҡолап төшөп үлер инде, - тип, тағы ла нығыраҡ ярһып илай башлаған.

Аҡыл яғы зәғиф булһа ла, киләсәк быуынды ҡайғыртҡан. Ә хәҙер?

* * *

Билал ауылында ишеттем быны. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында бер урыҫ кешеһе Темәстән килеп, партия ҡушыуы буйынса халыҡтың һыйырҙарын яһалма ҡасырып йөрөй икән. Кешеләр алдан тәғәйенләнгән урынға һыйырҙарын етәкләп килтерә икән. Бер бабай кәзәһен етәкләп килтергән дә:

- На, друг, сперва коза попробуй, сможешь, корову принесу, меня кейәүем будешь! - тигән.

Билал, Һәмән ауылдарында гел мәрәкесел кешеләр йәшәй шул.

* * *

Иҫке Сибай ауылында шабашкала йөрөйөм. Бер ҡайтҡанымда Салауат тигән иптәшем ҡайҙа йөрөүемде һораны. "Иҫке Сибайҙа тауыҡ фермаһында осеменатор булып эшләйем", - тип яуап биргәйнем: "Ҡалай һәйбәт иткәнһең!" - тип һоҡланмаһынмы!

Бирер әтәстәр һәйбәтте.

* * *

Хәйбулла районы Үрнәк ауылында Ғәтифә апайға өй эшләйбеҙ. Бер көндө шаяртып, ҡыҙына:"Садиҡа ҡоҙағыйҙың ата ҡаҙы һыуға батып үлгән", - тигәйнем, "Эй, шул инәйҙең ҡаҙҙары ҡазалана ла тора", - тип, ҡайғырып ҡуйҙы.

Ҡаҙ ҙа һыуҙа бата икән дә? Ул ниндәй йөҙә белмәгән ҡаҙ булған һуң?

* * *

Ҡустым шофер булып эшләгәйне. Бер көндө Ишбулды ағай менән (ҡурайсы Хәлилов Зыяның атаһы) урманға утынғамы, бесәнгәме барғандар. Бер ваҡыт ямғыр туҡтауһыҙ яуа башлаған, машина батҡан. Сығара алмай ыҙалайҙар икән. Ишбулды ағай ҡайҙандыр бер ағасты һөйрәп алып килгән дә: "Тәлғәт, исемең кем әле, ошо ағасты һалһаҡ, сыҡмаҫмы икән?" - тигән. Бәлә исемде лә онотtora шул. Хәҙер икеһе лә мәрхүмдәр.

* * *

Йәйгеһен мейес сығарҡайным, "Әхмәтғәҙе, мейесең ҡыҙыумы?" - тип ҡыҙыҡһындылар. "Пока спокойно", - тип яуап бирҙем.

Башҡаса нимә тип әйтергә була һуң?

* * *

Рафаэль ҡусты тап булды. Хәл-әхүәлде һораша. Мин, һәр ваҡыттағыса, шаяртып яуап бирҙем. "Кисә генә судтан ҡайттым, ике йыл шартлы срок бирҙеләр", - тием. Аптырап китте. "Нимә булды?" - ти. "Йәйгеһен кеше үлтерҙем дә инде", - тигәйнем, тамам аптыраны.

Һөйләй ҡуйҙым. "Темәстән бер дуҫым бесән сабышырға әйткәйне. Барҙым. Төшкө аш ваҡытында бисәһе бесән өҫтөнә ятып торғайны, унда йылан булған һәм ҡолағының төбөн генә саҡҡан. Ни эшләргә белмәйбеҙ, башы шешә башланы тегенең. Шунан мин унын капрон колготкиһын систереп алдым да, үңәсенә жгут һалдым, теге бисә тыпырсынып үлде лә ҡуйҙы". Рафаэль ҡусты минең шаяртыуҙы ысынға алған да ҡуйған: "Ҡартайып бөткәнһең, һаман аҡылың юҡ. Үңәскә кеше жгут һаламы?" - тип әрләне лә ташланы. Ә мин унан йыуатыу көткәйнем...

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ,**
**Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылы.**

*✓ Йәмәғәт эшмәкәре, рухани Иоанн Охлобыстин: "Милләтемде үҙем билдәләгем килә һәм, әгәр ҙә мин быны эшләмәһәм, минең өсөн милләтемде башҡалар һайлаясаҡ".*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨРСӨК... барыһын да тигеҙләнеме?

■ Белгестәр әйтеүенсә, 2009 йылдың хеҙмәт баҙарындағы ҡатмарлы хәл 1995 йылдан бирле һаҡланып килгән байҙар һәм ярлылар килеме араһындағы айырманы күпкә ҡыҫҡартырға мөмкинлек биргән. РФ Иҡтисад министрлығында был хәлде Хөкүмәттең эшһеҙлеккә ҡаршы аҫҙем көрәшеүе менән аңлаталар. Росстат мәғлүмәттәренә ярашлы, 2009 йылда 2008 менән сағыштырғанда реаль хеҙмәт хаҡы 2,6 процентҡа түбәнәйгән, ә минималь хеҙмәт хаҡының үҫеш темпы өс тапҡырға кәмегән.

■ Рәсәй Эске эштәр министрлығын реформалау мәсьәләһе ҡаралған йыйылышта Дмитрий Медведев Эске эштәр министрлығына травматик ҡорал һатып алыу һәм ҡулланыуҙы сикләү тураһында ҡағиҙәләр эшләргә ҡушты. Президент һүҙҙәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә травматик ҡоралды һатыу контролдә тотолмай, бары тик паспорт мәғлүмәттәре генә теркәлә. Аҙаҡтан пистолет менән нимә була, ул ҡайҙа ҡулланыла - бер кем дә белмәй. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: 2009 йылдың декабрендә Дмитрий Медведев Эске эштәр министрлығы эшмәкәрлеген яҡшыртыу тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, милиция хеҙмәткәрҙәре һаны 2012 йылдың ғинуарына тиклем 20 процентҡа ҡыҫҡарасаҡ, ведомствоға ҡағылмаған функциялар бөтөрөләсәк, хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы күтәреләсәк.

■ Совет паспортында милләтте күрһәтеүсе билдәле "бишенсе графа"ны йәмәғәт эшмәкәре, рухани Иоанн Охлобыстин яҡлап сығыш яһаны. "Әгәр ҙә документтар буйынса бер рәсәйле лә теркәлмәгән икән, ил нисек Рәсәй тип атала алһын?" - тип аптырауын белдерә ул. "Мин, мәҫәлән, космоста беренсе кеше рус кешеһе булыу менән бик ғорурланам. Мин быны менән берәйһенең иреген сикләйемме? Ә быны минең иретемдә РФ Конституцияһының егерме алтынсы статьяһында әйтелгән "милләтен һәр кем үҙе билдәләй һәм күрһәтә ала" тигән законды боҙоу менән сикләйҙәр. Милләтемде үҙем билдәләгем килә һәм, әгәр ҙә мин быны эшләмәһәм, минең өсөн милләтемде башҡалар һайлаясаҡ".

■ РФ Эске эштәр министры Рәшид Нурғәлиев, министрлыҡ водителдәргә юлда өстөнлөк биреүсе "матур" номерҙәр һатыуҙы туҡтата алды, тип белдерҙе. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, хоҡуҡ һаҡлау органдары дәүләт автоинспекцияларындағы һәр төрлө коррупцияны булдырмау өсөн эш алып барырға йыйына.

■ Ғинуар аҙағына Рәсәй буйынса минималь аҙыҡ-түлек йыйылмаһы бер айға иҫәпләгәндә уртаса 2,19 мең һум тәшкил итте. 2009 йылдың 11 айы һөҙөмтәләре буйынса, Рәсәйҙә бер айлыҡ пенсия күләме 5,1 мең һум. Тимәк, йылдың беренсе айында уҡ аҙыҡ-түлек кәрзине 3 процентҡа ҡиммәтләнгән, ошо уҡ ваҡытҡа инфляция 1,6 процентҡа күтәрелгән. Аҙыҡ-түлеккә иң юғары юғары хаҡ Мәскәү һәм Санкт-Петербургта теркәлгән.

■ Шулай уҡ яғыулыҡҡа (1,9 процентҡа), тәмәкегә, ҡайһы бер төр электр тауарҙарына, ҡиммәтле тиреле баш кейемдәренә (1-1,4 процентҡа) хаҡтар күтәрелгән. 0,6-0,7 процентҡа йөн һәм кизе-мамыҡ тауарҙарға, мәктәпкәсә йәштәге балалар кейемдәренә, металл һәм фарфор-фаянс һауыт-һабаға, канцелярия тауарҙарына, матбуғат баҫмаларына, уйынсыҡтарға хаҡтар артыуы күҙәтелә. Медицина препараттарының күбеһенә хаҡ төшһә лә, Рәсәйҙә етештерелгән аспирин - 3,9 процентҡа, галазолин - 2,9 процент, поливитаминдар, нитроглицирин, амброксол 0,4-1,7 процентҡа артҡан. Термометрҙарға ла 4,2 процентҡа хаҡ күтәрелгән.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



**Юлдар ошо дауаханаға илтә. Эйе, эйе, республикабыҙ районлары һәм ҡалалары халҡы һаулыҡ мәсьәләһенә ниндәйҙер асыҡлыҡ индерергә, квалификациялы медицина ярҙамы алырға кәрәк булғанда, баш ҡалаға, Ғ. Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына юллана. Шуға ла был медицина учреждениеһы тураһында беҙҙең уҡыусыларыбыҙ ҙа хәбәрҙар булырға тейеш, тип уйлап, уның баш врачы Ринат НАГАЕВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# ҺАУЫҒЫУҒА ӨМӨТ ОШОНДА ЙӘШӘЙ...

## Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы тураһында бер кәлимә һүҙ

**Ринат Йәүҙәт улы, һеҙ етәкселек иткән коллектив нигеҙҙә райондарҙан, ауылдарҙан килгән ауырыуҙарҙы хеҙмәтләндерә. Ошонан сығып, РКБ табибының һөнәр оҫталығына ғына түгел, ә әхлаҡи сифаттарына ҡарата ла ниндәйҙер талаптар ҡуйыламы? Ни өсөн бындай һорау бирәм, сөнки район үҙәктәре поликлиникалары һәм дауаханаларында дөрөҫ диагноз ҡуя алмау йә иһә тупаҫлыҡ кеүек осраҡтар ҙа булғылай бит.**

- Бындай айырым осраҡтарҙы мин райондарҙағы типик күренеш тип әйтмәҫ инем, сөнки, ни тиһәң дә, республикабыҙҙа һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге үҫеш фактын бер нисек тә инҡар итеп булмай. Райондарҙа дауаханалар төҙөлә, яңы корпустар ҡалҡып сыға, улар заманса йыһаздар, аппаратуралар менән тәьмин ителә. Ошондай шарттарҙа нисек итеп биргән антыңа тоғролоҡло булып, тырышып эшләмәҫкә мөмкин? Табиптың бурысы - ул ҡайҙа ғына һәм ниндәй шарттарҙа эшләмәһен - ауырыуға ваҡытында һәм юғары сифатлы медицина ярҙамы күрһәтеү.

Беҙҙең Ғ. Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына килгәндә, уның Башҡортостаныбыҙҙа махсуслаштырылған төп һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының береһе булыуы ғына ла беҙгә ҙур бурыстар йөкмәтә. Уны атҡарыу юлында беҙгә республикабыҙ етәкселеге, Хөкүмәтебеҙ ныҡ ярҙам күрһәтә. РКБ-ла йылына 24 мең ауырыуға юғары технологияға нигеҙләнгән медицина ярҙамы күрһәтелә; 112 мең пациенттың сәләмәтлеге тикшерелә һәм уларға консультация бирелә; 20 мең операция яһала; 2 меңгә яҡын бала донъяға килә; ашығыс саҡырыуҙар буйынса санитар авиацияһы 2300-ҙән ашыу рейс эшләй.

**Республика клиник дауаханаһы - фән һәм техниканың иң яңы ҡаҙаныштары менән йыһазландырылған дауалау учреждениеһы, тип билдәләп киткәйнек инде. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, һеҙҙең табиптар дауалау һәм диагностикалауҙы ниндәй төр заманса ҡорамалдар ярҙамында атҡара?**

- Оҙаҡ ваҡыт кисерелгән гипоксия күренеше арҡаһында хәл өҫтөндә булған сирлеләрҙе реанимация бүлегендә тотоу һәм үпкәләрҙе яһалма елләтеү ваҡытын кәметеүгә кардионейромониторинг файҙаланыу ныҡ булышлыҡ итә.

Анестезиология һәм реанимация бүлексәһенең экспресс-лабораторияһында гемостаз факторҙарын асыҡлаусы ысул, тромбоэмболияны күрһәтеүсе маркерҙар, миокард инфрактын диагностикалаусы кардиоферменттар файҙаланыу йөрәк сирле, ишемик инсульт, үпкә артерияһының тромбоэмболияһы булған ауырыуҙарға ҡарата тромболизис ысулын индерергә мөмкинлек бирҙе.

Реанимация бүлексәһендә, шулай уҡ санитар авиацияла файҙаланыуға индерелгән ҡайһы бер заманса ысулдар ҙа сир көсәйгән мәлдә нервы күҙәнәктәренең зарарланыуын иҫәпкә алып, дөрөҫ дауалау юлдарын табырға ярҙам итә һәм ауырыуҙың хәлен еңеләйтә.

**Ниндәй төр уникаль дауалау ысулдары һәм уңышлы яһалған яңы операциялар хаҡында һөйләй алаһығыҙ?**

- Былтыр диагностикалау һәм дауалауҙың рентген-хирургия бүлексәһендә ҡорһаҡ аортаһы аневризмын эндопротезлау буйынса ике уникаль операция яһалды. Бынан тыш, ошо уҡ бүлексәлә тамырҙарға ангиопластика эшләү, артерияларға башҡа төр неско операциялар үткәреү ғәҙәти эшкә әйләнде. Күкрәк хирургияһы бүлексәһендә торокоскопия операциялары эшләү башланды.

Гинекология бүлексәһендә юғары технология материалдарын файҙаланып, пластик операциялар яһала. Бала төшөү осраҡтарын иҫкәртеүсе юғары молекуляр гепарин ҡулланыу ғәмәлгә индерелде.

БЕЛЕШМӘ ӨСӨН:

### КЕМ УЛ ҠЫУАТОВ?

Ҡыуатов Ғүмәр Ғәлим улы 1883 йылда элекке Ырымбур губернаһы, хәҙерге Ейәнсура районы Үтәгол ауылында тыуған. 1917 йылда Ҡазан университетының медицина факультетын тамамлай, хирург. Граждандар һуғышында хәрби госпиталь начальнигы була. 1919-1928 йылдарҙа - Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау буйынса халыҡ комиссары. Мәскәүҙә аспирантура тамамлай. Ҡыҙыл профессура институтының директор урынбаҫары, Бөтә Союз тәжрибә медицинаһы институтында ғилми хеҙмәткәр вазифаларын башҡара. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында госпиталь начальнигы була. Һуғыштан һуң Мәскәү өлкәһе Физиотерапия дауаханаһының баш врачы булып эшләй. Мәскәүҙә, Новодевичье зыяратында ерләнгән.

Хроник бөйөр ауырыуҙары менән яфаланған сирлеләргә гемодиализ үткәреүҙә тамырҙарға даими юл тәьмин итеүсе тамыр протездар ҡулланыу дауалау сифатын һәм ауырыуҙың хәлен күпкә яҡшыртты. Махсус аппаратта гемодиализ үткәреү 200 меңдән ашыу һум аҡса экономиялау мөмкинлеген бирҙе.

Неонатология бүлексәһендә үпкәләрҙе "Арабелла" тигән яңы аппараттар ярҙамында яһалма елләтеү һәм "куросурфа" препаратын ҡулланыу яңы тыуған сабыйҙарҙың үлем һәм ауырыу осраҡтарын кәметте.

Былтыр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте һәм РБ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ярҙамы менән сит илдә етештерелгән 5 реанимобиль алдыҡ, был да ауырыуҙарға медицина ярҙамы күрһәтеү һәм уларҙы ташыу шарттарын яҡшыртасаҡ.

Нейрохирургия бүлексәһендә Паркинсон синдромы һәм сиреь менән яфаланған ауырыуҙарға операция эшләнә башланы. Бында шулай уҡ нейронавигация ҡулланыу юлы менән баш мейеһенә лә операциялар яһала.

**Бөгөнгө көндә яңы технологиялар һәм заманса ысулдар менән эш итеүсе врач өсөн "консерватив дауалау" төшөнсәһе нимәне аңлата? Әллә булмаһа, күптән өйрәнелеп, ятлап бөтөлгән был ысул да үҙенә күрә әлеге шарттарға ярашлы үҫешә, яңыра барамы?**

- Консерватив дауалау ысулы, атамаһы ҡалыптарҙы күҙ алдына килтерһә лә, ул иҫкелек түгел, ә шул уҡ заман препараттары һәм яңы дауалау-диагностикалау сараларын ҡулланып эш итеү бит. Былар клиник һөҙөмтәләрҙе яҡшыртыуға ғына түгел, ауырыуҙың больницала ятып дауаланыу ваҡытын ҡыҫҡартыу

менән бәйле ярайһы ғына иҡтисади отош биреүе яғынан да мөһим, сөнки, ахыр сиктә, пациент ваҡытынан алдараҡ һауыға, аяҡҡа баҫа, хеҙмәткә ҡайта; инвалидлыҡ осраҡтары кәмей һәм башҡалар.

Үкенескә күрә, бөгөн системалы сирҙәр менән ауырыусылар күбәйҙе. Уларҙы һөҙөмтәле дауалау өсөн биологик әүҙем препараттар ҡулланыла, ә был иһә ремиссия ваҡытын оҙайта һәм кеше эшкә һәләтлелеген һаҡлап ҡала ала.

Республикала шулай уҡ йылдан-йыл ҡан ауырыуҙары менән яфаланыусылар һаны арта. Һөҙөмтәлә бындай сирлеләр, райондар һәм башҡа ҡалаларҙа ошо өлкәлә ҡулланыла торған заманса аппаратура һәм дарыу препараттары булмау сәбәпле, нигеҙҙә беҙҙең ошо Ғ. Ҡыуатов исемендәге клиникаға күпләп килә. Улар бында күп төрлө тикшеренеүҙәр, клиник, иммунологик, биохимик анализдар мониторингы үтә. Ошо маҡсаттарҙа былтыр беҙҙә өс асептик блок файҙаланыуға тапшырылды.

Бөйөр ауырыуҙары, сығышы асыҡланмаған артериаль ҡан баҫымы менән сирләүселәргә заман кимәлендәге кортикостероидтар һәм цитостатиктар ярҙамында терапия үткәрелә. Ошо йүнәлештә патогенетик дауаланыу алған ауырыуҙарҙың дауахананан һауығып сығыу күрһәткестәре 2008 йылда - 2,5, ә былтыр 2,6 тапҡырға артты.

**Әйткәндәй, дауахана буйынса ауырыуҙарҙың һауығып сығыу күрһәткестәре ниндәй? Медицина ярҙамы һорап мөрәжәғәт итеүселәрҙең һаулығы насарайыуға нигеҙҙә ниндәй факторҙар йоғонто яһай икән?**

- Беҙгә мөрәжәғәт итеүсе пациенттар һанының артыуына (2008 йылда - 24.370, 2009 йылда - 25.122 сирле), ҡатмарлы диагнозлы ауырыуҙарҙың күбәйеүенә ҡарамаҫтан, үлем осраҡтары, киреһенсә, кәмене. Шулай уҡ дауахананан хәле һәйбәтләнеп сыҡҡан пациенттар һанының да 56,2 проценттан 57,8 процентҡа артыуы күҙәтелә.

Халыҡ араһында һәр төрлө сирҙең артыуына социаль-иҡтисади шарттар, психик һәм эмоциональ факторҙар, гиподинамия (аҙ хәрәкәтләнеү) сәбәпсе булып тора. Тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: кеше сәләмәтлегенә тәьҫир итеүсе хәүеф факторҙары һаулыҡ һаҡлау эшен ойоштороу кимәле йә сифаты сиктәренән сығып китә. Ҡоро һүҙ булмаһын, мәҫәлән, халыҡ һаулығы торошоноң һаулыҡ һаҡлау системаһы эшмәкәрлегенә бәйлелеге ни бары 8 процент тәшкил итһә, 58 проценты кешенең йәшәү рәүешенә, 23 проценты экология торошона, 11 проценты тыҡланыу өлкәһенә бәйле. Нигеҙҙә, дөрөҫ туҡланмау, физик әүҙемлек етешмәү, эсеү, тартыу, наркотик һәм башҡа шундай матдәләр ҡулланыу, эштә, көнкүрештә, урамдағы травмалар, экология шарттары кеше һаулығы торошона туранан-тура йоғонто яһаусы төп сәбәптәр.

**Һуңғы ваҡытта дауаханала ниндәй яңы махсуслаштырылған бүлексәләр асылды? Стационарҙа койка-урындар һаны артамы?**

- Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың туранан-тура хәстәрлеге, Хөкүмәтебеҙ һәм Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ярҙамында Ғ. Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы йылдан-йыл үҫешә, яңыра, заманса технологиялар менән йыһазландырыла. Былтыр ғына ла, мәҫәлән, Махсуслаштырылған төр медицина ярҙамы үҙәге - Телемедицина, шулай уҡ хирургик гепатология, тарҡау склероз, гематология үҙәктәре асылды.

Гематология бүлексәһендә урындар һаны 40-тан - 50-гә, быйыл эндокринология бүлегендә 60-тан 70-кә тиклем еткерелде. Бынан тыш, нейрохирургия менән травматология һәм ортопедия үҙәктәре халыҡҡа юғары технологиялы ярҙам күрһәтеү буйынса федераль программала ҡатнаша, уларға квоталар бүленгән, федераль бюджеттан өҫтәмә тәьмин ителәләр. Дауаханабыҙ шулай уҡ шәкәр диабеты буйынса халыҡҡа ярҙам күрһәтеүҙең республика программаһында ла ҡатнаша.

**Республика дауаханаһы тарихында электән килгән һәйбәт бер традиция - халыҡты урындарға сығып ҡабул итеү һәм дауалау эше яҡшы ҡуйылғайны. Ул әле лә дауам итәме?**

- Әлбиттә. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының ойоштороу саралары планы һәм бойороҡтары нигеҙендә комплекслы бригадалар һәм табип төркөмдәре республикабыҙ райондарының дауалау учреждениеларына сығып, ғәмәли һәм ойоштороу-методик ярҙам күрһәтә, һәр төрлө конференцияларҙа, кәңәшмә һәм семинарҙар эшендә ҡатнаша. Былтыр клиника белгестәре 153 тапҡыр республикабыҙ район һәм ҡалаларында булған, 94 учреждение эшен тикшергән, 42 медсовет ултырышы үткәргән, 303 күрһәтмә ысул һәм операция эшләнгән, 3142 ауырыуға консультация бирелгән, 87 урында лекция һәм докладтар менән сығыш яһалған, 179 тәҡдим индерелгән.

Халыҡ сәләмәтлеге - республикабыҙҙың социаль именлеге нигеҙе ул. Беҙ уның мөһимлеген аңлап эш итәбеҙ, шуға күрә лә медицина ярҙамы ойоштороу эшенең сифатын артабан яҡшыртыу юлдарын эҙләйбеҙ. Әлеге көндә клиник больницаның акушер-гинекология корпусын төҙөү буйынса әҙерлек эштәре бара, бынан тыш, киләсәктә тағы ла бер нисә объект төҙөү ҡарала.

**Әңгәмәне Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА алып барҙы.**

ИРҘӘР ҠОЛАҒЫНА...

# ТАРТЫНМА...

## урологка мөрәжәғәт ит

**Өфөлә ғинуар аҙағында "Уролог һабаҡтары" тигән дөйөм Рәсәй социаль программа старт алды. Уның маҡсаты - урта һәм өлкән йәштәге ир-аттарға урология сирҙәре һәм уларҙың эҙемтәләре, шулай уҡ үҙ аллы дауаланыуҙың зыяны һәм үҙ ваҡытында белгес табибтарға мөрәжәғәт итеү кәрәклеге тураһында бөтә яҡлап мәғлүмәт биреү.**

Бөгөн ирҙәр араһында урология сире киң тарала бара: бәүел ҡыуығы системаһы ауырыуҙары 60 йәштәге ирҙәр араһында - 60 процент, ә 80 һәм унан өлкән йәштәге ирҙәр араһында 80 процент тәшкил итә. Был сирҙәрҙең үҫеш тиҙлеге хатта йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәрен уҙып китә. Был хәлдең киҫкенләшеүенә урологик сирҙәр менән яфаланыусы ир-аттарҙың үҙ аллы дауаланыу менән шөғөлләнеүе сәбәпсе булып тора. Башҡортостан да был өлкәлә башҡаларҙан айырылмай. Бөгөн республикала 4 миллион тирәһе халыҡтың 11 процентын (440 мең тирәһе) 50 йәштән уҙған ир-аттар тәшкил итә, шуларҙың яҡынса 176 меңе простата биҙе аденомаһы сире менән яфалана, был сир иһә, үҙ сиратында, үҙенең таралыуы менән донъяла беренсе урында тора. Шул уҡ ваҡытта, тәжрибә күрһәтеүенсә, табибтарға 8 ир-егеттең берәүһе генә мөрәжәғәт итә.

**Бына ни ти был турала белгестәр:**

**Олег ЛОРАН, Рәсәй урологтары ойошмаһының беренсе вице-президенты, Мәскәү дәүләт Медицина-стоматология университетының урология кафедраһы мөдире, РФ-ның атҡаҙанған фән эшмәкәре:**

- Беҙҙең ир-аттарҙы үҙенең сәләмәтлегенә етди ҡарарға һәм үҙ ваҡытында табибтарға мөрәжәғәт итергә өйрәтеү бик мөһим. Үкенескә ҡаршы, беҙҙең йәмғиәттә әлегә тиклем урология проблемалары тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләшеү күренеше юҡ. Мәҫәлән, простата биҙе аденомаһын үҙ аллы дауалау 90 процент осраҡта ирҙәрҙең йәшәү сифаты насарайыуға, эшкә һәләтлек түбәнәйеүгә килтерә.

**Армаис КАМАЛОВ, Рәсәй "Ирҙәр сәләмәтлеге" йәмғиәтенең президенты, М.В.Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының урология кафедраһы мөдире:**

- Бөгөн, үкенескә ҡаршы, 50 йәштән уҙған ирҙәрҙең бары тик 12 проценты ғына төрлө урология сирҙәре менән белгестәргә мөрәжәғәт итә, ә ҡалғандары үҙ аллы дауаланыу менән шөғөлләнә. Улар өсөн реклама, күршеләре, гараждағы дуҫтары кәңәшсе булып тора. Бына шуның өсөн дә мәғлүмәт биреү эштәрен алып барырға кәрәк. Ир-аттың шәхси урологы булырға тейеш.

**Валентин ПАВЛОВ, Башҡорт дәүләт медицина университетының урология кафедраһы мөдире:**

- Беҙ Мәскәүҙәге коллегаларыбыҙҙың "Уролог һабаҡтары" тигән программаны тормошҡа ашырыу буйынса инициативаларын ҙур ҡыуаныс менән ҡабул иттек. Ирҙәрҙең шәхси именлеге һәм төбәктәге дөйөм эпидемиология күренеше уларҙың үҙ һаулығына ни тиклем яуаплы ҡарауына бәйле. Аденома сиренең тәрәнәйгән формаһы етди эҙемтәләргә, мәҫәлән, яман шешкә дусар итеүе бер кемгә лә сер түгел. Шуға ла беҙ ҙә һәм ауырыуҙар үҙҙәре лә ваҡытында белгестәргә мөрәжәғәт итеү кәрәклеген аңларға тейеш.

**Әйткәндәй, был турала мәғлүмәт алырға теләүселәр 8-917-42-333-75 телефон һандары буйынса мөрәжәғәт итә ала.**

**Марина ЯРОВИКОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Үкенестәргә күнекмә, күңеләңде үҫтерергә өйрән

Ағалы-ҡустылы игеҙәктәр мәктәпте тамамлауға егерме йыл тулыу айҡанлы ойошторолған осрашыу кисәһенә килә. Уларҙың береһе был ваҡытҡа билдәле яҙыусы булып китһә, икенсеһе нимәгә тотонһа ла, уңышһыҙлыҡ кисергән кеше була. Уңышҡа өлгәшкән ағайҙан, ҡаҙаныштарығыҙ ниҙән, тип һорағас, ул уйлап та тормайынса: "Атай-әсәйемдән", - тип яуаплай. Икенсеһенән, эшегеҙҙәге һәм шәхси тормошоҙҙағы уңышһыҙлыҡтар нимәнән, тип һорағас, ул да: "Атай-әсәйемдән", - тип яуаплаған.

Был миҫал ике кешенең тормошо бер үк төрлө шарттарҙа башланып та, шул шарттарҙың ҡапма-ҡаршылыҡлы һөҙөмтә биреүен күрһәтә. Ата-әсәләре улдары үҫкән ваҡытта уларға ниндәй мөнәсәбәттә булған - был хаҡта әйтелмәй. Бәлки, улар уңышҡа өлгәшкән улдарына, уға һалынған потенциалды алдан күрә белеп, иғтибарҙы күберәк бүлгәндер? Шулай уҡ уңышһыҙлыҡ кисергән улдарына ла өҫтөнлөк биреүҙәре, йәғни уның хаталарын үҙҙәренә ҡабул итеп, уға үҙ хаталары өҫтөндә һабаҡ алырға мөмкинлек бирмәүҙәре ихтимал. Нисек кенә булмаһын, ғаиләләге тәрбиә һөҙөмтәһендә игеҙәктәрҙең береһе тормошта үҙ юлын табып, алға барырға һәм үҙенең мөмкинлектәрен тормошҡа ашырырға әҙер булған, шул уҡ ваҡытта икенсеһе бер урында тапанып, төшөнкөлөккә бирелгән. Был турала рухани Эрик Баттерворт бик ғәҙел итеп әйтеп биргән: "Тормош тәжрибәбеҙ беҙҙең йә ҡаты, йә күтәренке күңелле булып китеүебеҙҙе билдәләй".

Тормошта көтөлмәгән боролоштар осрап ҡуя, улар ниндәйҙер мәлдә беҙҙе хаҡ юлдан тайпылдырыуы ла ихтимал. Ғаилә тарҡалыуы, йә булмаһа эскесе атай-әсәйҙәр менән йәшәү арҡаһында бала сағыбыҙҙың бәхетһеҙ үтеүе лә бар. Беҙҙе аҡ ҡарға, йәғни дөйөм стандарттарға тап килмәгән кешеләр, тип иҫәпләүҙәре лә ихтимал. Һәр кем бүтәндәр кәрәкле тип һанаған нимәнеләр эшләмәҫ өсөн сәбәп таба ала. Әммә уңышлы тормош асҡысы, яҡшымы ул, насармы, үҙебеҙҙең тәжрибәлә өйрәнеү һәләтенән һәм тормошта осраған уңышһыҙлыҡтарға ҡарамаҫтан, үҙеңә юл ярып йәшәүҙе дауам итеүҙән ғибәрәт. Беҙгә үҙебеҙҙән башҡа бер кем дә алға табан барырға ҡамасаулай алмай.

Бер минутҡа ғына үҙеңде ғүмер ахырында итеп хис ит, һәм үткән йылдарыңа баҡ. Артҡа ҡарай боролоп ҡарағанда, ниндәй генә ауырлыҡтар осрағанда ла уны лайыҡлы башҡарып сығыуыңды күреүҙән ғорурлыҡ тойғоһо кисерергә теләмәҫ инеңме ни? Был ниндәйҙер аҙымыңды яңылыш баҫыуҙан тыуған үкенескә ҡарағанда күпкә ҡәнәғәтлеҡ тойғоһо уята түгелме? Бындай кире тойғоларға юлыҡмаҫ өсөн хәҙерҙән үк теләһә ҡайһы проблеманы хәл иткәндә лә көсөңдө йәлләмәҫкә өйрәнергә кәрәк. Бының өсөн һиңә ҙур сабырлыҡ күрһәтергә, күп тырышлыҡ һалырға, үҙеңдә көс табырға һәм Аллаһы Тәғәләгә ышаныс белдерергә кәрәк булыр. Моғайын да, артабан юлыңды дауам итеү өсөн алдыңа ниндәй ҙә булһа бурыс ҡуйыу кәрәк булыр. Әгәр ҙә инде бар мөмкинлегеңде тулыһынса ҡулланып та, уңыш яулай алмаһаң, бының өсөн һиңә оялырға тура килмәйәсәк. Һин һөҙөмтәгә ҡарамаҫтан, уңыш яулаясаҡһың, сөнки көсөңдән килгәндең барыһын да эшләй алыуҙан күңелең үҫәсәк.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 15 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 62-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Вербное воскресенье", 5-я серия
22.30 "Отцы поневоле". Док. фильм
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Приключение"
01.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Лыжные гонки. Мужчины. 15 км
03.00 "Кальмар "Кит". Комедия

### РОССИЯ 1
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Самая счастливая". Мелодрама
16.30 "Вести. Дежурная часть"
16.40 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.00 "Вести"
17.30 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
18.20 "Ефросинья", 1-я серия. Сериал
19.05 "Слово женщине", 21-я серия. Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.45 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Городок"
21.55 "Чужой среди своих"
22.45 "Вести+"
23.05 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере. Лыжный спорт. Женщины. Прямая трансляция
00.25 "Выкупить кинга". "Черная" комедия
02.20 "Женские тайны". Драма
04.30 "Городок"

### НТВ
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 13.30**
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Медвежий угол", 17-я и 18-я серии. Сериал
21.30 "Агент особого назначения". "Пропала собака". Остросюжетный сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Роковой день"
01.45 "Страна смелых"
03.55 "Сладкий ноябрь"

### БСТ
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.30 "Война матерей". Док. фильм**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.20 "Мерген"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Здоровье"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Охота на льва". Док. фильм**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник Хылыукай"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 16 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
04.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде
08.00 "Доброе утро"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 63-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20"Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Вербное воскресенье", 6-я серия
22.30 "Станислав Жук. Великий одинокий". Док. фильм
23.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Биатлон. Женщины. Гонка преследования
00.20 "Мужчина моей мечты". Комедия
02.00 "Детектив"
02.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Конькобежный спорт. Горные лыжи. Сноуборд. Хоккей. Сборная Канады - сборная Норвегии

### РОССИЯ 1
05.00 "Доброе утро, Россия!"
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
07.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере
10.10 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Территория красоты". Сериал
13.40, 16.30, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 16.40 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
17.30 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
18.20 "Ефросинья", 2-я серия
19.05 "Слово женщине", 22-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки. Жизнь продолжается", 17-я и 18-я серии. Сериал
22.50 "Золото для партии. Хлопковое дело"
23.40 "Вести+"
00.00 "Плачу вперед!"
02.05 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере. Биатлон. Гонка преследования. Мужчины. Прямая трансляция
02.55 "Большая любовь-3"
03.55 "Пропавший"

### НТВ
05.55 "Графиня де Монсоро". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.30 "Медвежий угол", 19-я и 20-я серии
21.30 "Агент особого назначения". "Свидетель"
23.15 "Сегодня"
23.35 "Главный герой представляет"
00.25 "Главная дорога"
01.00 "Алмаз режет алмаз". Боевик
02.45 "Нечисть". Фильм ужасов
04.25 "Осиное гнездо". Комедия

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 Мультфильм**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.35 "На своей земле"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Тропинки жизни". З. Кутлугильдина**
**16.00 "Родные напевы"**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Замандаш". С. Сулейманова**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Я пою, значит - живу". Р. Кучуков**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник Хылыукай"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.50 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 17 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Конькобежный спорт. Горные лыжи. Сноуборд. Хоккей. Сборная Канады - сборная Норвегии. Фигурное катание. Мужчины. Короткая программа
10.00 Новости
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 64-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Вербное воскресенье", 7-я серия
22.30 "Мария Шукшина. Расскажите мне о моем отце"
23.30 Ночные новости
23.40 "Римская империя"
00.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Фигурное катание. Мужчины. Короткая программа. Хоккей. Сборная Белоруссия - сборная Финляндии. Горные лыжи
04.00 "Супершторм"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
10.00 На XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере. Хоккей. Мужчины. Россия - Латвия. Прямая трансляция
12.20, "Местное время. Вести-Башкортостан"
12.45 "Территория красоты"
13.40, 16.30 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30, 16.40 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
17.00 "Вести"
17.30 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
18.20 "Ефросинья", 3-я серия
19.05 "Слово женщине", 23-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки. Жизнь продолжается", 19-я и 20-я серии
22.55 "Вести+"
23.15 "Валентина"
01.15 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере. Лыжный спорт. Спринт. Индивидуальные соревнования. Финал. Прямая трансляция
03.10 "Большая любовь-3"
04.05 "Честный детектив"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "Графиня де Монсоро"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.30 "Медвежий угол", 21-я, 22-я, 23-я и 24-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Перехват". Боевик
01.20 Футбол. Лига чемпионов. "Порту" (Португалия) - "Арсенал" (Англия)
03.20 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
03.50 "Особо опасен!"
04.40 "Хранитель душ"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Виктория"**
**10.30 Мультфильм**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12,40 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.35 "Тивлет"**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Любимые мелодии"**
**18.20 "Учим башкирский язык"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Слово о матери"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник Хылыукай"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 18 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
06.00 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Сноуборд. Шорт-трек
09.10 "Модный приговор"
10.00 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Хоккей. Сборная Чехии - сборная Словакии
12.30 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 65-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Давай поженимся!"
19.10 "След". Сериал
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Вербное воскресенье", 8-я серия
22.30 Документальный фильм
23.00 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Биатлон. Женщины. 15 км
00.40 Ночные новости"
01.00 "Римская империя. Гнев народа"
01.50 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Хоккей. Сборная США - сборная Норвегии. Конькобежный спорт
04.00 "Супершторм"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 Тайны следствия". Сериал
10.00, 11.50 "Срочно в номер-2"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
12.45 "Территория красоты"
13.40, 16.30 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 16.40 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов"
15.45 "Суд идет"
17.30 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
18.20 "Ефросинья", 4-я серия
19.05 "Слово женщине", 24-я серия
20.00 "Вести"
20.30 " Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки. Жизнь продолжается", 21-я и 22-я серии
22.55 "Песни поколения. Юрий Антонов"
23.55 "Вести+"
00.15 "Ужин в четыре руки"
02.05 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Биатлон. Индивидуальная гонка. Мужчины. Прямая трансляция

### НТВ
05.55 "Графиня де Монсоро"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00, 01.10 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть Мур"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.40 "Медвежий угол", 25-я серия
20.25 "Тридцатого - уничтожить!" Боевик
22.25 Футбол. Лига Европы. "Рубин" (Россия) - "Хапоэль" (Израиль). Прямая трансляция
01.35 "Ангел ночи". Фильм ужасов
03.30 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
03.45 "Ромасанта: охота на оборотня"
05.30 "Роковой день"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.35 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Вдохновение". Песни А. Кубагушева**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Сельский час"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Нефтекамск - город спорта"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Действующие лица"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник Хылыукай"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 19 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
05.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Хоккей. Сборная Канады - сборная Швейцарии
09.00 "Новости"
09.10 "Модный приговор"
10.00 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Хоккей. Сборная России - сборная Словакии
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо", 175-я серия
16.20 "Спальный район", 66-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Криминальные хроники"
18.50 "Поле чудес"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Юрий Антонов. "От печали до радости..."
23.00 "Миссия серенити". Приключения
01.00 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Хоккей. Сборная Белоруссии - сборная Швеции. Горные лыжи
04.00 Фильм

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России"
08.25 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере
10.00 "Срочно в номер-2"
10.45 "Мусульмане"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время.Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия"
12.50 "Территория красоты"
13.40, 16.30 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 16.30 "Местное время.Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов"
15.45 "Суд идет"
17.00 "Вести"
17.30 "Кармелита. Цыганская страсть", 288-я, закл. серия
18.20 "Ефросинья", 5-я серия
19.05 "Слово женщине", 25-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки. Жизнь продолжается", 23-я и 24-я серии
22.55 "10 лет спустя. Анатолий Собчак"
23.55 "Побег". Криминальная драма
01.55 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере. Лыжный спорт. Дуатлон. Женщины. Прямая трансляция
03.00 "Ее алиби"
04.35 "Мой серебряный шар"

### НТВ
05.55 "Графиня де Монсоро". Исторический сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мур есть мур". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Междвежий угол", 26-я серия
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Лекарства. История всероссийского обмана"
23.10 "Женский взгляд"
00.00 "Жестокость". Драма
01.55 "Еще одна пятница". Комедия
03.25 "Теория соблазна". Комедия

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.30 "Телекомпас"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.40 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**17.00 "Выборы-2010"**
**17.10 "Виктория"**
**18.00 "Йома"**
**18.20 "Народные мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Наш мир"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Забытые войны"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Дневник Хылыукай"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.50 Художественный фильм". По окончании: погода**

## 20 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Керлинг. Женщины. Россия - Швейцария
11.00 "Моя родословная"
11.50 "Ералаш"
12.00 Новости
12.10 "Я буду вам сниться... Никита Михайловский"
13.10 "Вам и не снилось..." Мелодрама
14.50 "Детсадовский полицейский". Комедия
16.50 "Юрий Антонов. Под крышей дома своего"
18.00 "Кто хочет стать миллионером?"
19.00 "Две звезды"
21.00 "Время"
21.20 "Любовь под прикрытием". Комедия
23.10 "Остаться в живых". Сериал
00.00 "Очень страшное кино-4"
01.30 "Римская империя. Бунт иудеев"
02.30 XXI Зимние Олимпийские игры в Канаде. Лыжные гонки. Мужчины. Дуатлон
04.00 "Лига джентльменов Апокалипсиса"

### РОССИЯ 1
05.45 "Ответный ход". Приключения
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00 "Вести"
08.10, 11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Мистер Нянь". Комедия
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Телохранитель". Сериал (в перерыве 14.00 "Вести", 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан")
16.10 "Ты и я"
17.10 "Субботний вечер"
19.00 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Совсем другая жизнь". Мелодрама
00.30 "Конец игры". Боевик
02.35 "Кошмар на улице Вязов: дитя сна". Фильм ужасов
04.15 "Горячая десятка"

### НТВ
05.15 "Приключения пиратов в стране овощей". Полнометражный мультипликационный фильм
06.40 "Легион супергероев-2"
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Кремлевская кухня"
15.05 "Своя игра"
16.25 "Адвокат". "Реквием по мечте". Детективный сериал
17.25 "Очная ставка"
18.25 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.40 "Легенды видео". "Стриптиз". Драма
00.55 "Джейсон Икс". Фантастика
02.45 "Большой вальс". Драма

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.45 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.20 "Советы садоводам"**
**10.40 "Волшебный курай"**
**11.25 Р. Киньябаев. "А Торатау и ныне там". Спектакль Стерлитамакского башкирского государственного драматического театра**
**13.30 "Оперный сезон"**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40 "Дарю песню"**
**16.00 Мультсериал**
**16.30 "Позитив"**
**16.55 Чемпионат России по волейболу среди мужских команд. "Урал" (Уфа) - "Тюмень" (Тюмень). Прямая трансляция**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.20 "Дарю песню"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Замандаш". Ф. Хисаметдинова**
**21.10 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.40 "Песнь о любви"**
**00.10 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 21 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 XXI зимние Олимпийские игры в Канаде. Хоккей. Сборная Латвии - сборная Словакии. Шорт-трек
08.00 Новости
08.10 Мультфильм
08.30 "Внутри урага Катрина"
09.30 "Армейский магазин"
10.00 XXI зимние Олимпийские игры в Канаде. Хоккей. Сборная Белоруссии - сборная Германии
12.30 "Пока все дома"
13.20 "Крепкий орешек. Возмездие". Боевик
15.40 "Воры в законе". Криминальная драма
17.20 "Большие гонки"
18.40 "Маленькая Москва". Драма
21.00 Воскресное "Время"
21.45 "Прожекторперисхилтон"
22.20 "Тело в любви". Фильм
23.45 XXI зимние Олимпийские игры в Канаде. Биатлон. Санный спорт. Конькобежный спорт. Горные лыжи
00.30 "Тихий дом"
01.00 "Унесенные"
02.40 "Билокси-Блюз"

### РОССИЯ 1
05.20 "Горячий снег"
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Утренняя почта"
09.10 "Остров ошибок"
09.35 "Пограничный пес алый". Приключения
11.00, 14.00 "Вести"
11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Черчилль". Детективный сериал
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.30 "Аншлаг" на Севере"
17.40 "Танцы со звездами". Сезон-2010"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Ищу тебя". Мелодрама
23.00 "Стальные тела". Боевик
01.00 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере. Хоккей. Мужчины. Россия - Чехия. Прямая трансляция
03.20 XXI Зимние Олимпийские игры в Ванкувере. Биатлон. Масс-старт. Женщины
04.15 "Комната смеха"

### НТВ
05.20 Мультфильм
05.30 "Застава в горах". Приключения
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.55 "Спасатели"
11.25 "Первая кровь"
12.00 "Дачный ответ"
13.20 "Особо опасен!"
14.05 "Алтарь победы"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Адвокат". "Призрак". Детективный сериал
17.25 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.25 "Следопыт". По следам следователя". Сериал
00.00 "Авиаторы"
00.40 "Не оставляющий следа". Триллер
02.35 "Леди Чаттерлей". Драма

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Для вас, ветераны!"**
**08.45, 22.40 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.00 "Кукушкин чай"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семэр"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Артылыш"**
**13.00 "Ледовые площадки Уфы"**
**13.15 Республиканский конкурс исполнителей бшкирской народной песни "Узун кюй", г. Туймазы**
**14.15 "Дарю песню"**
**15.15 Мультсериал**
**15.40 "Салям". Воскресный выпуск**
**16.00 "Дарю песню"**
**16.55 Открытое Первенство России по хоккею. "Торос" (Нефтекамск) - "Молот-Прикамье" (Пермь). Прямая трансляция**
**19.25 "Рыцари неба"**
**19.55 "Новое кино"**
**20.15 "В центре внимания"**
**20.35 "Крылья"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.45 "Соловьиная трель"**
**23.20 Художественный фильм. По окончании: погода**




**"Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәте "Башҡорт энциклопедияһы"ның (рус телендә) 1,2,3,4-се томдарын; "Салауат Юлаев" энциклопедияһын; "Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге"н һәм башҡа китаптар һата. Адрес: Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 55. Телефондар: 250-00-56; 250-03-92.**

✓ *Беҙ үҙ халҡыбыҙға милләт булараҡ бергә тупланып йәшәргә ярҙам итә алабыҙ. Тап шуға ла III Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайында Ҡаҙағстан башҡорттары ла үҙҙәре тураһында һөйләй алыр, тип уйлайым.*



*БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ*

# БЕР МАҠСАТ МЕНӘН БАРҘЫҠ...

## төрлө сәбәп менән ҡалдыҡ



**Башҡортостандан ситтә йәшәп тә, үҙен тыуған иле менән айырылғыһыҙ итеп тойған һәм был рухи епте бүтән милләттәштәренең дә күңеленән үткәреп, бер уҫҡа төйнәргә тырышҡан егет-ҡыҙҙарыбыҙ бар. Шуларҙың береһе - Ҡаҙағстандың Алматы ҡалаһында йәшәгән яҡташыбыҙ "Ағиҙел" башҡорт мәҙәниәте үҙәге" Республика ижтимағи ойошмаһы етәксеһе Азамат РЫҪКИЛДИН. Ул баш ҡалабыҙға III Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреүгә әҙерлек мәсьәләләре буйынса килгән. Ошо уңайҙан файҙаланып, унан Ҡаҙағстан башҡорттары, уларҙың йәшәйеше, эшмәкәрлеге тураһында һөйләүен һораныҡ.**

### Беҙ - Баймаҡтан

Әлеге ваҡытта Ҡаҙағстанда йәшәүсе башҡорттар төрлө күрһәткестәр буйынса 15 меңдән алып 20 меңгә тиклем тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта 1989 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтарына ҡарағанда Ҡаҙағстанда 40 мең тирәһе башҡорт йәшәгән. Улар нигеҙҙә үткән быуаттың 60-70-се йылдарында, Ҡаҙағстанда сиҙәм ерҙәрен үҙләштереү менән бер рәттән сәнәғәт, социаль һәм торлаҡ төҙөлөшө буйынса дөйөм союз программалары тормошҡа ашырылған ваҡытта күсеп килеүселәр була. Минең атай-әсәйемдәр ҙә 1972 йылда Баймаҡ ҡалаһынан ул ваҡытта Турғай, хәҙер Ҡустанай өлкәһенә ҡараған Арҡалыҡ ҡалаһына күсеп килә. СССР тарҡалғас, яңыса ҡоролош алған илдең социаль-иҡтисади хәле насарая төшә һәм аграр, сәнәғәт секторында мәшғүл булыусы күпселек халыҡ эшһеҙ ҡала, бына шул осорҙа башҡорттарҙың байтағы тыуған яғына әйләнеп ҡайта. Ҡаҙағстанда бары тик ғаиләһе, эше булып, социаль бәйләнешкә ингән башҡорттар ғына тороп ҡала. Мәҫәлән, ҡустым менән беҙ 90-сы йылдар башында Абай исемендәге Алматы дәүләт университетында тарих һәм юридик факультетында уҡый инек. Урал ҡустым уҡыуын тамамлағас, дәүләт хеҙмәтендә эшләне, мин кафедрала уҡытырға ҡалдым. Ә бындай миҫалдар бик күп. Мәҫәлән, ошо уҡ яҙмыш менән тороп ҡалған Миңзәлә Байбулатова бөгөн Аҡтау ҡалаһында, Фәниә апай Ҡустанайҙа милләттәштәребеҙҙе берләштерергә тырышҡан лидерыбыҙҙың береһе булып торалар. Аҡтүбә ҡалаһында йәшәүсе Нурия апай Ғайсина ла, хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, ижтимағи эштәрҙә ҙур әүҙемлек күрһәтә.

### Ҡаҙағстан - Башҡортостан күперен һалыу

Бала саҡта атай-әсәйем мине тыуған яҡтарға - Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылына алып ҡайта торғайны. Унда бесән сабыу, көтөү көтөү кеүек хәтирәләр иҫтә уйылып ҡалған. Ҡартатайым менән өләсәйем минең өсөн рухи-әхлаҡи сығанаҡ өлгөһө булып торҙо. Бохарбай олатайымдың миңә: "Ырыуың Түңгәүер булыр", - тип әйтеүе хәтерҙә уйылып ҡалған. Был һүҙҙәр миңә ҡайҙан сығыуым һәм кем булыуымды онотторға бирмәй. Кеше тыуған телен онотҡанда ла, үҙ ырыуын белә икән, ул бер ваҡытта ла рухи асылын юғалтмай. Ошо тыуған ил, милләт тойғоһо мине Ҡаҙағстан ерендә йәшәгән башҡорттарҙы табып, бергә тупларға, тигән уйға этәрҙе лә инде. Шулай итеп, бер төркөм яҡташтар менән Алма-Ата ҡалаһында "Ағиҙел" башҡорт мәҙәниәте үҙәге" Республика ижтимағи ойошмаһын төҙөп ебәрҙек. Шулай уҡ был ойошма Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһында фәнни-производство, мәғариф бәйләнештәрен барлыҡҡа килтереү маҡсатынан да сығып эшләнде. Был эште башлап ебәргәс, беҙ Башҡортостанда үткән ике конференцияла ҡатнаштыҡ. Беҙҙә лә ике сара - Төрки мәҙәни мираҫын һаҡлау буйынса конференция һәм БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы менән "Төрксой" ойошторған ғилми симпозиум үтте. Унда башҡорт милли кухняһы презентацияһын үткәрҙек. Шулай уҡ Ҡаҙағстанда үткәрелгән "Һин - һылыу" тигән конкурста Айгөл Байрамғолова тигән ҡыҙыбыҙҙы ҡатнаштырҙыҡ. Быйылғы йылда беҙҙең ойошма алдында Ҡаҙағстанда туғыҙ мәҙәни үҙәк ойоштороу маҡсаты тора. Уны, тәү сиратта, бер меңдән алып биш мең тирәһе башҡорт халҡы йәшәгән Ҡустанай, Ҡарағанда, Аҡтүбә өлкәләрендә булдырыу ҡаралған. Бөгөн Ҡаҙағстан халыҡ-ара кимәлдәге инвестицияларға киң юл асты, илдең аяҡҡа баҫыуы халыҡ-ара кимәлдә танылыу таба килә. Ул Европала хәүефһеҙлек һәм хеҙмәттәшлек буйынса ойошма, БДБ илдәре, Шанхай ойошмалары менән хеҙмәттәшлек итә. Тап шуға ла бындай милли-мәҙәни ойошмалар Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһында тере күпер һалыуға, үткән быуаттың 90-сы йылдарында өҙөлгән бәйләнештәрҙе яйға һалыу һәм нығытыуға булышлыҡ итер ине.

### Ҡоролтайҙа әйтер һүҙебеҙ бар

Ҡаҙағстанда башҡорт халҡына ҡарата яҡшы мөнәсәбәт һаҡлана, урындағы халыҡ беҙгә ихтирам менән ҡарай. Башҡорттар әле унда бик аҙ һәм бары тик туғанлыҡ ептәре аша ғына һаҡлана килә. Улары ла бер быуын үтеү менән милләт булараҡ тәбиғи рәүештә юғалыуы ихтимал. Башҡорт үҙ тарихи ерлегендә, Урал батыр төйәгендә генә ысын башҡорт булып ҡала ала. Беҙ иһә, тыуған яҡтарыбыҙға ҡайта алмаған хәлдә лә, урындарҙа үҙ халҡыбыҙға милләт булараҡ бергә тупланып йәшәргә ярҙам итә алабыҙ. Тап шуға ла III Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайында Ҡаҙағстан башҡорттары ла үҙҙәре тураһында һөйләй алыр, тип уйлайым. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, унда халҡыбыҙҙың, мәҙәни үҙәктәрҙең абруйын күтәреү буйынса эштәр алып барабыҙ. Ул төрлөсә башҡарыла. Әйтәйек, Зәйнулла ишан Рәсүлевтың ҡаҙаҡтар тормошонда ниндәй роль уйнауын уларға еткереү әһәмиәтле булыр, тип уйлайым. Әгәр Зәйнулла ишан булмаһа, Өфөлә уның шәкерттәре уҡытҡан "Ғәлиә" мәҙрәсәһе лә булмаҫ ине. Ә был мәҙрәсәлә күпме ҡаҙаҡ белем алған. Зәйнулла ишан, Аҡмулла, Абай кеүек остаздар булмаһа, Зәки Вәлиди, Мостафа Шокай, Шәйехзада Бабич, Әхмәт Байторсон кеүек шәхестәребеҙ ҙә булмаҫ ине. Улар барыһы ла бер үк мәҙәни-рухи мәктәпте үткән бит. Туғанлыҡ рухын тергеҙергә кәрәк. Ошо йәһәттән, Ҡаҙағстан ҡала һәм райондары буйлап Башҡортостан артистары ҡатнашлығында концерттар ойоштороу ҙа планлаштырылған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Азамат Хөрмәт улы Ҡаҙағстанда йәшәүсе барлыҡ башҡорттарҙы бергә тупланырға, үҙ-ара бәйләнештәр булдырып, аралашып йәшәргә саҡыра һәм беҙҙең уҡыусыларҙан да унда йәшәүсе туғандарына был үтенесте еткереүҙе һорай. Был быйыл Башҡортостан Республикаһында үтәсәк III Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайына алдынғы ҡарашлы, милли рух йөрөткән лайыҡлы делегаттар һайлауға ла мөмкинлек бирәсәк, тигән фекерҙә ул. Милләт яҙмышына, халыҡ киләсәгенә битараф булмағандар түбәндәге адрес буйынса мөрәжәғәт итә ала: Ҡаҙағстан, Алматы ҡалаһы, алтынсы микрорайон, 35-6 йәки Астана ҡалаһы, Абай урамы, 23, офис 2/5. Телефон: 8-777-2558944. Электрон адрес: azamatr@mail.ru.**

**Динара ИШБУЛАТОВА яҙып алды.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**16 февралдә** М.Ғиләжевтың **"Һөйәм, һағынам"** комедияһы.

**17 февралдә** Т.Миңнуллиндың **"Мулла"** драматик хикәйәһе.

**18 февралдә** Ә.Атнабаевтың **"Балаҡайҙарым"** драмаһы.

**19 февралдә** М.Кәримдең **"Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"** спектакле

**20 февралдә** Н.Ғәйетбаевтың **"Аты барҙың - дәрте бар"** комедияһы.

**21 февралдә** Т.Дәүләтбирҙинаның **"Минең ғаиләм"** мелодрамаһы

**КЕМ АЛЫҠ?**

**Түбәндәге һорауҙарға тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап биреүсе ике кеше театр тамашаларына саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк. Йәгеҙ, кем алыҡ?**

1. "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектаклендә Һары серекәй ролен кем уйнай?
2. "Минең ғаиләм" спектакленең режиссеры?
3. М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының директоры кем?

**Телефон: 8-937-3419192**

## Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 февралдә** Т.Миңнуллиндың **"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** тамашаһы.

## Ғашиҡтар көнөнә арналған "Шау-шоу"

**14 февралдә** "Өфө уттары" күңел асыу комплексында Ғашиҡтар көнөнә арналған - **"Шау-шоу"** була. Ойоштороусылары - Башҡорт йәштәре иттифағы, БСТ+, "Юлдаш-new" каналы, "БТВ-медиа" үҙәге, "Шоңҡар" журналы редакцияһы.

Концертта башҡорт эстрадаһының популяр йырсылары - Рөстәм Ғиззәтуллин, Сәғиҙулла Байегет, МС Баш, Радик Юлъяҡшин, Марсель Ҡотоев, Дэни, Анжелика, "Азия" дуэты, "Һомай", "Башстайл" төркөмдәре, "Беҙгә барыбер" егеттәре ҡатнаша. Икенсе бүлектә төркөмдөң солисы Артур Алибаковтан тере тауышта моңло хиттар һәм яңы программа тәҡдим ителәсәк. Унда иң романтик йырҙар, иң тетрәндергес мөхәббәт тарихы хаҡында моңло хикәйәттәр яңғырар. Өсөнсө бүлектә тәүге тапҡыр башҡорт йәштәре өсөн баш ҡаланың популяр ди-джейҙары DJ Gabba һәм DJ Самойлов ҡатнашлығында дискотека, лазер-шоу! Билеттар "Өфө уттары" кассаһында һатыла. Хаҡы: 150-500 һум.

*ИҒЛАН*

**Тарих, йәмғиәтте өйрәнеү предметтарынан БДИ-ға әҙерләнеү буйынса арзан хаҡҡа репетиторлыҡ алып барам.**

**Белешмәләр өсөн телефон: 8-917-427-51-09.**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА...*

# АСЫҠ КҮҘҘӘР МЕНӘН...

## сөскөрөп булмай

- Беренсе түләүле бәҙрәфтәр Англияла барлыҡҡа килгән һәм унда инеү хаҡы 2 пенс торған.
- Бер кубометр ағастан ярты миллион теш таҙартҡыс эшләргә мөмкин.
- Баш менән стенаны "төйөп" сәғәтенә 150 калорийҙы юғалтырға була.
- Әгәр крандан секундына бер тамсы һыу тама икән, бер йылдан һуң был һыу 10 000 литрға етә.
- Асыҡ күҙҙәр менән сөскөрөп булмай.
- Нефттең тик бер генә тамсыһы 25 литр һыуҙы эсергә яраҡһыҙ итә.
- Йыл һайын ғүмерҙе страховкалауға ҡарағанда алкоголь һәм тәмәкегә күберәк аҡса сарыф ителә.
- Әгәр донъялағы төрлө һыу сығанаҡтарындағы бөтә һыуҙы асыҡ океанға ҡойһаң, уның кимәле 3 см ғына күтәреләсәк.
- Суд эксперттары кешенең енесен, йәшен һәм расаһын сәс өлтөгөн тикшереп кенә лә билдәләй ала.
- Госпиталдәрҙә күп үлемдәр кеше тәне хәлһеҙләнгән ваҡытта, сәғәт 4 менән 6 араһында була.
- Донъялағы беренсе аптека беҙҙең эрала 1000 йыл элек Бағдадта асылған.
- Бер көндә бер ҡап тәмәке тартып бөткән кеше көнөнә ярты сынаяҡ ыҫмала эскән кеүек булыр.

*Бай булырға түгел, аҡыллы булырға тырыш - байлыҡтан яҙырһың, аҡыл һәр саҡ үҙең менән ҡалыр.*

*(Эзоп).*



АФАРИН!



# ХЫЯЛДАРҘЫ ЫСЫН ИТКӘН...

## бәүелсәк ул - "Йәншишмә" гәзите

Барығыҙҙың да бала саҡта аҫмалы бәүелсәктә бәүелгәне барҙыр. Башта унда ултырырға бер аҙ баҙнат итмәй торап, шөрләтә. Шулай ҙа ҡыҙыҡһыныу ҡурҡыуҙан көслөрәк булып сыға. Ана ла һуң һинең тиҫтерҙәрең кемуҙарҙан елдәр уйнатып һауа иңләй. Һәм һин бөтә батырсылығыңды йыйып, шул бәүелсәктең ике яҡ ебенә серәнеп тотоноп, уға һаҡ ҡына ҡунаҡлайһың. Бәхтиһән, аяҡтарҙы ергә ныҡлы терәп, күккә ҡарай талпыныу ҙа етә икән, көс-кеүәтте ул һинә үҙе бирә. Быйна ул һине күккә, юғарыға алып менеп китә. Индәреңә ҡанаттар үҫкәнме ни! Һин буй етмәҫлек хыялыңа табан осаһың, бәүелгән һайын юғарыраҡҡа артылғы килә. Көтөлмәгән хис-тойғолар тулҡынынан шатланаһың, был кисерештәрҙе тиҙерәк бүтәндәр менән бүлешкен килә... "Йәншишмә" гәзитендә тәүге мәҡәләм баҫылып сыҡҡас, тап ошондай хистәр ҡойононда күккә олғашҡайным мин. Унан һуң матбуғат биттәрендә әллә күпме мәҡәләләр сығa торҙо, әммә шул тәү тапҡыр ташҡа баҫылған йөрәк һүҙҙәремдә алып ҡыуаныу мәле бөрөһе менән дә сағыштырырлыҡ түгел. "Йәншишмә" гәзите - балалыҡ менән йәшлек араһында тороусы күпер, ысынбарлыҡ менән хыял араһында бәүелткән бәүелсәк, һинең тәүге эскерһеҙ хистәреңде уртаҡлашыусы серҙәш, күңелдәрҙең иләҫ-миләҫ сағында дөрөҫ юл күрһәтеүсе кәңәшсе, кешелеккә ҡарата әйтелгән тәүге уй-фекерҙәреңә ҡанат ҡуйыусы рухташ та ул. Күпме үҫмер ошо йәш дуҫы аша үҙен борсоған һорауҙарға яуап тапҡандыр, һағышын һүткәндер, хисен түккәндер, фекер ныҒытҡандыр, күңел хазинаһын байытҡандыр. Әллә күпме үҫмерҙең күңелендә морон төрткән илһам бөрөһө унан тере һыу, йылы нур алып күҙен асҡандыр. Эйе, йәш ижадсыға күңел ҡанаты үҫтереүсе бәүелсәк, оло журналистикаға алып сығыусы инеш ул - "Йәншишмә" гәзите.

Шулай итеп, мин дә "Йәншишмә" бәүелсәгендә әллә күпме тиҫтерҙәрем менән аралаштым, уларҙың тормошо, йәшәйеше, уйҙары менән уртаҡлаштым, бәләкәй генә ижадыма һуҡмаҡ һалдым һәм яңы килеп тыуған хыялыма юл алдым. Шул саҡта бергә бәүелгән тиҫтерҙәрем, яратҡан дуҫыбыҙҙың "Йәш хәбәрселәре" менән бөгөн журналистика тиғән мауыҡтырғыс донъяла ҡанат нығытабыҙ, ҡәләм ослайбыҙ, тәжрибә туплайбыҙ. Бәләкәй дуҫыбыҙҙың оло юбилейын ҡаршылағанда уның бәүелсәгендә шат тауыштар яңғыратып бәүелгән малай һәм ҡыҙҙарҙың күп булыуын, һәм был бәүелсәктең ебе ныҡлы, юғарыға осорған тарафтары киң булыуын теләге килә.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

ХОККЕЙ

# ТУЛЫ ЕҢЕҮ КӨТӘБЕҘ

**Континенталь хоккей лигаһы чемпионатында уйнаусы командалар ҙур тәнәфескә туктаны. Ул 3 мартҡа тиклем дауам итәсәк.**

Ҙур тәнәфес башланыр алдынан ғына "Салауат Юлаев" командаһы Ҡаҙанда "Аҡ барыҫ" хоккейсылары менән көс һынашты. Билдәле булыуынса, "Аҡ барыҫ" чемпионатта иң көслө командаларҙың береһе, әле гәмәлдәге чемпион.

Юлаевсылар Ҡаҙанға Түбәнге Кама ҡалаһында "Нефтехимик"ты 2:0 иҫәбе менән еңгәндән һуң яҡшы кәйеф менән килде. Уларҙың маҡсаты - Ҡаҙан хоккейсыларын үҙҙәренең майҙанында еңеү. "Аҡ барыҫ" хоккейсылары уйынды бик уңышлы башланы. Осрашыуҙың тәүге минуттарында уҡ команда капитаны Алексей Морозов, күпселектә уйнауҙан оҫта файҙаланып, иҫәпте асып та өлгөрҙө. Әммә ул беренсе һәм һуңғы гол булды. Ҡунаҡтар иһә сәмләнде, йышыраҡ һөжүм итеүгә күсте. "Аҡ барыҫ" ҡапҡаһы алдында әленән-әле ҡойон уйнаны. Һөжүмтә көтөрмөнә. Кирилл Кольцов һуҡҡан шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһын тота алмай ҡалды. Хәҙер иҫәп 1:1. Юлаевсылар тиҙлекте йөнә арттыра төштө һәм Патрик Торесен иҫәпте икегә еткерҙе. Һуңғы осорҙа Андрей Сидякин өсөнсө, ә уйын тамамланыр алдынан Владимир Антипов дүртенсе еңеүле шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһына сәпәне. Уйын 4:1 иҫәбенә ҡунаҡтарҙың хаҡлы еңеүе менән бөттө.

Хәҙер юлаевсылар 120 мәрәй менән иң алда бара. Ә Санкт-Петербургтың СКА командаһы 116 мәрәй менән икенсе урынды биләй.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## З. БИИШЕВА ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТОСТАН "КИТАП" НӘШРИӘТЕ ТӘҠДИМ ИТӘ:



**Р. Ш. Вахитов. От Урала-батыра до Салавата Юлаева (Урал батырҙан Салауат Юлаевҡа тиклем). Рус телендә.**

Был китапта тәүтормош-община ҡоролошо дәүерендә Уралдың тау-урманлы ерҙәрендә башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе тураһында бәйән ителә. Автор бик боронғо башҡорттарҙың баҡыр һәм бронза осоронда металл эшкәртеү, солоҡсолоҡ, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә башлауҙарын күҙҙән үткәрә. Радик Вахитов Салауат Юлаевтың ата-бабалары тураһында яңы мәғлүмәттәр аса, уның нәҫелдәре хаҡында һөйләп бирә.



**"Башҡортостандың иң гүзәл 100 төбәге" (100 самых красивых мест Башкортостана). Рус телендә.**

2009 йылдың йәйендә был популяр китап бик тиҙ һатылып бөттө. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте тәҡдим итә, сағыу һүрәттәр менән биҙәлгән ошо күркәм баҫманың өҫтәлмә тиражын нәшер итергә форсат тапты. Республикабыҙҙың гүзәл тәбиғәте тураһында әҙерләнгән ентекле белешмә-баҫма яңынан тәҡдим ителә.

**Китаптарҙы түбәндәге адрестар буйынса һатып алырға була: Өфө ҡалаһы, Левченко урамы, 4а; Октябрь проспекты, 2 ("Мир фирмаһы" туҡталышы). Тел.: (347) 223-88-38, 246-09-55.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠСА ЙЫЙЫУ...

## ул ярты аҡыллылыҡ билдәһе

Йомарт малын үҙе ашар, һаран малын эт ашар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тыуған илде бөйөк булған өсөн түгел, ә үҙеңдеке булған өсөн һөйәләр.

**(Сенека).**

Бай булырға түгел, аҡыллы булырға тырыш - байлыҡтан яҙырһың, аҡыл һәр саҡ үҙең менән ҡалыр.

**(Эзоп).**

Бай булыр өсөн тырышып аҡса йыйыу - ул ярты аҡыллылыҡ йәки түбән йәнлелек билдәһе ул.

**(С. Франк).**

Байрам итеү гәҙәте менән бергә кешегә эс бошоу сифаты ла бирелгән.

**(Ж. Лабрюйер).**

Аҡһөйәктәр йәмғиәтендә кемдәрме? Йәрәкһеҙ ҡыҙ-ҡатындар һәм мейеһеҙ ирҙәр йыйылған унда һәм улар береһенә торорлоҡ.

**(А. Детуш).**

Азатлыҡ - ул яуаплылыҡ. Шуға ла унан барыһы ла ҡурҡа.

**(Бернард Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Был хәл Сөләймән бәйғәмбәр заманында була. Бер кеше тирләп-бешеп бәйғәмбәр һарайының ҡапҡа төбөнә килеп туктай. Уның ҡурҡыуҙан ағарынған йөҙөн күреп, бәйғәмбәр: "Ни булды?" - тип һорай. "Мин Ғәзраилды күрҙем, - ти кеше. - Ул миңә шул тиклем асыуланып ҡараны". "Ә мин нимә эшләй алам?" - тип һорай унан тағы ла Сөләймән бәйғәмбәр. "Ел менән өрҙөрөп, мине Һиндостанға алып барып төшөр. Шулайтып, мин Ғәзраилдан йәнемде ҡотҡарып ҡалайым..." Бәйғәмбәр уның үтенесен үтәй: елгә был кешене Һиндостандың үҙәгенә үк осороп алып барып ташларға бойора.**

**Икенсе көндө Сөләймән бәйғәмбәр Ғәзраилды осрата һәм:" Һин ни өсөн ул кешегә асыуланып ҡараның, ул ҡурҡышынан ғаиләһен һәм илен ҡалдырып, сит тарафтарға ҡасып китте", - ти. "Мин уға асыуланып ҡараманым, - ти Ғәзраил. - Алла миңә: "Иртәгә һин Һиндостанға бар һәм ул кешенең йәнен ал!" , - тип бойорҙо. Ә ул кеше бында йөрөп ята. Ул иртәгә нисек итеп Һиндостанға барып етә алыр икән, тип аптырап ҡараным мин уға..."**

**Быйна шулай, беҙ йыш ҡына үҙ-үҙебеҙҙән ҡасабыҙ. Алланан да ҡасып ҡотолорға теләйбеҙ. Был бит файҙаһыҙ. Яҙмыштан, Алла ҡушҡандан ҡасып булмай..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 533